ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
23-29 март (буранай) 2019
№ 12 (846)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Үҙегеҙҙең төбәктәге**
Башҡортостан автономияһы өсөн көрәшеүселәрҙе беләһегеҙме?

2-3

**Өфө губернаһында...**
һан буйынса башҡорттар өҫтөнлөк иткән

6-7

**Үҙ шәхестәребеҙҙе беләйек!**

6-7, 9

**Әҫәрҙәребеҙ геройҙары...**

Бабич, Вәлиди, Мырҙабулатов
11

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә март аҙағына тиклем 2019 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда яҙылыу бара. 615 һумға әле үк яҙылып ҡуйһағыҙ, отороғоҙ. Апрелдән хаҡтар бер аҙ юғарыраҡ буласаҡ. Февраль, март айҙарында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәрҙән кемдәрҙеңдер беҙҙән бүләккә матур китаптар ҙа алыуы мөмкин. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

БАЙРАМ МЕНӘН!

*Шәйехзада БАБИЧ*

## БАШҠОРТОСТАН

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптаймын тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сапҡан яу
Башҡорт йөнен ҡаҡшатмаҫ,
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.
Башҡортостан - гөлбостан,
Сөнбөлөстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!
Башҡортостан баҡсаһы -
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы -
Ҡаһармандар йөрөгән ер;
Ҡаһармандар ҡәүҙәһен
Ҡосаҡлаған, күмгән ер;
Хәләл ҡандар шәүләһен
Күккә тәрсим ҡылған ер.
Башҡортостан - гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан.

Башҡорт халҡы тарихта
Ғәйрәт менән фаш булған;
Киң иреккә ашҡынған
Күңелдәге ташҡындан;
Һәр ваҡытта намыҫын
Үҙ башына баш ҡылған;
Тыуған илен һаҡлауға
Үҙе булған таш ҡурған.
Башҡортостан - гөлбостан,
Рәйханостан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан.
Көслө намыҫ, ташҡын йән
Торҙо, тағы ҡалҡынды;
Тағы башҡорт халҡында
Иҫке ялҡын балҡыны.
Мең йәһәннәм тыуҙырыр
Бер башҡорттоң ялҡыны;
Миллион ожмах яратыр
Бер Уралдың алтыны!
Башҡортостан - нурбостан,
Рәйханостан, гөлбостан.
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан.

Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур;
Киләсәктә был ергә
Хоҙай үҙе ҡыҙығыр;
Фирҙәүестәр төҙәләр,
Әлуан ниғмәт тезелер;
Күкте ташлап мәләктәр,
Был ерҙәргә гиҙенер.
Башҡортостан - йәмбостан,
Илһамстан, шиғырстан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт намлы арыҫлан!
Ҡыуан аңлап, эй, Ватан,
Беҙ аңланыҡ хәлеңде;
Һине һалып ҡулбашҡа,
Беҙ йөкләнек гәмеңде.
Ғәреш ағлә өҫтөңә
Мендерербеҙ даныңды;
Беҙ фидаи һиненсөн -
Йәшәтербеҙ намыҫыңды!
Башҡортостан йәшәһен,
Сөнбөлөстан йәшәһен!
Шунда тыуып, шунда үҫкән
Арыҫландар йәшәһен!




12+

✓ Дөрөҫөн әйткәндә, ҡайһы берәүҙәрҙе, тыуған районыңда, ауылыңда автономия өсөн көрәшкән ниндәй шәхестәр булған, тигән һорау аптырашта ҡалдыра. Ә бит бик күп булған автономия өсөн ғүмерен йәлләмәгән яҡташтарыбыҙ.



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Үҙегеҙҙең төбәктәге Башҡортостан автономияһы өсөн көрәшеүселәрҙе беләһегеҙме?

***Фуат СӨЛӘЙМӘНОВ, тарих фәндәре кандидаты, БДУ-ның Сибай институты доценты:*** Башҡорттарҙың үҙ автономияһы өсөн көрәше тарихында Башҡортостандың, әлегесә әйткәндә, Урал аръяғы төбәктәренең дә ҡаһарман шәхестәре өлөшө баһалап бөткөһөҙ була. Был төбәктең төп халҡын тәшкил итеүсе боронғо башҡорт ырыуҙары: бөрйәндәр, түңгәүерҙәр, ҡыпсаҡтар, тамъяндар, күбәләктәр, үҫәргәндәр нәҫелдәре араһынан, һәр ваҡыттағыса, халҡыбыҙ яҙмышында хәл иткес мәлдәрҙә була килгәнсә, иле, халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылырҙай батыр йөрәкле ир-егеттәр - бөйөк шәхестәребеҙ ҡалҡып сыға. Хәҙерге Баймаҡ менән Йылайыр райондары ул осорҙа Орск өйәҙенең 1-се һәм 2-се Түңгәүер улыстарына ҡараған була. Азамат ир-егеттәрҙең күбеһе ул йылдарҙа легендар комбриг Муса Мортазин етәкселегендәге Башҡорт кавалерия бригадаһында хеҙмәт итә. Шуларҙың береһе - минең ҡаһарман ауылдашым, заманына күрә белемле, мәҙрәсә бөтөргән һәм урыҫ грамотаһын яҡшы белгән Заһиҙулла Аллабирҙин. Ул Әхмәтзәки Вәлиди менән яҡындан таныш була, яңы Рәсәй составындағы Башҡорт автономияһын иғлан итеүгә алып килгән ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнай. 3-сө Бөтөн башҡорт ҡоролтайына әҙерлек барған осорҙа 1917 йылдың 30 октябрендә Үрге Сәлим ауылында Заһиҙулла Аллабирҙиндың өйөндә Орск өйәҙе башҡорттарының йыйылышы булып үтә, унда ошо өйәҙҙең 28 мең башҡорто исеменән Ҡоролтайға 3 делегат һайлана. Ауылдың оло кешеләре һөйләүенсә, З.Аллабирҙин Башҡорт ғәскәрендә полк муллаһы булып хеҙмәт итә. Уның менән бергә ауылдаштары Хисаметдин Сөләймәнов, Солтанәхмәт менән Сәйетбаттал Мәксүтовтар, Кинйәғәле Таҡаев һәм башҡалар ҙа була, уларҙы "Вәлидов адъютанттары" тип йөрөтә халыҡ. 1920 йылда Урта Азияға китеп барышлай, Әхмәтзәки Вәлиди З. Аллабирҙиндың өйөнә һуғыла, һәм ул дуҫтары менән Вәлидиҙе тройкалы аттар егеп, Сара тимер юл станцияһына тиклем оҙата бара. Шәхес культы башланғас, ҡулға алына һәм атып үлтерелә.

Йылайыр районынан автономия өсөн көрәшселәрҙән тағы бер шәхес Заһиҙулла Ҡаҙнабаев иһә сығышы менән Балапан ауылыныҡы. Башҡорт ғәскәренә ул 1918 йылда килеп ҡушыла. 1919 йылда Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы составында Көньяҡ фронтта Деникин армияһына ҡаршы һуғыша, Петроградты обороналауҙа ҡатнаша.1920 йылда поляктар менән һуғышта тиңһеҙ батырлыҡ күрһәтә һәм 1921 йылда Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана. Башҡорт ғәскәре сафтарында уның ауылдаштары Солтансәлим Йәрембәтов, Шакирйән Сөләймәновтар ҙа хеҙмәт итә. Золом башланғас, улар бөтәһе лә ҡулға алынып, 10-ар йылға хөкөм ителә. З. Ҡаҙнабаев 1943 йылда төрмәлә вафат була.




Тағы бер түңгәүер башҡорто - Шәмсетдин Яҡшыгилдиндың да ҡаһарман яҙмышы автономиябыҙ тарихында сағыу эҙ ҡалдырған. Мөхәмәтрәхим (бөгөн - Матрай) ауылында тыуған. 1918 йылда үҙ теләге менән Башҡорт ғәскәренә ҡушыла. 1919 йылдың яҙы - Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһында Деникин армияһына ҡаршы, көҙ Петроград фронтында һуғыша. 1920 йылда ул хеҙмәт иткән полк С.Буденныйҙың 1-се Атлылар армияһында аҡ поляктарға һәм бандаларға ҡаршы алыша. Батырлыҡтары 1922 йыл Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән баһалана. Бәхеткә күрә, автономия өсөн көрәшселәр сафына ҡаршы аяуһыҙ ҡырғындан ни мөғжизә менәндер иҫән ҡалып, 82 йәшендә үҙ үлеме менән вафат булған бик һирәктәрҙең береһелер ул, моғайын. 1921 йылда демобилизацияланғас, төрлө яуаплы етәксе вазифалар башҡара. Шуныһы ҡыҙыҡ: 1936 йыл Мәскәүҙә Яҡшыгилдин "СССР Конституцияһын ҡабул итеү буйынса Советтарҙың ғәҙәттән тыш съезы"нда ҡатнаша һәм Советтарҙың Бөтөн Союз ғәҙәттән тыш VIII съезына делегат итеп һайлана. Бәлки, тап ошо факт уның иҫән ҡалыуына сәбәпсе булғандыр ҙа әле. Бөйөк Ватан һуғышында фашистарға ҡаршы батырҙарса һуғыша. 1978 йылда вафат була, тыуған ауылында ерләнә.

Автономия өсөн көрәшселәр сафында Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылы уҙаманы, күренекле дәүләт һәм хәрби эшмәкәре, офицер Мөхәмәтйән Булатовтың исеме лә халыҡ хәтеренә уйылған. Беренсе Бөтә донъя һуғышы геройы, батша армияһының унтер-офицеры Булатовтың белеме һәм тәжрибәһе Башҡорт автономияһы өсөн көрәш йылдарында бик тә кәрәкле булып сыға. 1918-1919 йылдарҙа ул Бөрйән-Түңгәүер кантонының Темәстә урынлашҡан кантон комитеты рәйесе итеп тәғәйенләнә, унан Башҡорт хөкүмәте составында яуаплы вазифалар башҡара. Үкенескә, 1920 йылда республикала юғары власть Башҡортостан Үҙәк башҡарма комитеты ҡулына күсеп, Башсовнарком ойошторолғас, башҡорттарға ҡаршы асыҡтан-асыҡ репрессия башлана. Көньяҡ-көнсығыш төбәктәргә Поленов менән Руденко етәкселегендә махсус отрядтар ебәрелә һәм улар Бөрйән-Түңгәүер кантон башҡарма комитетының тиҫтәләгән хеҙмәткәрен ҡулға алып, тикшереүһеҙ, хөкөмһөҙ-ниһеҙ атып үлтерә. Мөхәмәтйән Булатов та шулар араһында була...

Автономия өсөн көрәштең алғы сафында үҙ ғүмерҙәрен аямаған илһөйәр ир-азаматтарыбыҙҙың бер нисәүһе хаҡында ғына һөйләнелде был ҡыҫҡа ғына белешмәлә. Ә улар йөҙәрләгән, меңәрләгән... Бөтөн донъя башҡорттар ҡоролтайы Башҡарма комитеты башланғысында автономия өсөн милли хәрәкәт башында торған 100 шәхесебеҙҙең исемлеге төҙөлдө. Ул артабан дауам ителер һәм батырҙарҙың исемдәрен мәңгеләштереү буйынса маҡсатлы, аныҡ эштәр алып барылыр, тип ышанайыҡ.

***Риф МИФТАХОВ, шағир, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Башҡортостанға автономия яулау өсөн милли хәрәкәттең юлбашсыһы, Рәсәйҙә федерализм ҡоролошона нигеҙ һалыусы, шул уҡ ваҡытта донъя кимәлендә билдәлелек яулаған ғалим-тюрколог Әхмәтзәки Вәлидиҙең исеме заманында тыйыуҙарға дусар ителһә лә, бөгөнгө көн, шөкөр, ватанында уның хаҡында белмәгән кеше юҡ. Ә бына уның яҡын дуҫтары, тоғро көрәштәштәре хаҡында аҙыраҡ беләбеҙ кеүек. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡайһы берәүҙәрҙе, тыуған районында, ауылында автономия өсөн көрәшкән ниндәй шәхестәр булған, тигән һорау аптырашта ҡалдыра - улар ни тип яуап бирергә лә белмәй. Ә бит бик күп булған автономия өсөн ғүмерен йәлләмәгән яҡташтарыбыҙ. Һәр ауылда тиерлек булған улар, тик хаҡһыҙ рәүештә онотоуға дусар ителгән. Уларҙың исемдәрен асыҡлау, азатлыҡ ҡаһармандары хаҡында иҫтәлектәрҙе йәш быуын аңына һеңдереү кәрәк. Эҙләнә белеү, өлкәндәр хәтирәләренә ҡолаҡ һалыу, архивтарҙа соҡоноу кәрәк йәштәргә. Бөгөн мин дә үҙемдең ана шундай бер ҡаһарман яҡташым, ауылдашым, хатта нәҫелдәшем хаҡында һөйләмәксемен гәзит уҡыусыға. Әүхәҙи Ғәләүетдин улы Ишмырҙин Ишембай районы Кинйәбулат ауылында тыуған. Уның атаһы Ғәләүетдин олатай менән минең әсәйемдең атаһы Ғарифулла олатайҙар бер туғандар. Әүхәҙи Ишмырҙин 1914 йылғы Беренсе донъя һуғышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн дүрт тапҡыр Георгий тәреһе менән бүләкләнгән (йәғни тулы Георгий кавалеры) офицер була. 1917 йылда, илдә Октябрь революцияһы башланыу менән Әүхәҙи Ишмырҙин милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Был хәрәкәттән ағаһы Ишбулды менән офицер ҡустыһы Сөләймән дә ситтә ҡалмай. Атай-әсәйем, оло йәштәге ауылдаштарым һөйләүенсә (быны документтар ҙа раҫлай), Әүхәҙиҙе халыҡ араһында "Ишмырҙин - 1", ә Сөләймәнде "Ишмырҙин - 2" тип йөрөткәндәр. Ошо уҡ йылды Әүхәҙи Ишмырҙин 1 Башҡорт ҡоролтайы делегаты була, милли хәрәкәттең матбуғат органы - "Башҡорт" гәзитен сығарыуҙа ҡатнаша. Бер нисә айҙан, Башҡортостан большевиктарҙан азат ителгәс, Әүхәҙи Ишмырҙин Юрматы кантоны башҡарма комитеты рәйесе итеп тәғәйенләнә, тик оҙаҡ эшләргә тура килмәй, уны Ырымбурға, Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына саҡыртып алалар. Юрматы кантоны етәкселеге ҡустыһы Сөләймәнгә тапшырыла. 1918 йылдың октябрендә Әхмәтзәки Вәлиди Әүхәҙиҙе 6-сы Башҡорт уҡсы полкына командир итеп ҡуя. Милли азатлыҡҡа ынтылыш аҡтар яғынан аҡланмағас, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Советтар яғына сығырға тигән фекергә килә. Әхмәтзәки Вәлиди штабс-капитан Ишмырҙинға тағы ла ҙурыраҡ, яуаплыраҡ бурысты - Башҡорт ғәскәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын тәьмин итеүҙе йөкмәтә. Әүхәҙи был бурысты тиҙ арала башҡарыуға өлгәшә. 1919 йылдың 18 февралендә Ишмырҙин командалыҡ иткән 1-се дивизия полктары беренсе булып Ҡыҙыл Армия яғына сыға.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Радий Хәбиров гражданлыҡ йәмғиәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән Башҡортостан Башлығы гранттарын булдырыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. 2019 йылда грант түләүгә 50 миллион һум бүленә. Гранттар тураһында положениены, конкурсты үткәреү буйынса комиссияның составын әҙерләү бурысы Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығына йөкмәтелә.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Стәрлетамаҡта табаҡ быяланың бөтә төрҙәрен, мебель фабрикалары өсөн көҙгөлө япма етештереүсе "Башпласт" компанияһының эше менән танышты. Баҙарҙа уларҙың продукцияһына ихтыяж ҙур, ул донъяның күп кенә илдәренә экспортҡа оҙатыла. Радий Хәбиров компания етәксеһен үҙенең инвестиция планы менән киләһе "Инвестиция сәғәте"нә саҡырҙы.

✓ Иң яҡшы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәре" исеменә, Башҡортостан Республикаһының Почет грамотаһына һәм Өфө хакимиәтенең Почет грамотаһына лайыҡ булды. Уларҙы Радий Хәбиров менән Өлфәт Мостафин тапшырҙы.

✓ Башҡортостандың 2019 йылға бюджетының килем өлөшө 12,5 миллиард һумға арта. Был ағымдағы йылда һалым һәм һалым булмаған килем кереме планының - 3,83 миллиард һумға, шулай уҡ федераль ҡаҙнанан кире ҡайтарылмай торған керем күләменең - 8,47 миллиардҡа, Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ реформалауға булышлыҡ итеү фондынан 283 миллион һумға артыуына бәйле. Бюджеттың килем өлөшө менән бергә сығымын да арттырыу күҙаллана. Ул 19,2 миллиард һумға арта.

✓ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһының иң яҡшы концепцияһына асыҡ конкурс иғлан итте. Конкурсҡа ебәрелгән эштәр электрон презентация формаһында булырға һәм бөтөн төп идеяларҙы сағылдырырға тейеш. Ғаризалар 29 мартҡа тиклем ҡабул ителә. Әүҙем авторҙар V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат итеп саҡырыла.

**✓ *Халҡы өсөн хәл иткес мәлдә ситтә ҡала алмай, тыуған төйәгенә ҡайта. 1919 йылдың 26 ғинуарында Кесе Ҡоролтай һәм Өлкә Советы ағзаларының берләштерелгән кәңәшмәһендә Башҡорт Хөкүмәте рәйесе итеп һайлана.***

Өс көндән - 21 февралдә Темәс ауылында 1-се Бөтөн Башҡорт хәрби съезы үтә. Бында Әүхәҙи Ишмырҙин милли хәрәкәт етәкселәре Әхмәтзәки Вәлиди, Мөхәмәтхан Ҡулаев, Юныс Бикбов һәм башҡалар менән бергә Башҡортостандың Ваҡытлы революцион хөкүмәте - Башревком ағзаһы итеп һайлана. Был ҡатмарлы осорҙа Әүхәҙи Ишмырҙинға башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эштәре менән шөғөлләнергә, асылда, Башҡортостандың хәрби комиссары вазифаһына тура килгән бурысты башҡарыу йөкмәтелә. Сәйәси ваҡиғалар ҡуйыра. Башревком урынлашҡан Стәрлетамаҡ ҡалаһы Өфө губернаһы ҡарамағында булғанлыҡтан, улар Ырымбур губернаһы большевиктары менән Башҡортостан автономияһына ҙур ҡаршылыҡтар күрһәтә, төрлө провокациялар эшләй. Башҡорт республикаһын инҡар итеүҙәр көндән-көн көсәйә бара. Башревкомға ҡаршы көрәшкә Мәскәүҙән Үҙәк власть эмиссарҙарына Башобком да ҡушыла. Шундай шарттарҙа Бөрйән-Түңгәүер кантоны кәңәшмә үткәрә һәм башҡорт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән Әүхәҙи Ишмырҙин, көрәште дауам итер өсөн Төркөстанға сығып китергә ҡарар итә. Милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағас, Әхмәтзәки Вәлиди һәм уның арҡаҙаштары Афғанстанға китергә ҡарар итә, ләкин Әүхәҙи Ишмырҙин ҡыҙылдар менән бер бәрелештә һәләк була. Башҡортостан дәүләтселеге өсөн даулы йылдарҙа еребеҙ-телебеҙ азатлығы хаҡына ғүмерен аямай ҡатнашҡан башҡорт офицеры, ғәскәр башлығы, дәүләт эшмәкәре Әүхәҙи Ишмырҙиндың, 30-сы йылдар аҙағында репрессиянан һәләк булған уның туғандары - беҙҙең Кинйәбулат ауылының ҡаһарман ир-азаматтарының тапланмаған исеме халыҡҡа ҡайтарылды, ғәҙеллек тантана итте. Ишмырҙиндарҙың тормошона, көрәшенә, олатай-бабайҙарҙың, атай-ағайҙарының рухына бағышланған, әле телгә алынмаһа ла, халыҡ хәтерендә баҙлаған шанлы йылдар иҫтәлектәре киләсәктә том-том китаптар булып та баҫылыр әле, моғайын.

***Нурия ҠУНЫСБАЕВА, Ейәнсура районының "Аҙинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Үҫәргәндәр төйәге лә үҙ тарихының һәр бер бөгөлөндә һоҡланғыс шәхестәр тыуҙырған. Милләтебеҙ аҡылы, ғорурлығы, ғәме булған, Башҡортостаныбыҙҙы һаҡлап, уның милли азатлығын яҡлап, ил хәстәре менән йәшәгән данлы улдары байтаҡ Ейәнсура еренең. Шуға ла ҡылыс менән түгел, тыныс юл менән милләт мәнфәғәтен яҡлай алырлыҡ дәүләт эшмәкәрҙәре менән хаҡлы рәүештә ғорурлана алабыҙ. Бына улар: Мөхәмәтхан Ҡулаев, Юныс Бикбов, Ғүмәр һәм Усман Ҡыуатовтар, Сөләймән Мырҙабулатов һ.б.

Иң тәүҙә 1919 йылдың 20 мартында РСФСР менән килешеү төҙөгән Башҡорт Хөкүмәте делегацияһы рәйесе Мөхәмәтхан Ҡулаев тураһында әйтеп үткем килә. Мөхәмәтхан Ҡулаев 1873 йылдың 7 февралендә Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Йәнсура ауылында тыуа. Ҡаҙан университетының медицина факультетын тамамлай. 1913 йылда Варшавала эшләй, Беренсе донъя һуғышы башланғас, көньяҡ-көнбайыш фронттың 275-се госпиталендә баш табип була. Башҡортостанда, милләтәштәре янында йәшәмәһә лә, һәр ваҡыт тыуған яғы менән ҡыҙыҡһына, унда ҡайта алмауына көйөнә. 1917 йылда көтмәгәндә тарихи ваҡиғаларға ҡушылып китә һәм мөһим сәйәси мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡатнаша. Халҡы өсөн хәл иткес мәлдә ситтә ҡала алмай, тыуған төйәгенә ҡайта. 1919 йылдың 26 ғинуарында Кесе Ҡоролтай һәм Өлкә Советы ағзаларының берләштерелгән кәңәшмәһендә Башҡорт Хөкүмәте рәйесе итеп һайлана. 21 февралдә Темәстә 1-се Бөтөн башҡорт хәрби съезы үткәрелә, Башҡортостан Совет Республикаһының Ваҡытлы хәрби революцион комитеты һайлана. Әхмәтзәки Вәлиди - уның рәйесе, М.Ҡулаев, Юныс Бикбов, Усман Ҡыуатов һ.б. (бөтәһе 12 кеше) ағзалары булып һайлана. РСФСР менән рәсми килешеү төҙөү өсөн М.Ҡулаев етәкселегендә М.Халиҡов, Х.Сәғитов, А.Бикбов составында делегация эш башлай. 1919 йылдың 20 мартында РКП(б)ның Үҙәк Комитетында В.И.Ленин ҡатнашлығында РСФСР һәм Башҡорт хөкүмәте араһында килешеүгә ҡул ҡуйыла һәм ул көн Башҡорт автономиялы Совет Социалистик Республикаһы көнө тип билдәләнә башлай. М.Ҡулаев дәүләт эшмәкәре генә түгел, врач-мәғрифәтсе лә, филолог-ғалим да була. Башҡорт теленең фонетик төҙөлөшөн, грамматикаһын өйрәнә, фольклор әҫәрҙәрен яҙып ала, урыҫ әҙәбиәте классиктарының әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемә итә. Урыҫ графикаһы нигеҙендә башҡорттар өсөн алфавит һәм әлифба төҙөй.

1917 йылдың аҙағында Башҡорт хөкүмәте рәйесе итеп һайланған яҡташыбыҙ Юныс Бикбов менән дә ғорурлана Ейәнсура ере. Башҡорт хөкүмәтенең тәүге рәйесе тураһында Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"ендә былай тип яҙа: "...Башҡортостандың мөхтәриәтен рәсми рәүештә иғлан итеп, милли хөкүмәт төҙөнөк. Кантондарҙа милли ғәскәр ойоштора башланыҡ. Халҡыбыҙ араһынан үҫеп сыҡҡан Юныс Бикбовты хөкүмәт рәйесе итеп һайланыҡ. Миңә хәрби һәм эске эштәр тапшырылды".

Бикбов Юныс Юлбарыҫ улы 1883 йылда Ейәнсура районының Әбүләис ауылында тыуа. Ҡаҙан университетын яҡшы тамамлап, тиҙҙән башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Ул юғары органдарҙа эшләгән башҡорт зыялылары араһында юридик белемле белгестәрҙең береһе була. 1919 йылдың 21 февралендә Темәстә үткән 1-се Бөтөн Башҡортостан хәрби съезында Ваҡытлы Башревком составына Юныс Бикбов та индерелә. Уны Юстиция халыҡ комиссары итеп тәғәйенләйҙәр. Һуңғараҡ, үҙенә генә билдәле сәбәптәр арҡаһында сәйәси эштәрҙән ситләшеп, тыуған яғына ҡайта, Йылайыр кантонының 4-се участкаһына халыҡ судьяһы итеп һайлана. 1930 йылдың 18 майында биш йылға иркенән мәхрүм ителә. 1938 йылда уны ҡабаттан ҡулға алалар, 8 йылға хөкөм итеп, Карагандаға һөргөнгә ебәрәләр. Ул шунда 1942 йылда үлеп ҡала.

Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе - Усман Ҡыуатов. Ул данлыҡлы башҡорт дворяндары Ҡыуатовтар нәҫеленән. Усман Мөхәмәтғәлим улы Ҡыуатов Ейәнсура районының Үтәғол ауылында донъяға килгән. Ҡаҙан университетында белем ала. 4-се курста уҡығанда илдә ҙур үҙгәрештәр башлана. Усман Ҡыуатов башкөлләй милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. 1917 йылдың июнь аҙағында Ырымбурҙа үткән Башҡорт Өлкә бюроһының йыйылышында ойошторолған милли хәрәкәткә етәкселек итеү органы - Башҡорт халҡының иттифаҡи бюроһы составына ҡабул ителә. 20-27 июлдә үткән 1-се Башҡорт Ҡоролтайында Башҡорт Үҙәк шураһының башҡарма комитетына һайлана.

1919 йылдың 26 ғинуарында Башҡорт Хөкүмәтенең составында үҙгәрештәр булып китә. Хөкүмәт рәйесе - Мөхәмәтхан Ҡулаев, ә хөкүмәт ағзалары итеп Ә.Вәлиди, Ю.Бикбов А.Йәғәфәров һәм А.Әҙеһәмовтар менән берлектә Усман Ҡыуатов та һайлана. Хөкүмәт ағзаһы булараҡ, ул Башҡортостан автономияһының артабанғы яҙмышын хәл иткән мөһим ҡарарҙарҙы ҡабул итеүҙә ҡатнаша. Бик күп Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре кеүек үк, Усман Ҡыуатовҡа ла һуңынан Башҡортостандан ситтә йәшәргә тура килә. Ул ғүмеренең һуңғы йылдарын Әзербайжанда, Баҡы ҡалаһында уҙғара, медицина университетында уҡыта.

Ҡыуатовтар нәҫеленән тағы бер мәртәбәле зат - Ғүмәр Ғәлим улы Ҡыуатов, хирург, дәүләт эшмәкәре. Ҡаҙан университетының медицина факультетын тамамлаған. 1919-1928 йылдар БАССР һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары була. Ғүмерен Башҡортостаныбыҙға фиҙаҡәр хеҙмәт итеүгә бағышлаған арҙаҡлы шәхес. Республикала дауалау-профилактика эшен ойоштороуҙа, эпидемияларға (сабыртма,тиф,ваба һ.б.) ҡаршы көрәштә,1921-1922 аслыҡ осоронда күрһәткән хеҙмәттәре ҙур. 1928 йылда БАССР хөкүмәтенең ВЦИК Президиумы эргәһендәге тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләнә. Өфөлә Республика клиник дауаханаһы уның исемен йөрөтә. Ейәнсуралар милләтебеҙҙең ошондай бөйөк улдарын онотмай, үҙҙәренең ихтирамлы тоҡомдан булыуын тойоп йәшәй. Үҙ ерендә тыуған, халҡыбыҙ өсөн йәшәгән, ғүмерен биргән арҙаҡлы улдарының исемдәрен хөрмәтләй һәм мәңгеләштереү саралары күрә.

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# ВӘЛИДИ ЯЛАНЫ




**Темәстә, ауылды ике ҙур өлөшкә бүлеп, көнбайыштан көнсығышҡа һуҙылған Ҡыҙылташ тауы ята. 2018 йылдың 11 августында тауҙың көнсығыш өлөшөндә, Башҡортостандың 100 йыллығына арнап, стела ҡуйылды.**

Башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына күсеүе ошо стела янындағы яланда була. Әммә беҙ был тарихты оҙаҡ ваҡыт белмәнек. Ололар уны беҙгә әйтмәнеләр. Ҡурҡтылар. Хатта ул яланға еләккә йөрөргә лә рөхсәт ителмәне. Был тарихи урынды билдәләүгә рәссам Борис Михайлович Пискуновтың ошо ваҡиғаны, йәғни башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын сағылдырған бәләкәй генә картинаһы ярҙам итте. Ул картина Өфөлә Нестеров музейында һаҡлана. Ул интернетҡа ла ҡуйылған. Картина 1930 йылда, тарихи ваҡиғанан һуң 11 йыл ваҡыт үткәс яҙылған. Картинаның авторы 1938 йылда ҡулға алынып, золом ҡорбаны була.

Авторы - С.Г. Вәлиев, рәссамы - М.А. Ғафаров, бағыусыһы В.М. Сафаров булған был стела ҡуйылған урынға ауылдағы махсус комиссия тарафынан "Зәки Вәлиди яланы" тигән исем бирелде.

**Сәлимйән ВӘЛИЕВ.**
**Баймаҡ районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостандың Дәүләт автоинспекцияһы һәм мәғариф органдары 18 марттан "Иғтибар - балалар!" иҫкәртеү сараларын уҙғара. Махсус операция апрель башында тамамлана. "Балаларҙың юл фажиғәләрендә зыян күреүе йыш күҙәтелә. Бөгөнгә республикала балалар һәм үҫмерҙәр ҡатнашлығында 77 автоавария теркәлгән. Уларҙа ике бала һәләк булған, 86-һы йәрәхәтләнгән", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостан ЮХХДИ-ның матбуғат хеҙмәтендә.

✓ Урал аръяғы ҡалаларында театр марафоны бара. Үҙешмәкәр театрҙарҙың республика фестиваль-марафонының Рәсәйҙә Театр йылына бағышланған символы Сибай ҡалаһына тапшырылды. Ошо көндәрҙә эстафетаны Баймаҡ ҡалаһы ҡабул итте. Проект сиктәрендә республиканың барлыҡ төбәктәрендә иң яҡшы спектаклдәр ҡуйыла һәм күрһәтелә. Һәүәҫкәр театр сәнғәтен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән сараларҙа халыҡ һәм өлгөлө театр коллективтары ҡатнаша. Фестиваль йыл аҙағында Өфөлә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында тамамлана.

✓ Сибайҙа Башҡортостан автономияһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына арнап, "Урал батыр" эпосын иң оҫта һөйләүселәр конкурсы уҙҙы. Гран-приға һәм беренсе урынға өс ҡатнашыусы: 8-се мәктәптең беренсе класс уҡыусыһы Гөлназ Мөхәмәтйәрова, гимназия-интернаттың етенсе класс уҡыусыһы Илназ Исхаҡов һәм 9-сы лицей уҡыусыһы Тимур Байрамғолов лайыҡ булды.12-се мәктәптән иң йәш ҡатнашыусы Айзель Әҙелбаеваға ете йәш.

✓ Башҡортостанда быйыл республиканың 600 миллион һумлыҡ ярҙамы менән 615 лифт алмаштырыла. Ошо хаҡта республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Юрий Палтусов хәбәр итте. Башҡортостандың төбәк операторы 303 лифтты өс йылға бүлеп түләү шарты менән алмаштыра. 2018 йылда ғына Башҡортостандың күп фатирлы йорттарында - 600, шул иҫәптән Өфөлә 334 иҫке лифтты алмаштырҙылар. Бер лифтты алмаштырыу хаҡы яҡынса 2 миллион һум тәшкил итә.

✓ 25 мартта М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында башҡорт һылыуҙарының "Һылыуҡай - 2019" республика конкурсына кастинг үткәрелә. Ҡатнашыу өсөн 16-27 йәшлек ҡыҙҙар саҡырыла. Республиканың төп һылыуҡайының исеме 2019 йылдың 27 апрелендә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында билдәле була.

✓ *"Халыҡ уңайлы, тыныс, имен мөхиттә йәшәүгә лайыҡ. Әйҙәгеҙ, бергәләп республикала генераль йыйыштырыу үткәрәйек. Беҙҙең идара итеү командаһында ҡалаларыбыҙ, биләмәләребеҙ ныҡ таҙа булырға тейеш, тигән идея бар..."*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## АУЫЛ УҠЫТЫУСЫҺЫ

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда 2020 йылдан "Ауыл уҡытыусыһы" программаһын тормошҡа ашыра башларға тәҡдим итте.** Программа ауылдарға һәм бәләкәй ҡалаларға күскән уҡытыусыларға миллион һум аҡса түләүҙе күҙ уңында тота. Башҡортостанда быйылдан башлап ауыл уҡытыусыларына ярҙам күрһәтеү өсөн республика ҡаҙнаһынан 60 миллион һум бүленә. Йыл йомғаҡтары буйынса улар араһынан иң яҡшы 100 уҡытыусыға грант рәүешендә 600-әр мең һум аҡса тапшырыу күҙаллана. "Әлеге сара бушлай ер участкаһы бүлеү менән бергә - был саранң ла әҙерләрбеҙ - республиканың ауыл мәктәптәрендә уҡытыусылар мәсьәләһен хәл итергә тейеш", - тип билдәләй Радий Хәбиров.

## ТҮҢӘРӘККӘ ЙӨРӨТ!

**Башҡортостанда яңы уҡыу йылынан балалар өсөн түңәрәктәргә һәм секцияларға электрон сертификаттар буйынса түләү системаһын индерә башлайҙар.** Мәғариф министры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, хәҙер республика балаларының төрлө, шул иҫәптән коммерция түңәрәктәренә бушлай йөрөү мөмкинлеге барлыҡҡа киләсәк. Балаға исемле электрон документты ата-әсәләр үҙҙәре тултыра. Төбәк ҡаҙнаһынан бер балаға иҫәпләнгән сумма әлегә билдәләнмәгән, тип хәбәр итә Мәғариф министрлығы. Сертификат менән төрлө өҫтәмә уҡыуҙар өсөн түләргә мөмкин. Айбулат Хажин билдәләүенсә, электрон өҫтәмә белем биреү сертификацияһын индереү нисә баланың түңәрәктәрҙә шөғөлләнеүен аңларға һәм республика бюджетынан ойошмаларға өҫтәмә белем биреүгә йүнәлтелгән аҡсаны контролдә тоторға мөмкинлек бирергә тейеш.

## АҠСА БҮЛЕНӘ

**Быйыл "Мәғариф" милли проекты буйынса Башҡортостанға 1,2 миллиард һумдан ашыу аҡса йәлеп ителә.** Дәүләт аҡсаһы республика ҡалаларында һәм ауылдарында яңы мәктәптәр төҙөүгә, булғандарын төҙекләндереүгә, һәләтле балаларҙы асыҡлау һәм ярҙам күрһәтеү үҙәге асыуға, мәктәптәрҙе цифрлаштырыуға, пенсия алды йәшендәгеләргә һөнәри һәм өҫтәмә белем биреүгә йүнәлтелә. "Демография" милли проекты сиктәрендә лә балалар баҡсалары төҙөүгә һәм 1,5-3 йәшлек балаларҙы ясле төркөмдәрендә урындар менән тәьмин итеүгә республикаға ҙур аҡса йәлеп ителә. "2021 йылға мәктәпкәсә учреждениелар төҙөүҙе иҫәпкә алып, ә улар 40-тан ашыу буласаҡ, бөтә балалар ҙа тиерлек ясле төркөмдәрендә урындар менән тәьмин ителәсәк", - тип белдерә мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Хажин. Уның һүҙҙәренсә, төбәктең мәктәпкәсә белем биреү ойошмалары янында консультация үҙәктәре төҙөлә башлаған, унда үҫеш яғынан үҙенсәлекле балаларға һәм уларҙың ата-әсәләренә ярҙамлашыуҙа, коррекциялауҙа һәм реабилитация эшендә ярҙам күрһәтеү күҙаллана.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*



## ЙЫЙЫШТЫРАЙЫҠ!

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров республикала генераль йыйыштырыу үткәрергә тәҡдим итте.**

"Халыҡ уңайлы, тыныс, имен мөхиттә йәшәүгә лайыҡ. Әйҙәгеҙ, бергәләп республикала генераль йыйыштырыу үткәрәйек. Беҙҙең идара итеү командаһында ҡалаларыбыҙ, ҡасабаларыбыҙ, биләмәләребеҙ ныҡ таҙа булырға тейеш, тигән идея бар. Шуға күрә һөнәри нигеҙҙә өмәләрҙе тергеҙеү тураһында ҡарар ҡабул иттек тә инде", - тип белдерҙе Радий Хәбиров, Өфөлә Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү хеҙмәткәрҙәре көнөнә арналған байрам сараһында сығыш яһап. Республика етәксеһе билдәләүенсә, ауыр, ҡарлы ҡышҡа ҡарамаҫтан, Өфөнөң торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре алдарына ҡуйылған бурысты башҡарып сыға алды. Баш ҡалабыҙҙың киләһе ҡышты "тулы әҙерлек менән ҡаршы алыу өсөн" ҡеүәте бар. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ алдында торған мөһим бурыстар иҫәбендә Радий Хәбиров уңайлы ҡала мөхитен, яңы парковка зоналарын булдырыу, шулай уҡ Өфө урамдарын яҡтыртыуҙы яҡшыртыу сараларын үткәреү менән бәйле программаларҙы билдәләне. "Ҡалабыҙ ҡараңғы, ә яҡтылыҡ булырға тейеш. Ҡаланы яҡтыртыуға байтаҡ аҡса бүленде. Был тәүге аҙым ғына. Һуңғараҡ заманса архитектура дизайнына күсергә кәрәк, сөнки ҡала яҡты булыуҙан тыш, үҙенең яңылығы менән дә айырылып торорға тейеш, - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров. - Үҙем Өфөлә тыумаһам да, ғүмеремдең күп өлөшө ошо ҡалала үтте. Өфөнө бик яратам һәм республикабыҙҙың баш ҡалаһы Рәсәйҙең иң матур һәм төҙөк ҡалаларының береһе булыу өсөн уникаль, ҙур ҡеүәткә эйә тип иҫәпләйем. Шуға күрә һеҙгә шуны әйтәм: ҡалабыҙ Рәсәйҙә уңайлылыҡ, ҡала мөхитендә йәшәү буйынса иң яҡшыны булырға тейеш".

## АУЫЛДЫҠЫЛАРҒА

**Республикала ауыл ерендә йәшәгән 54,5 мең пенсионер пенсияһына өҫтәмә алды. Был турала Рәсәй Пенсия фонды Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр.**

Айлыҡ өҫтәмәнең күләме, ауылдағы стаж өсөн яңынан иҫәпләү менән бергә, 1333 һум 55 тин тәшкил итте. Өсөнсө төркөм инвалидлығы булғандарҙың пенсияһы 667 һумға артты. 25 процентлыҡ өҫтәмә яңы, 1 ғинуарҙан артҡан билдәләнгән түләү күләменән - 5334,19 һумдан сығып иҫәпләнде. Пенсияға ошондай өҫтәмә өс шарт үтәлгән осраҡта бирелә. Улар араһында - ауыл хужалығында 30 йылдан кәм булмаған стаж, ауыл ерендә йәшәү. Бынан тыш, пенсионер эшләмәскә тейеш. Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһендә билдәләүҙәренсә, ауыл пенсионерҙарының пенсияһын яңынан иҫәпләү эше дауам итә. Пенсионер Пенсия фонды идаралығына мөрәжәғәт итә һәм арттырылған түләүгә хоҡуғын раҫлаған өҫтәмә документтар тапшыра ала. 2019 йылдың аҙағына тиклем мөрәжәғәт иткән осраҡта, ҡайтанан иҫәпләү эше ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан башҡарыла. "Ғариза һуңыраҡ тапшырылһа, пенсия икенсе айҙан арта", - тине Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идараһы Фоат Хантимеров. Ауыл пенсионерҙарына арттырылған түләү алыуға хоҡуҡ биргән стажды иҫәпләгәндә колхоз-совхоздарҙа һәм башҡа ауыл хужалығы предприятиеларында, ойошмаларында (малсылыҡта, үҫемлексәлектә һәм балыҡсылыҡта) эшләү иҫәпкә алына.

## КЕМДӘР ЛИДЕР?

**Сочиҙа "Рәсәй лидерҙары" конкурсы еңеүселәре билдәләнде. Дүрт көн барған баһалау сараларынан, оҫталыҡ дәрестәренән, социаль һәм спорт әүҙемлектәренән һуң илдең иң шәп 104 идараһыны асыҡланды, шул иҫәптән икеүһе - Башҡортостандан. Улар - Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе идаралығы етәксеһе Марат Вәлиев һәм "Финэкспертиза-Сеть" консалтинг агентлығының генераль директоры Илгиз Байморатов.**

"Башинформ" агентлығына Илгиз Байморатов хәбәр итеүенсә, әле ул Мәскәүҙә йәшәй, "ҡыҙыҡлы тәҡдим булһа", Башҡортостанға ҡайтырға әҙер. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл "Рәсәй лидерҙары" идарасылар конкурсына Рәсәйҙән һәм башҡа илдәрҙән 227 меңдән ашыу ғариза килде. Һайлап алыу этабына 91 меңдән ашыу конкурсант үтте. Волга буйы федераль округынан ҡатнашыусылар Һамарҙа осрашты. Ярымфиналдар йомғаҡтарына ярашлы, 369 финалсы билдәләнде. Сочиҙа 300 финалсы осрашты. Уларҙың барыһы ла 1 миллион һумға мәғариф грантын алды. Конкурс еңеүселәре Рәсәйҙең иң яҡшы етәкселәре араһынан остазға ла эйә буласаҡ. Конкурсты Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса "Рәсәй - мөмкинлектәр иле" автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошмаһы тормошҡа ашыра.

## ТӘРТИПКӘ ҺАЛ

**Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров төбәктең һәр муниципалитетында аҙна һайын инвестиция сәғәттәрен үткәрергә тәҡдим итте.**

Хөкүмәт структуралары кимәлендә инвесторҙар менән "Инвестиция сәғәте" форматындағы осрашыуҙар былтыр ноябрҙән алып уҙғарыла. Инвестицияларҙы йәлеп итеү - уларҙың мөһим эш йүнәлештәренең береһе. Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы һүҙҙәренсә, хәҙер муниципалитеттарҙа ла был эште тәртипкә һалырға ваҡыт етте. "Күҙгә күренеп торған етешһеҙлек - муниципалитеттарҙың бизнес менән мотивация бәйләнешенең көсһөҙ булыуы. Беҙгә ошо бәйләнеште тәьмин итеү өсөн ҡаты регламент булдырыу мөһим. Һәр кесаҙна иртәнге сәғәт 11-ҙә муниципаль берәмектә инвесторҙар һәм районның бизнес вәкилдәре менән инвестиция сәғәтен үткәрергә кәрәк. Тәүге ултырыштар был аҙнала ойошторолорға, уларҙа тәжрибә алмашыу өсөн республиканың "Инвестиция сәғәте" вәкилдәре ҡатнашырға тейеш. Инвестиция сәғәте йөкләмәләр теркәлгән протокол ҡабул итеү менән тамамланырға тейеш. Бының менән беҙ ике бурысты хәл итәбеҙ: һеҙҙе эшҡыуарлыҡҡа яҡынайтабыҙ һәм бизнес өсөн шарттар булдырабыҙ. Бөтә хакимиәт башлыҡтарынан ер, мөлкәт, ойоштороу ресурстарын асыуҙарын һорайым", - тине Радий Хәбиров.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөлә Башҡортостан умартасыларының съезы уҙҙы. Унда 47-се "Апимондия" халыҡ-ара конгресына әҙерлек мәсьәләләре тикшерелде. Конгресс 2021 йылда Өфөлә ойоштороласаҡ. Форум эшендә илдең баш умартасыһы, Рәсәй милли умартасылар союзы президенты Арнольд Бутов ҡатнашты.

✓ Өфөлә умартасыларҙың тәүге төбәк съезында Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Илшат Фәзрахманов республикала йыл һайын бал фестивале уҙғарырға кәрәк, тигән тәҡдим менән сығыш яһаны. "Сентябрҙең тәүге декадаһында ҡала Советы алдындағы майҙанда "Һөт иле" кеүек ҙур бал фестивален ойоштороорға тәҡдим итәм. Умартасылар өсөн байрам, күргәҙмәләр, балалар өсөн саралар үткәрергә", - тине Илшат Фәзрахманов.

✓ 8-12 июндә Башҡортостанда "Берҙәмлек" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале ойоштороласаҡ. Быйыл "Берҙәмлек" фестивале дүрт район һәм Өфө ҡалаһы биләмәһендә уҙғарыла. Унға яҡын коллективты ҡабул итеү күҙаллана, улар араһында - Белоруссия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Сербия, Көньяҡ Корея, Сенегал, Чили. Сит илдәрҙең ижади коллективтары район һабантуйҙарында ла ҡатнаша. Фестиваль барышында тәүге тапҡыр Этнокөн уҙғарыу күҙаллана. Байрамды йәбыу тантанаһы һәм Гала-концерт 12 июндә Өфөлә уҙа.

✓ Башҡортостанда 2001 йылдан алып туберкулез менән сирләүселәр кәмей. Роспотребнадзорҙың төбәк идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, 2018 йылда күрһәткес 100 мең халыҡҡа 40 кеше тәшкил иткән - 2017 йылғы кимәлдән 3 процентҡа түбәнерәк. Былтыр ауырыу балалар һаны - 100 мең балаға 3,3 (2017 йылға -5,7 процент). Төбәктә ил һәм Волга буйы федераль округы буйынса сирләүселәр аҙыраҡ - 5,3 процент һәм 1,3 процент.

✓ Өфөлә "Науруз" - яҙғы көн менән төндөң тигеҙлеге байрамын билдәләйҙәр. 31 мартта баш ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарын "Евразия" сауҙа үҙәге алдындағы (Затон биҫтәһе) майҙанда көтәләр. Байрам был майҙансыҡта тәүгә уҙғарыла. Йола буйынса, Өфөнөң милли мәҙәни үҙәктәренән, шулай уҡ Ғафури районының "Сәйетбаба" башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәгенән һәм Бүздәк районының "Килем" татар тарихи-мәҙәни үҙәгенән 10-дан ашыу этнос вәкиле йыйыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ ***Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, уны Башҡортостан ауыл хужалығы кооперативтары һәм фермерҙарының продукцияһы ҡуйылған экспозициялар хайран ҡалдырған.***



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмә был юлы ла халыҡ йәшәйеше өсөн мөһим булған хеҙмәттәрҙе етәкләүселәрҙең отчетынан башланды.**

# БЮДЖЕТ НИСЕК ҮТӘЛӘ?

Граждандар һағы системаһы эше буйынса МБУ начальнигы Рафаэль Әхмәтов белдереүенсә, халыҡтың тормош-көнкүрешен тәьмин иткән учреждениеларҙа авария өҙөклөгө 19 осраҡта ҡуҙғатылһә, шуларҙың 15-е ресурстар менән тәьмин итеү предприятиеларына тура килә, райондарҙың торлаҡ хужалығы идаралыҡтарының идара итеү компаниялары буйынса - 4, башҡа идара итеү компаниялары, ТСЖ-лар, шәхси секторҙа авария осраҡтары ҡуҙғатылмаған. Ошо осорҙа 42 янғын сыҡҡан. Сүп-сар янғыуы 24 тапҡыр теркәлһә, автомобилдәр янғыуы 4 осраҡта ҡуҙғатылған. 9 кеше зыян күргән, шул иҫәптән өс бала, улар барыһы ла дауаханаға һалынған. 22 юл-транспорт ваҡиғаһында 22 кеше йәрәхәт алған. Ҡыйыҡтарҙан ҡар төшөүҙең 8 осрағы теркәлһә, һәҙәмтәлә 1 кеше зыян күргән. Граждандар һағы идаралығының мәғлүмәт-диспетчер үҙәге бер аҙнала 21240 шылтыратыу ҡабул иткән, эҙләү-ҡотҡарыу отряды 40 тапҡыр саҡырыу буйынса сыҡҡан, 20 кешегә, шул иҫәптән бер балаға ярҙам күрһәткән. Бынан тыш, 18 осраҡта шикле әйбер табылыуы тураһында хәбәр алынған.

Ҡала хужалығы системаһындағы хәл-торошҡа идаралыҡ начальнигы Никита Дмитриев байҡау яһаны. Әлеге ваҡытта, көндәр йылыныу һөҙөмтәһендә йорт ихаталарында йыйылған һыуҙы ағыҙыу эштәре алып барыла. Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге МБУ-һы төҙөкләндереү ҡағиҙәләренең үтәлешен тикшереп, 351 протокол төҙөгән. Торлаҡ йорттарҙың территорияһын таҙартыуға 150 берәмек техника, 850 урам һепереүсе йәлеп ителгән. Ҡыйыҡтар тулыһынса таҙартылған.

Ҡала урамдарын таҙартыуҙа 230 берәмек техника эшләй, барлыҡ райондарҙа ла юл хеҙмәттәре соҡорҙарҙы ремонтлай башлаған. Йорт ихаталарында ла соҡорҙар асыҡлана һәм "ямала". 15 июнгә тиклем ҡышҡы-яҙғы миҙгелдә барлыҡҡа килгән соҡорҙар ямалып бөтөргә тейеш.

Транспорт һәм бәйләнештәр идаралығы начальнигы Владимир Петров белдереүенсә, бөгөн пассажирҙар ташыу өс йүнәлештә 103 даими маршрут буйынса алып барыла. Аҙна дауамында йәмәғәт транспорты ҡатнашлығында ике юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, һөҙөмтәлә ике кеше йәрәхәтләнгән. 13 мартта үткән комиссия ултырышында, граждандар мөрәжәғәте буйынса 248 маршруттың автобустары һанын арттырыу мәсьәләһе ҡаралған һәм маршрутҡа 10 берәмек өҫтәлгән.

Янғындар буйынса ҡала учреждениеһы инспекторы Раил Ғәлимов бәйән итте. Үткән аҙнала янғын һүндереү подразделениелары 169 тапҡыр урындарға сыҡҡан, шул иҫәптән янғын һүндереү өсөн - 39, ялған саҡырыуҙар буйынса - 54, шартлатҡыс матдәләр тураһындағы мәғлүмәт буйынса 16 тапҡыр. Янғында 3 кеше һәләк булған, 9 кеше, шул иҫәптән 3 бала зыян күргән. Янғындарҙың төп сәбәбе булып электр ҡоралдарын дөрөҫ ҡулланмау (4 осраҡ), ут төртөү (1) тора, ҡалған осраҡтарҙа - ут менән һаҡһыҙ эш итеү, шул иҫәптән эскән килеш тәмәке тартыу. Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин янғын һүндереү хеҙмәттәренә башҡа ведомстволар, йәмәғәтселек менән берлектә профилактика эштәрен йәнләндереү бурысын йөкмәтте. Сөнки былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда янғындар һаны күпкә артып китә. Шулай уҡ янғындарҙы иҫкәртеүсе ҡоралдарҙы тикшереү ҙә көн үҙәгенә сығарылды, сөнки уларҙың батареялары ултырһа, улар төтөн еҫен тоймай. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, был ҡоралды ауыр социаль хәл-торошта булыусы категория: аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләр, 2018 йылдан башлап бала тыуған ғаиләләр бушлай алырға хоҡуҡлы.

Яуаплылар отчет биргәндән һуң көн тәртибендәге мәсьәләләр ҡаралды. Ҡала бюджетының үтәлеше һәм 2019 йылға бурыстар менән ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлнара Вәлиева таныштырҙы. Быйылдан башлап бюджетҡа һалым һалыуҙың ябайлаштырылған системаһы буйынса килем 10 проценттан 50 процентҡа тиклем артҡан. Әммә һалым һәм һалым булмаған килем буйынса бурыстар һаман да һаҡлана. 1 ғинуарға ҡарата был һан 3 миллиард һум булған. Һалым һалыу объекттарын легаллаштереү һәм бурысты кәметеү өлкәһендә килем потенциалын күтәреү буйынса ведомство-ара комиссия башҡарған эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә арттырылған йөкләмәләр һәм түләнгән бурыс күләме былтыр 997 миллион һумға етә. Бынан тыш, милек һалымы буйынса күсемһеҙ милек объекттарын инвентаризациялау буйынса эшмәкәрлек дауам ителәсәк. Ҡаланың адрес исемлеге һәм Федераль мәғлүмәт адрес системаһы мәғлүмәттәрен актуаллаштереү мәсьәләһе айырым иғтибар үҙәгендә тора.

Ҡалала йәшәү мөхите сифатын күтәреү һәм төҙөкләндереү маҡсатында ихата һәм йәмәғәт территорияларын төҙөкләндереү өсөн сығымдар арттырыласаҡ. "Башҡортостан ихаталары" программаһын тормошҡа ашырыуға республика бюджетынан 543 миллион һум аҡса бүленһә, ҡала бюджетынан 27 миллион һум өҫтәләсәк. Был программаның төп шарты - граждандар унда 1 процент финанслашыусылаш булып ҡатнашырға тейеш.

"Заманса ҡала мөхитен формалаштырыу" программаһы сиктәрендә федераль бюджеттан 336 миллион, республика бюджетынан 7 миллион һум бүленгән. Шулай уҡ ауыл урамдарына яҡтылыҡ үткәреү һәм күп фатирлы йорттарҙың подъездарын ремонтлау буйынса ла яңы программалар ҡабул ителгән. Яҡтылыҡ үткәреү өсөн республика бюджетынан 165 миллион, урындағы бюджеттан 18 миллион һум аҡса бирелә.

Ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин бюджет аҡсаларын үҙләштереүҙе айырым контролгә алырға ҡушты. Юҡҡа ғына, аҡса иҫәп ярата, тимәйҙәр.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

## ТИҘ ТӨҘӨНӨЛӘР

**Өфөлә 2-се балалар поликлиникаһының яңы филиалы (Амантай урамы, 7/1) асылды. Медицина учреждениеһының тәүге эш көнөндә унда һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин, Өфө мэры Өлфәт Мостафин, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусының хәләл ефете Каринэ Хәбирова килде.**

Колгуев биҫтәһендәге был поликлиника бинаһын сафҡа индереүҙе тиҙләтеү мәсьәләһен былтыр республика етәксеһе Радий Хәбиров күтәргәйне. Бина ҡыҫҡа ваҡыт эсендә - дүрт айҙа төҙөкләндерелде.

Бинаны капиталь ремонтлау Социаль маҡсатлы программалар фонды аша хеҙмәттәшлек тураһында килешеү сиктәрендә "Башнефть" компанияһы аҡсаһына финансланды. Хәҙер поликлиниканың яңы филиалы яҡындағы туғыҙ участкаlocalhost: ның мендән ашыу йәш пациентын хеҙмәтләндерергә әҙер. Дөйөм майҙаны 600 квадрат метрлыҡ бинала процедура бүлмәһе, фильтр-бокс, прививка эшләү, әсә һәм бала, сәләмәт бала, функциональ диагностика, биоматериал алыу бүлмәләре урынлашҡан. Бөтә кабинеттар заманса ҡорамал менән йыһазландырылған. Фойела табиптарға яҙылыу өсөн терминал, коляскалар ҡуйыу урыны, асыҡ регистратура бар.

## БАЛАЛАР УЙЫНДАРЫ

**9-14 июлдә Өфө 53-сө Халыҡ-ара балалар уйындарын ҡабул итә. Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов һүҙҙәренсә, баш ҡалаға 31 илдең 75 ҡалаһынан 1228 спортсы килә.**

"Был ярыштарҙың үҙенсәлеге шунда: унда илдәр түгел, ә ҡалалар йыйылмаһы ҡатнаша, - тип билдәләне министр республика хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә. - Уйындарға 9 олимпия спорт төрө күрһәтелгән. Сараны асыу тантанаһы "Өфө-Арена" майҙансығында уҙа. Халыҡ-ара балалар уйындарының бюджеты 167 миллион 200 мең һум (2 миллион 200 мене - Өфө бюджеты, 150 миллионы - "Газпром" йәмғиәте, 15 миллионы - Рәсәйҙең спорт министрлығы) тәшкил итте. Республиканың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы башлығы билдәләүенсә, Ҡамышлы урамындағы яңы Спорт әҙерлеге үҙәгендә Халыҡ-ара балалар уйындары алдынан һынап ҡарайҙар. Унда 2019 йылдың июнендә еңел атлетика, фехтование, йөҙөү һәм грек-рим көрәше буйынса төбәк ярыштары ойоштороладар.

## ҮҘЕБЕҘҘЕКЕН...

**Беҙгә Башҡортостанда етештерелгән файҙалы, тәмле аҙыҡ-түлекте пропагандалау етмәй. Өфөлә "АгроКомплекс" 29-сы халыҡ-ара күргәҙмәһен ҡараған саҡта Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ошо турала әйтте.**

Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, уны Башҡортостан ауыл хужалығы кооперативтары һәм фермерҙарының продукцияһы ҡуйылған экспозициялар хайран ҡалдырған. "Әлбиттә, илебеҙҙә электән килгән проблема бар - етештереүселәрҙең һәм сауҙа селтәрҙәренең үҙ-ара эш итеүе. Ауыл хужалығы министрына республикабыҙ селтәрҙәре менән һөҙөмтәле эш алып барыу һәм үҙебеҙҙең аҙыҡ-түлекте федераль селтәрҙәргә әүҙемерәк индереү бурысын йөкмәттем. Унда әлегә эшләп еткермәйбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тырнаҡтар һынһа...

❖ Тырнаҡтарҙы аш йәки дингеҙ тоҙо төнәтмәһендә тотоу файҙалы.

❖ Тырнаҡтарға 3 тамсы йод, 5 тамсы лимон лимон һуты һәм 3-5 тамсы шыйыҡ А витамины (дарыуханала һатыла) өҫтәлгән үҫемлек майына тығып ултырыу нәтижәле дауа. Аҙнаһына 1-2 мәртәбә 15-20 минут эшләргә кәрәк. Тырнаҡ тирәһендәге тирегә туҡландырғыс крем һөртөргә.

❖ Тырнаҡтар һәр саҡ ныҡ булһын тиһәгеҙ, лимон, ҡыҙыл һәм ҡара ҡарағат, мүк еләге һуттарын һөртөргә кәрәк.

### Эс йомшартыу

❖ 15 г ерек тубырсығына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, кәстрүлдә ҡайнап ултырған һыуға ҡуйып, 15 минут ҡайнатырға, һыуытырға, һөҙөргә. Ҡайнаған һыу өҫтәп, тәүге күләменә еткерергә. Был төнәтмәне ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 2-3 мәртәбә 1/3 стакан эсергә.

### Тән ауыртҡанда

❖ Төн йәки мускулдар ауыртҡанда 1 ҡалаҡ тал бөрөһөн һәм япраҡтарын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, 1 сәғәт төнәтергә һәм көнөнә 5-6 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ киптерелгән меңъяпраҡты 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, шәл менән урап, 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм төрлө сәбәп менән барлыҡҡа килгән мускул ауыртыуҙары ваҡытында көнөнә 3-4 мәртәбә ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Ҡоро һыҙланыуҙан

❖ 4 г ерек тубырсығына 1 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡойорға, ябыҡ эмаль һауытҡа һалып, һыуы ҡайнап ултырған кәстрүлдә 2-3 сәғәт ҡайнатырға, 2-3 ҡат марля аша һөҙөргә. Хәл яҡшырһын, ҡоро һыҙланыу бөтһөн өсөн ашар алдынан көнөнә 3-4 мәртәбә 1/3 стакан эсергә.

### Ауыҙҙан насар еҫ килгәндә

❖ 1 стакан йылы һыуға 1 ҡалаҡ бал ҡушып, тәнгәлөккә ауыҙҙы сайҡарға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ "Өфө губернаһында бер нисә ҡәбилә айырмаһы күҙәтелә, әммә улар араһында һан буйынса башҡорттар һәм рустар беренсе урын алып тора, татарҙар, мишәрҙәр, сыуаштар, сирмештәр һан буйынса икенсе планға сыға..."*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

**1907 йылда Баймаҡ районы Иҫән ауылында Руденко йөн менән сигелгән соляр орнаментлы кейеҙгә тап була. Аҡ кейеҙ ситтәре ҡыҙыл туҡыма менән ҡаймаланған. Ҡайма эргәһенән өйҙә һуғылған йәшел туҡыманан киңлеге 11 см тирәһендәге таҫмалар һалынған. Ҡыҙыл буҫтаулы тышлығында алһыу таҫма менән өсмөйөш билдәләнгән. Уның тирәләй тамбурлы сигеү менән ҡояш, йондоҙҙар, түңәрәктәр, мөгөҙгә оҡшаған олонло ағастар сигелгән. Был төбәктә ошо уҡ мотивтар байрам кейемендә лә осрай. Кейеҙҙең мөйөштәренә йәшел йөндән яһалған суҡтар беркетелгән.**

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

Белорет ҡалаһынан көньяҡ-көнбайышыраҡ йәшәгән тамъян һәм ҡатай ауылдарында туй кейеҙен үҙҙәренсә биҙәйҙәр. 1971, 1976, 1982 йылдарҙағы экспедицияларҙа Сермән, Аҙналы, Шығай һ.б. ауылдарҙа сигеүле кейеҙ түшәктәрҙе күп тап иттек. Уларҙың күбеһе 1950-1960 йылдарҙа эшләнгәйне, ҡайһылары боронғо түшәктәргә ҡарап яңыртылған. Биҙәк сергеләге кеүек - кейеҙҙең тар яғына һалынған. Һандыҡҡа тау итеп өйөп ҡуйылған ҡаралты араһында был түшәктәр сағыу булып ҡына түгел, ошо сигелгән биҙәкле буйы менән дә күренеп тора. Борон ҡыҙыл түшәк ҡыҙҙың бирнәһендә мотлаҡ булған. Әгәр ҙә өйҙә ошондай түшәк бар икән, тимәк, был йортта килен бар. Боронғо әйберҙәрҙең ҡиммәте бөгөн дә юғалмаған, уларҙы ҡәҙерләп һаҡлайҙар, улар менән ғорурланалар ҙа. Килгән ҡунаҡҡа ял итеп алыу өсөн йәшел үләнгә, йә булмаһа, кейеҙ өҫтөнән ошо түшәктәрҙе йәйәләр. Уртала ҡымыҙ һауыты һәм ҡымыҙ эсеү өсөн һауыттарға урын ҡалдырыла.

Байрамса түшәктәрҙе тышлау өсөн ҡыҙыл, көрән, шәмәхә, ҡара күк, ҡара төҫтәге туҡыма һайланған. Ситтәренә һалынған буй ҡыҙыл фонға - ҡара, шәмәхә, күк; ҡара, ҡара күк, шәмәхә фонына - ҡыҙыл; ҡара күк фонға ҡыҙғылт һары итеп һайланған. Ҡусҡар биҙәктәр үҫемлектәргә яҡын биҙәктәргә оҡшап тора, уларҙы төрлө төҫтәгеептәр менән сигеп яһағандар.

Аҙналы ауылында осраған бер түшәктең ситтәре ҡыҙыл һәм көрән төҫтәге буйҙарҙан ҡаймаланған. Уларҙың араһында, ҡара күк фонға биҙәк һалынған. Шыма нағыш менән баҫҡыслы ромбтар һәм йондоҙҙар сигелгән. Кейеҙ тышында йыш ҡына "кәзә" йөйө ҡулланылған. Һуңғараҡ яһалған өлгөләрҙә машина менән ике ҡатлы кәкерсәк, йәки киҫелешкән тулҡынлы линиялар һалып биҙәү осрай. Буранғол ауылында (Әбйәлил районы) уртаһы ҡорама менән биҙәлгән түшәктәрҙең ситтәре сигелгән, шулай уҡ ҡорама үҙе лә сигелгән.

Шул уҡ территорияла (Белорет, Әбйәлил райондары) "ҡусҡар" биҙәге өҫтәмә рәүештә аппликация менән байытылған. Аппликация үҙәккә ҡаратылған һәм бер буйға теҙелгән биҙәктәрҙән тора. Ғәҙәттә аппликацияны, әҙер материалдан күпме сыға, шул рәүешле оҙон буй итеп ҡырҡып алалар ҙа, рамка эсенә күпме һыя, шунда өлөшкә бүлгеләп алғандар. "Мөгөҙ", "ҡусҡар" кеүек сығып торған биҙәктәр бейек булмай, сигелгән орнаменттың эсенән сыҡмай.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...*

# ӨФӨ ГУБЕРНАҺЫНДА...

## һан буйынса башҡорттар өҫтөнлөк иткән



**1708 йылдан башҡорттар административ йәһәттән Өфө провинцияһына ингән. 1744 йылдан 1781 йылға тиклем Өфө провинцияһы ул ваҡытта ойошторолған Ырымбур губернаһына ҡарай. 1744 йылда Ырымбур губернаһына быға тиклем Себер губернаһы өлөшө булып торған Иҫәт провинцияһы ла (Урал аръяғы Башҡортостаны) инә. 1781 йылда ике: Өфө һәм Ырымбур өлкәләренән торған Өфө наместниклығы ойошторола һәм ул 1796 йылға тиклем ғәмәлдә була. XVIII быуаттың 1865 йылына тиклем тотош Башҡортостан ҡабат ойошторолған Ырымбур губернаһына инә.**

1865 йылда яңы административ реформа барышында Ырымбур губернаһы ике айырым - Өфө һәм Ырымбур губерналарына бүленә. Өфө губернаһына - Бәләбәй, Бөрө, Минзәлә, Стәрлетамаҡ, Златоуст һәм Өфө өйәҙҙәре, Ырымбур губернаһына Верхнеуральск, Ырымбур, Орск, Троицк, Силәбе өйәҙҙәре инә. Башҡорттарҙың бер өлөшө шулай уҡ Пермь, Һамар, Һарытау губерналарында тороп ҡала.

Сираттағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһына бәйле, 1870 йыл мәғлүмәттәре буйынса, Өфө губернаһы ауылдары исемлеге айырым ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ул 1877 йылда Санкт-Петербургта Эске эштәр министрлығының Үҙәк статистика комитеты тарафынан баҫылып сыға һәм 2002 йылда Өфөлә Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә ҡабаттан нәшер ителә. Өфө губернаһы тураһындағы тарихи очеркта губернала йәшәүсе ҡәбиләләр, милләттәр тураһында ҡиммәтле мәғлүмәт бирелә. Атап әйткәндә, "Өфө губернаһында бер нисә ҡәбилә айырмаһы күҙәтелә, әммә улар араһында һан буйынса башҡорттар һәм рустар беренсе урын алып тора, татарҙар, мишәрҙәр, сыуаштар, сирмештәр, вотяктар (удмурттар) билдәле бер процентҡа эйә булһа ла, һан буйынса икенсе планға сыға..." Әлбиттә, аҫаба булып, һис шикһеҙ, Ҡаҙан ханлығы ҡолағанға тиклем Өфө губернаһының барлыҡ ерҙәренә берҙән-бер хужа булған башҡорттар һаналырға тейеш.

1552 йылда Ҡаҙан ханлығы ҡолағас, Өфө крайы өсөн яңы тарихи осор башлана. Яулап алынған ерҙәрҙән татарҙар, сирмештәр, сыуаштар, мишәрҙәр башҡорт ерҙәренә килеп һыйыныу таба; уларҙың бер өлөшө дин һәм тел буйынса айырым ҡәбилә, ҡатламға әйләнеп, "типтәр" булып китә.

Өфө губернаһында 1877 йылға ҡарата 6 ҡала, 2805 ауыл, шул иҫәптән 1001 башҡорт ауылы була.

Өйәҙҙәр буйынса: Өфө өйәҙе. Барлығы 462, шул иҫәптән 146 башҡорт ауылы.

Бәләбәй өйәҙе: 477 һәм 278; Бөрө өйәҙе: 755 һәм 111; Златоуст өйәҙе: 167 һәм 113; Минзәлә өйәҙе: 511 һәм 120; Стәрлетамаҡ өйәҙе : 431 һәм 233.

1865 йылда, губерна ойошторолоу мәленә тиклем бында 1290809 кеше иҫәпләнә, башҡорттар халыҡтың яртыһын алып тора. Ҡала халҡының милли составын ҡарағанда: башҡорттар - 446, рустар 46760, татарҙар 3032, поляктар 667, немецтар - 449, йәһүдтәр - 162 була, йәмғеһе ҡалаларҙа 51516 кеше иҫәпләнә. Ауыл ерендә башҡорттар 619296, рустар - 409184, татарҙар - 86701, сирмештәр - 51172, сыуаштар - 34296, вотяктар - 19994, мордвалар - 18650 кеше тәшкил итә. Барлығы ауыл ерендә 1239293 кеше иҫәпләнә.

Өфө губернаһының 1865 йылда билдәләнгән административ структураһы 1919 йылға - Башҡорт Хөкүмәте менән Эшсе-Крәҫтиән Хөкүмәте Башҡортостан Совет автономияһын төҙөү тураһында Килешеү төҙөгәнгә тиклем һаҡлана.

1922 йылдың 14 июнендә ВЦИК "Башҡортостан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы сиктәрен киңәйтеү тураһында" декрет сығара. Унда: "Үҙәк Совет власы менән Башҡорт Хөкүмәте араһында 1919 йылдың 23 мартында төҙөлгән Килешеүҙе һәм Бөтә Рәсәй Үҙәк башҡарма комитетының 1920 йылдың 12 августындағы ҡарарын үҫтереү һәм өҫтәмәләр индереү буйынса Бөтә Рәсәй Үҙәк башҡарма комитеты: "1. Өфө, Бөрө, Бәләбәй, Златоуст өйәҙҙәрен Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы составына индереп, Өфө губернаһын бөтөрөргә..." ҡарар итә.

Архив документтары раҫлауынса, Оло Башҡортостан ойошторолғансы Баш-

*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!*

# ҮҘ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘҘЕ БЕЛӘЙЕК!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арнап, "Башҡортостан Республикаһы дәүләтселегенең тыуыуы һәм аяҡҡа баҫыуы: 100 шәхес" тигән проект иғлан иткәйне. Уның йомғаҡлау исемлеге Ҡоролтай Советы ултырышында раҫланды һәм иң беренсе сиратта милли хәрәкәттә ҡатнашыусыларҙың тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында китап сығарырға тигән ҡарар ҡабул ителде. Ҡоролтай шулай уҡ муниципалитеттар хакимиәттәренә яҡташтарының исемен мәңгеләштереү сараларын күреүҙе һорап та мөрәжәғәт итте. "Урындарҙа үҙ геройҙарын белергә тейештәр. Бының өсөн үҙ яҡташтарына һәйкәл ҡоралармы, улар йәшәгән, уҡыған биналарға таҡтаташ ҡуяларmы, урамдарға уларҙың исемдәрен ҡушалармы, кисәләр үткәрәләрме - уны үҙҙәре хәл итергә тейеш", - тинеләр Совет ағзалары. Түбәндә беҙ шул исемлекте тәҡдим итәбеҙ.**

**Әхмәт-Зәки Вәлиди Туған** (1890-1970), Башҡортостандың Ишембай районы Көҙән ауылында тыуған - Рәсәй федерализмы лидеры, Башҡортостан Республикаһына нигеҙ һалыусы, 1917-1920 йылдарҙа Башҡортостан автономияһы етәксеһе. Башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе.

**Манатов Шәриф Әхмәтйән улы** (1892-1936) - Ҡурған өлкәһе Манат (әлеге көндә ул ауыл юҡ) ауылында тыуған. Башҡорт хәрби хәрәкәте етәксеһе, Башҡорт үҙәк шураһы (1917) рәйесе, Башҡортостандың Кесе ҡоролтай (1917) ағзаһы, Бөтә Рәсәй учредительный йыйылышы (1917) депутаты.

**Бикбов Юныс Юлбарыҫ улы** (1883-1943) - Башҡортостандың Ейәнсура районы Әбүләйес ауылында тыуған - Башҡорт хөкүмәтенең беренсе рәйесе (1917-1919), Башҡорт автономияһының Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), Башҡорт Совет Республикаһының Юстиция халыҡ комиссары (1919).

**Ҡулаев Мстислав Александрович (Мөхәмәтхан Сәхипгәрәй улы)** (1873-1958) - Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районының Ейәнсура ауылында тыуған. Башҡорт хөкүмәте рәйесе (1919), Башревком ағзаһы (1919), 1919 йылдың мартында советтар менән һөйләшеүҙәр алып барыуҙа башҡорт делегацияһын етәкләй. 1919 йылдың 20 мартында Мәскәүҙә Башҡорт хөкүмәте исеменән Башҡортостан автономияһы тураһында Килешеүгә ҡул ҡуя.

**Халиҡов Муллаян Дәүләтша улы** (1894-1937) Бүздәк районы Аҡтау ауылында тыуған. Башҡорт үҙәк шураһы ағзаһы (1917-1919), советтар менән һөйләшеүҙәр алып бара, 1919 йылдың 20 мартында Башҡортостан автономияһы тураһында Килешеүгә ҡул ҡуйыуҙа ҡатнаша. Башсовнарком (1921-1925) рәйесе, 1922 йылда Ҙур Башҡортостанды төҙөү башланғысы менән сыға.

**Йомағолов Харис Йомағол улы** (1891-1937) Һамар өлкәһе Хәсән ауылында тыуған. Башҡорт үҙәк шураһы(1917), Кесе ҡоролтай (1917) ағзаһы, Башревком ҡарамағындағы ВЦИК вәкиле (1919), Башревком рәйесе (1919-1920). Баш-

✓ ***Башҡорт ғәскәре был ваҡытта ҙур көскә әйләнгән булған. Тәьминәте насар булыуға ҡарамаҫтан, фронтта ул ғәжәп ҙур ҡыйыулыҡ, күмәк батырлыҡ күрһәткән.***

ҡарма Үҙәк комитетына һәм Халыҡ Комиссарҙары Советына махсус доклад әҙерләүсе Башҡортостан Республикаһының сиктәрен билдәләүсе комиссия эшләй. Комиссия билдәләүенсә, Өфө губернаһының аҫаба халҡы башҡорттар була. Бындай һығымтаға килергә 1897 йылда үткәрелгән Рәсәй империяһының Беренсе дөйөм иҫәп алыу мәғлүмәттәре этәрә. Уға ярашлы, Өфө губернаһында 2196642 кеше йәшәй, шул иҫәптән башҡорттар 899910 (40,98 процент), рустар - 834185 (37,9 процент), татарҙар - 184817 (8,41 процент), мишәрҙәр - 20957 (0,95 процент), типтәрҙәр - 39955 (1,82 процент), сыуаштар - 60616 (2,75 процент), мордвалар - 37289 (1,69 процент) була.

Өйәҙҙәр буйынса башҡорттарҙың дөйөм халыҡ һанына процент нисбәте түбәндәгесә: Бәләбәй - 53,8 процент, Бөрө - 52,69, Минзәлә - 32,38, Стәрлетамаҡ - 35,31, Златоуст - 27,7, Өфө - 30,7.

1897 йылғы иҫәп алыу буйынса Ырымбур губернаһында 1600145 кеше йәшәй, шул иҫәптән башҡорттар - 254561 (15,91 процент), рустар - 1126040 (70,37), мишәрҙәр, типтәрҙәр менән бергә татарҙар - 114701 (7,16), украиндар - 41541 (2,59), мордвалар - 38403 (2,39 немецтар - 5454 (0,34), сыуаштар - 5064 (0,31). Был мәғлүмәттәр башҡорттарҙың бер ни тиклем өлөшө генә Ырымбур губернаһында, төп өлөшө тап Өфө губернаһында йәшәүен һәм революцияға тиклемге осорҙа ошо төбәктә һан буйынса беренсе урында тороуын дәлилләй.

1920 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, хәҙерге Башҡортостан территорияһында 3026,7 мең кеше, шул иҫәптән башҡорттар - 970,4 мең (32,06 процент), рустар - 1157,5 мең (38,24), төрки-татарҙар - 612,4 мең (20,23), башҡа милләттәр - 286,3 мең (9,47) булған.

Артабан халыҡ иҫәбен алыу 1926, 1939, 1959, 1979, 1989, 2010 йылдарҙа уҙғарыла.

Өфө һәм БАССР буйынса үткәрелгән иҫәп алыу йомғаҡтары күрһәтеүенсә, башҡорттар һаны кәмегән. Әгәр 1897 йылда БАССР территорияһында 899910 башҡорт йәшәһә, 1989 йылда 863808 теркәлгән, йәғни 100 йыл элек булғанға ҡарағанда 36102 кешегә кәмегән.

Мәғлүм булыуынса, башҡорттарҙың һаны кәмеүгә 1921 йылдағы аслыҡ та йоғонто яһаған. ВЦИК-тың 1920 йылдың 17 майындағы Декреты буйынса, 1897 йылғы иҫәп алыу буйынса 123052 башҡорт йәшәгән Минзәлә өйәҙе террриторияһы Татарстан АССР-ы составына бирелә, ә 1934 йылда, СССР ВЦИК-ы Президиумы ҡарары менән Арғаяш (дөйөм халыҡ һаны 45331 кеше), Ҡонашаҡ райондары (37768) Силәбе өлкәһенә тапшырыла.

Әммә башҡорттарҙың республиканың төньяҡ-көнбайыш райондарында, йәғни элекке Өфө губернаһында кәмеүенең төп сәбәбе булып ассимиляция тора.

1910 йылда Ҡаҙандың Үҙәк типографияһында "О татаризации иноверцев Приволжского края" тигән китап сыға, унда татар диндарҙарының, татар зыялыларының Волга буйы халыҡтарын: сыуаштарҙы, сирмештәрҙе, вотяктарҙы татарлаштырыу буйынса миссионерлыҡ эшен алып барыуы бәйән ителә. Китапта, "Волга буйында йәшәүсе башҡа диндәге кешеләр кеүек үк, ҡасандыр ҡырғыҙҙар ҙа, башҡорттар ҙа шундай хәлдә була, хәҙер улар үҙҙәрен татарҙарҙан айырмай һәм улар менән бергә бер ғәмәлде башҡара. Әлеге ваҡытта Өфө губернаһының Бөрө өйәҙендә татарҙы, башҡортто, сирмеште айырыуы ҡыйын, улар барыһы ла татар кеүек тойола. Хәҙер Бөрө өйәҙе ҡырғыҙҙары, башҡорттары, сирмештәре торған баҫҡыста башҡа сит милләттәр ҙә тороуы ихтимал һәм был уларҙы тулыһынса татарлаштырыуға килтерәсәк... Шуға күрә, һуң булмаҫ элек, башҡа диндәге кешеләрҙең татарҙар йоғонтоһона бирелеүенә сик ҡуйырға кәрәк. Был көсһөҙ сит милләттәрҙең Ислам һәм татарҙар тарафынан йотолоуына ҡаршы көрәштә дәүләт тә, йәмғиәт тә ҡатнашырға тейеш" (26-27-се биттәр).

Мәғлүм булыуынса, Өфө губернаһы башҡорттарын татарлаштырыу факты мосолмандарҙың Өфөләге Диниә назараты, татар диндарҙары, зыялыларының эшмәкәрлеге, татар мәктәптәре булдырыу, татар әҙәбиәтен нәшер итеү, татар типографияларын асыу һ.б. эшмәкәрлек һөҙөмтәһе була.

1923/1924 уҡыу йылында Бөрө кантонында 100-ҙән ашыу башҡорт мәктәбе эшләй, 30-сы йылдар һуңында бер генә башҡорт мәктәбе лә ҡалмай: уларҙа белем биреү татар теленә күсерелә.

"Совет архивтары" журналы хәбәр итеүенсә (№5, 1988 йыл), 1929-1934 йылдарҙа "Башҡорт АССР-ында башҡорттар йәшәгән ҡайһы бер райондарҙа рус йәки татар мәктәптәре генә ойошторола, сөнки урындағы мәктәптәр хеҙмәткәрҙәре, кадрҙар һәм дәреслектәр булмағанлыҡтан, башҡорт мәктәптәре асыу мөмкин түгел, тип иҫәпләй" (ЦГА РСФСР, ф.296, оп.1, д.461, л.48).

1937 йылдың 22 сентябрендә "Известия" гәзитендә Башҡортостанда халыҡ мәғарифы торошо тураһында мәҡәлә сыға. Унда: "... мәктәптәрҙә туған башҡорт телендә уҡытыу даими өҙөлә. Тотош республикаға ни бары 9 башҡорт урта мәктәбе бар. Һуңғы көндәрҙә генә Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә беренсе урта башҡорт мәктәбе эшләй башланы. Башҡорт балаларын уларға ят булған татар телендә мәжбүри уҡыталар. Башҡорт уҡыусыларының яртыһы ғына туған телендә белем ала", - тип яҙыла.

Архив һәм баҫма сығанаҡтар мәғлүмәттәре республиканың төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының бер нисә быуыны (элекке Өфө губернаһы), мәктәп булмағанлыҡтан, үҙҙәренең туған телен, мәҙәниәтен, милли аңын юғалтҡанлығын, ассимиляцияланғанлығын раҫлай.

**Ғизетдин ИРҒӘЛИН,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

ҡорт Совет Республикаһы мәнфәғәттәрен әҙмәәҙлекле яҡлай.

**Мерәҫов Сәғит Ғөбәйҙулла улы** (1880-1932) Ырымбур өлкәһе Мерәҫ ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәтте башлап ебәреүселәрҙең береһе, тарихсы, фольклорсы. Башҡорт өлкә бюроһы ағзаһы, Беренсе Бөтөн башҡорт ҡоролтайын ойоштороусыларҙың береһе, "Мөхбир" һәм "Башҡорт" гәзиттәренә нигеҙ һалыусы һәм иң тәүге мөхәррире, Башҡорт үҙәк шураһы, Кесе ҡоролтайы ағзаһы, Башҡортостан мосолмандарының диниә назараты (1918-1919) рәйесе.

**Йәғәфәров Аллабирҙе Нурмөхәмәт улы** (1886-1922) - Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәтте башлап ебәреүселәрҙең береһе, Башҡорт өлкә бюроһы ағзаһы (1917), Беренсе Бөтөн башҡорт ҡоролтайын ойоштороусыларҙың береһе, Кесе ҡоролтай ағзаһы, Башҡорт Совет Республикаһының мәғариф халыҡ комиссары (1919-1920).

**Мутин Илдархан Ибраһим улы** (1888-1938) - Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙе (хәҙерге Татарстандың Аҡтаныш районы) Таҡталасыҡ ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт лидерҙарының береһе, башҡорт дворяндары Мутиндар нәҫеленән, Башҡорт үҙәк шураһы, Башҡортостан Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), Башҡорт хәрби советы рәйесе урынбаҫары (1918), Башревком ағзаһы (1919), БАССР социаль тәьминәт наркомы (1919).

**Бабич Шәйехзада Мөхәмәтзакир улы** (1895-1919) - БР Дүртөйлө районы Әсән ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәттең иң әүҙем эшмәкәрҙәренең береһе. Башҡорт әҙәбиәтенең классигы, Башҡортостан үҙәк шураһы ағзаһы (1917), "Тулҡын" башҡорт йәштәре берлеген ойоштороусыларҙың береһе (1917), шиғриәтендә автономия өсөн көрәшкә, тыуған Башҡортостанына дан йырлай.

**Мортазин Муса Лут улы** (1891-1937) - БР Учалы районы Көсөк-Маяҡ ауылында тыуған. Дәүләт һәм хәрби эшмәкәр, легендар комбриг, граждандар һәм совет-поляк (1920) һуғыштары геройы, Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалеры, Башҡорт кавалерия бригадаһы командиры (1919-1920), БАССР хәрби халыҡ комиссары (1920-1921), Башҡортостан Үҙәк башҡарма комитет рәйесе (1921-1922).

**Таған Ғәлимйән Ғирфан улы** (1892-1949) - Ҡурған өлкәһе Әлмән районы Тәңрекүл ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт лидерҙарының береһе, ғалим-этнограф, башҡорт милли армияһын ойоштороусыларҙың береһе, 3-сө Башҡорт йәйәүлеләр полкы командиры (1918-1919). Автономияның Ялан кантоны етәксеһе (1918).

**Таһиров Нуриәғзәм Таһир улы** (1888- ?) - Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Левашово (Ҡужа) ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли көрәш лидерҙарынаң береһе, Башҡорт үҙәк шураһы ағзаһы (1917), Арғаяш кантоны етәксеһе (1918), Башревком ағзаһы (1919), Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары (1919-1920), Арғаяш кантонының хәрби комиссары (1920).

**Бейешов Әхмәҙулла Әлмөхәмәт улы** (1896-1937) - Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районының Иҙелбай ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт лидерҙарының береһе, Башҡорт хәрби советы ағзаһы (1918), 2-се Башҡорт кавалерия полкы командиры (1918-1919), Башҡортостан Ғәҙәттән тыш комиссия рәйесе (1919-1920), Башҡорт халыҡ комиссарҙары советы рәйесе (1921), Башҡортостан өлкә комитетының яуаплы секретары (1921-1924), БАССР мәғариф халыҡ комиссары (1924-1925).

**(Дауамы 9-сы биттә).**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



*Әкрәм БЕЙЕШ*

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

Башҡорт хөкүмәтенең демократик платформала тороуы һәм революцияға ҡаршы ысын союздаш булырға теләмәүе аҡтарҙа ҙур ризаһыҙлыҡ уятҡан. Юғарыла әйтелгәнсә, башҡорттар революция яһағандары өсөн түгел, ә яман дошманлыҡ ҡылғандары өсөн большевиктарға ҡаршы барған. Башҡорт хөкүмәте совет яғында ябай эш кенә түгел, етәксе вазифа башҡарып киткән кешеләрҙе лә эҙәрлекләмәгән, уларҙы үҙенең урындағы һәм үҙәктәге власть органдарына эшкә алған. Бындай позиция аҡтарға башҡорттарҙы "большевиклыҡта" ғәйепләргә һәм өҙлөкһөҙ эҙәрлекләргә сәбәп биргән. 1918 йылдың 23 сентябрендә Һамар һәм Себер хөкүмәттәре урынына Бөтә Россия ваҡытлы хөкүмәте, икенсе төрлө әйткәндә, Өфө Директорияһы, ойошторолғас, башҡортто эҙәрлекләү бигерәк көсәйгән. Директория ябай һәм яуаплы башҡорт хеҙмәткәрҙәрен ҡулға ала башлаған. Себер төрмәләре башҡорт менән тулған. Эҙәрлекләүҙең көсәйеүе "большевиклыҡ" менән көрәшеүҙән түгел, ә Директорияның элекке хөкүмәттәр биргән башҡорт автономияһын бөтөрөргә уйлауынан булған.

Башҡорт автономияһына ҡаршы дошманлыҡ эше эшләп, Директория иң элек Башҡорт ғәскәренә күҫәк төшөрөргә, шуның менән Башҡорт хөкүмәтен ҡоралһыҙландырырға ҡарар иткән. Башҡорт ғәскәре был ваҡытта ҙур көскә әйләнгән булған. Тәьминәте насар булыуға ҡарамаҫтан, фронтта ул ғәжәп ҙур ҡыйыулыҡ, күмәк батырлыҡ күрһәткән. Фронт һыҙығы аръяғында ла уны яҡшы белә, бик иҫәпләшә башлағандар, аҡтар яғында ла ул ҙур хәүеф уятҡан. Шуға күрә Директория милли теләк һәм бер маҡсат менән ныҡ ойошҡан был ғәскәри берәмекте бер һуғыуҙа ҡыйратырға булған: 1918 йылдың 15-19 октябрендә Юғары баш командующий штабы Башҡорт ғәскәренә мобилизация үткәреүҙе туҡтатыу, Башҡорт корпусын таратыу, уның полктарын рус ғәскәри берәмектәренә беркетеп, тотош рус етәкселегенә буйһондороу һәм Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби советын бөтөрөү тураһында бойороҡ биргән, һөҙөмтәлә, башҡорт полктары фронттың төрлө еренә күсерелгән, юғары башҡорт командованиеһы улар менән бәйләнеш тотоу хоҡуғынан мәхрүм ителгән. Бер юлы башҡорт ғәскәрҙәренең етәкселегенән мосолман офицерҙар алынып, улар урынына рус казак офицерҙары, милли автономияның ата дошмандары, ҡуйылған. Шунан башҡа, башҡортто яуҙа ҡырыу өсөн электән ҡулланылған ысул буйынса башҡорт полктарын фронттың иң ҡурҡыныс ерҙәренә, һөжүмгә барған сафтарҙың алдынан ебәрә башлағандар.

Әлбиттә, башҡорттар менән аҡтар араһы баштан уҡ киҫкен булған, ул мөнәсәбәт һаман нығыраҡ боҙолоуға барған, шуға күрә яҡшылыҡ көтөр урын булмаған. Ләкин барыбер Башҡорт ғәскәренә төшкән күҫәк башҡорттарға йәшен һуҡҡан кеүек тәьҫир иткән: йәнә уларҙың аяҡ терәр таянысы ҡалмаған. Башҡорт һалдаттары үҙ ғәскәренә үҙ автономияһын һаҡлар өсөн барған, шул автономия өсөн йәнен бирергә әҙер булған. Ә хәҙер уларҙы яуыз батша заманын кире ҡайтарыр өсөн үлемгә ҡыуалар.

**(Дауамы бар).**

*✓ Ул Татар АССР-ына бирелгән Минзәлә, Бөгөлмә өйәҙҙәрен Башҡортостанға ҡушыуҙы һорай. Әммә Үҙәк власть быға риза булмай. 150 мең иҫәпләнгән Минзәлә өйәҙендәге башҡорт халҡы 1926 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа татар итеп яҙыла.*

# АВТОНОМИЯ БҮЛӘК ИТЕП БИРЕЛМӘНЕ,

## ул даръялай ҡан түгеп яуланды

### Уның тарихы 1917 йылдан башлана

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы, профессор:** Башҡорт милли хәрәкәте 1917 йылғы Февраль революцияһынан һуң формалаша, сөнки тап ошо ваҡытта илдә демократлашыу процестары башланып, төрлө йәмәғәт ойошмалары әүҙемләшеп китә. Революциянан һуң күп тә үтмәй, Мәскәүҙә Мосолмандарҙың Бөтә Рәсәй съезы асыла. 1917 йылдың 1-10 майында уҙған мосолмандар йыйынында 58 башҡорт делегаты ҡатнаша. Әхмәтзәки Вәлиди был съезға Төркөстан вәкиле булараҡ килә, ғилми-сәйәси доклад менән сығыш яһай. Башҡорт, ҡаҙаҡ, әзербайжан, Ҡырым татарҙары делегациялары йоғонтоһо аҫтында күпселек тауыш менән Рәсәйҙә составына ерле автономиялар ингән федератив республика төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителә. Әммә Ҡаҙан вәкилдәренең ҡотҡоһо арҡаһында съезда ер мәсьәләһе буйынса аҫабалыҡ хоҡуғын инҡар итеүсе резолюция ҡабул ителеү менән башҡорт һәм ҡаҙаҡ делегациялары риза булмай. Башҡорт вәкилдәре ер һәм мөхтәриәт мәсьәләләре буйынса Ырымбурҙа ҡоролтай йыйыу тураһында килешә. 1917 йылдың июль-август айҙарында уҙған башҡорт ҡоролтайҙарында Башҡортостан автономияһына тәүге нигеҙ таштары һалына.

Байтаҡ йылдар Башҡортостан автономиялы республикаһы 1919 йылдың мартында Совет хөкүмәте ҡарары менән ойошторолған, был коммунистар партияһының аҙ һанлы милләттәргә ҡарата шәфҡәтле сәйәсәте һөҙөмтәһе, тип тәкрарланып киленде. Үҙәк Совет власы менән Башҡортостан хөкүмәте араһындағы тарихи Килешеүҙәге яҡтарҙың берәһе булған Башҡортостан хөкүмәте ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң, уны Советтар төҙөмәгән бит? 1917 йылдың 11 ноябрендә I Башҡорт ҡоролтайында ойошторолған Башҡорт үҙәк шураһы үҙенең тарихҡа ингән "Беренсе һанлы фарман"ында Башҡортостан мөхтәриәтен Советтар ҡулынан алмаясаҡбыҙ, халҡыбыҙҙың хоҡуҡ һәм ихтыярын үҙ ҡулыбыҙ менән сикләргә риза булмаясаҡбыҙ, тигән ҡәтғи ҡараш белдерелә. Атаман Дутов казактары Ырымбурҙы алыу менән 15 ноябрҙәге "Икенсе һанлы фарман"да Ырымбур, Пермь, Өфө һәм Һамар губерналары сиктәрендә Башҡортостан ерле мөхтәриәте иғлан ителә. 1917 йылдың 8-20 декабрендә уҙған III Башҡорт ҡоролтайы Башҡортостан мөхтәриәтен законлаштыра. Әммә Ырымбурҙа иғлан ителгән автономия Үҙәк тарафынан танылыу тапмай. Киреһенсә, Ырымбур Совет власы ҡарамағына күсеү менән, Башҡортостан хөкүмәте ағзалары 1918 йылдың 17 февралендә ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Апрелдә дутовсылар һәм башҡорттар Ырымбурға баҫып инеп, хөкүмәт ағзаларын төрмәнән азат итә. Чехословактар һәм Комучтың Халыҡ армияһы ойошторған ҡоралды күтәрелештән файҙаланып, башҡорт хәрәкәте етәкселәре Силәбегә килеп урынлаша һәм үҙ эшмәкәрлеген дауам итә. Тиҙ арала башҡорт ғәскәренә мобилизациялау ойошторолоп, ике дивизиянан торған аҡ башҡорт корпусы төҙөлә.

Граждандар һуғышының тиҙ үҙгәреп торған шарттарында күп ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, Башҡортостан хөкүмәте башҡорт кантондарында һәм улыстарында эҙмә-эҙлекле рәүештә үҙ йоғонтоһон һәм контролен булдырыуға өлгәшә. Ғәмәлдә аҡ армия етәкселегә башҡорттарҙың хоҡуҡтарын һәр яҡлап сикләргә тырыша. 1918 йылдың 18 ноябрендә Себер хөкүмәтендә өҫтөнлөк иткән шовинист генералдар ярҙамында Омскиҙа адмирал Колчак үҙен "Рәсәйҙең юғары хакимы" итеп иғлан итә. Колчак Башҡортостан хөкүмәтен һәм башҡорт ғәскәрҙәрен тарҡатыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Әммә Башҡортостан хөкүмәте идара итеү системаһын юҡҡа сығарырға юл ҡуймай. Ошондай ҡатмарлы шарттарҙа Башҡортостан хөкүмәтенә милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын таныған Советтар яғына сығыуҙан башҡа юл ҡалмай. 21 февралдә уҙғарылған Бөтә башҡорт хәрби съезында яңы революцион орган - Башревком булдырыла. Ошо ваҡиғаларҙан һуң 1919 йылдың 20 мартында Мәскәүҙә "Үҙәк Совет власының Башҡортостан хөкүмәте менән автономиялы Совет Башҡортостаны тураһында Килешеүе" тип аталған тарихи документҡа ҡул ҡуйыла. Килешеү нигеҙендә Кесе Башҡортостан сиктәрендә Рәсәйҙең федератив өлөшө тип танылған Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы рәсми рәүештә иғлан ителә. Тимәк, башҡорт зыялыларының, башҡорт халҡының ҡоралллы көрәше, ҡан ҡойоуы юҡҡа сыҡмай, сикләнгән булһа ла, үҙаллылыҡ яулауға мөмкинлек бирә.

### Үҙаллылыҡ аңы халыҡ хәтерендә була әле...

**Рәсих ЗӘЙТҮНОВ, тарих фәндәре кандидаты:** 1917-1921 йылдар тарих фәне өсөн дә, киләһе быуындар өсөн дә бик фәһемле ваҡиғалар сығанағы булып тора. Башҡорт автономияһының барлыҡҡа килеүе илдә хаос барған осорға тура килә. Октябрь революцияһы менән башланып киткән Граждандар һуғышы башҡорт зыялыларын, идарасыларын милли үҙбилдәләнеш идеяһын ҡыйыуыраҡ күтәреүгә этәрә. Автономияны төҙөүгә килтергән сәбәптәр революция, граждандар һуғышы менән генә сикләнеп ҡалмай, уларҙың тамыры тарих төпкөлөнә барып тоташа. Башҡорттар Рәсәй составында йәшәү осоронда үҙ ерен, йәшәү рәүешен һаҡлап ҡалыу өсөн көрәште бер ваҡытта ла туҡтатмай. Был юлы ла илдә башланған тетрәнеүҙәр күп милләттәрҙе, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла уята. Башында Вәлиди, Йәғәфәров, Алкин, Мортазин кеүек кешеләрҙән торған 1917-1919 йылдарҙағы милли хәрәкәттең үҙәгендә лә халыҡ мәнфәғәттәре өсөн көрәш, ер һәм башҡа мәсьәләләр тора.

Башҡорттар, башҡорт лидерҙары "автономия" төшөнсәһен бик киң аңлаған. Ул иң беренсе "аҫаба"нан башланғыс алған. XVI быуаттың уртаһында Рәсәйгә ҡушылғандан һуң Башҡортостан шул уҡ автономияны тәшкил итә. Унда Рәсәй менән мөнәсәбәттәр бары яһаҡ түләү менән генә сикләнә. 1865 йылға, кантон системаһы юҡҡа сыҡҡанға саҡлы, башҡорт йәмғиәтендә автономия элементтары һаҡланған була әле, йәғни, халыҡ үҙ законадары менән йәшәй. 1865 йылдан һуңғы реформаларҙан һуң да халыҡ автономиялы йәмғиәтте хәтерендә һаҡлаған була. Башҡорт Өлкә Шураһының Фарманында ла шулай тиелә: "халыҡтың хәтерендә әле үҙаллылыҡ аңы һаҡланған". Шуға күрә лә, 1917 йылда автономия тураһында һүҙ күтәрелгәс, башҡорттар араһында "Ул нимә?" тигән һорау булмай. Хатта яңы ғәскәрҙе лә улар автономияның бер элементы булараҡ ҡабул итә.

Автономияны ата-бабаларыбыҙ иҡтисади күҙаллауҙарҙан, иҡтисади ихтыяждарҙан сығып яулаған. Улар, ерҙәрҙе һаҡлап ҡалһаҡ, йәшәйәсәкбеҙ икәнде аңлаған. XIX быуаттың икенсе яртыһында Башҡортостандағы "алтын лихорадка"лары, ерҙәрҙе тартып алыуҙар, заводтар төҙөлөп, малсылыҡ системаһы юҡҡа сығарылыуынан зыян күреүҙәр халыҡтың үҙәгенә үтә. 1917 йылда тағы ла ошондай ҡурҡыныс янаған мәлдә, зыялыларыбыҙ ошо иҡтисади афәтте дөрөҫ баһалап, төбәктәрҙе яҡлау өсөн автономия төҙөүгә ынтыла. Бында ер хаҡынан юғарыраҡ төшөнсә булмай. 1917 йылдың 15 ноябрендә Өфө, Ырымбур, Пермь, Һамар губернаһындағы башҡорт территориялары Рәсәй республикаһының автономиялы өлөшө, йәғни Башҡортостан автономияһы тип иғлан ителә. Башҡортостан автономияһына Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙе һәм Һамар губернаһының Бөгөлмә өйәҙендәге башҡорттар йәшәгән территориялар ҙа инә. Башҡортостан автономияһын иғлан иткән тарихи фарманға Минзәлә башҡорттарынан арҙаҡлы милли хәрәкәт эшмәкәре Илдархан Мутин да ҡул ҡуя. 1918 йылдың йәйендә Башҡортостан хөкүмәте ҡайтанан эш башлай, әммә Оло Башҡортостан проекты артҡы планға күсә. Сөнки, тәү сиратта, милли армия ойоштороу зарураты тыуа. 1918 йылда автономия Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә генә ғәмәлгә ҡуйыла. Оло Башҡортостан проектына граждандар һуғышы тамамланғас ҡына ҡайталар. 1921 йылда Башҡортостан хөкүмәтенең рәйесе Муллайән Халиҡов автономиянан ситтә ҡалған башҡорттарҙы ҡушыу тәҡдиме менән Мәскәүгә сыға. Ул Татар АССР-ына бирелгән Минзәлә, Бөгөлмә өйәҙҙәрен Башҡортостанға ҡушыуҙы һорай. Әммә Үҙәк власть быға риза булмай. Революцияға тиклем 150 мең иҫәпләнгән Минзәлә өйәҙендәге башҡорт халҡы 1926 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа татар итеп яҙыла.

### Төрки халыҡтар өсөн автономия

**Нил ИШЕМҒОЛОВ, тарих фәндәре кандидаты:** Революцияға тиклем "төрки халыҡтар өсөн автономия" тигән бер генә программа ла булмай. Ул заманда рус милләтле булмаған халыҡтар Рәсәйҙә 50 проценттан күберәкте тәшкил итә. Әммә уларҙың төрлөһө төрлө үҫеш осорон кисерә. Әхмәтзәки Вәлидиҙең I, II һәм III ҡоролтайҙарҙа Рәсәй төҙөлөшөнөң киләсәген күҙаллауҙары программа нигеҙенә һалына. Йәғни, Рәсәй - ерле автономиялы дәүләт, ә һәр бер халыҡҡа автономия бирелә һәм төрки телле халыҡтар Рәсәй эсендә бер айырым федерацияла осраша. Бер һүҙ менән әйткәндә, өс баҫҡыстағы Федерация. Съездарҙа ҡаралған мәсьәләләр ошоларҙы дәлилләй. Мәҫәлән, I Башҡорт ҡоролтайына делегаттарҙы альтернатив нигеҙҙә, йәғни бер нисә делегат күрһәтелеп, йәшерен тауыш менән береһен генә һайлайҙар, демократик юл менән эш итәләр. Беренсе башҡорт ҡоролтайында Үҙәк шура (совет) төҙөлә. Рәйес һайлағанда бер аҙ шау-шыу ҙа булып ала. Ә. Вәлиди, юрист булыуын иҫәпкә алып, Ю. Бикбовты, ә Ҡорбанғәлиевтәр төркөмө Ш. Манатовты тәҡдим итә. Төркөстандың эштәренә бәйле булыу сәбәпле, Ә. Вәлиди үҙенә был вазифанан баш тартырға тура килеүен дә әйтә яҙмаларында. Һөҙөмтәлә, Шәриф Манатов үтә. Ул Үҙәк шураның, уны Башҡорт шураһы тип тә атайҙар, рәйесе булып китә. Был съезд ойоштороу съезы була, унда ер, уҡыу-уҡытыу, дин, Каруанһарайҙы ҡайтарыу кеүек мәсьәләләр күтәрелә. Ҡоролтайҙа, һис шикһеҙ, иң төп мәсьәлә - ерле автономия төҙөү була. Ғәскәр төҙөү тураһында ла һүҙ күтәрелә.

II ҡоролтайҙы Өфөлә үткәрергә ҡарар итәләр. Ваҡытлы хөкүмәттең ҡарары буйынса, был ваҡытҡа Учредительный съезд йыйылырға тейеш була. Ш. Манатов, Х. Йомағолов, Ә. Вәлиди һ.б. күп тауыш йыйып, сараның делегаттары итеп һайлана. Ваҡиғалар Октябрь революцияһына тиклем бара. Был осорға Үҙәк шураның составы киңәйтелә, башта алты ғына кеше була, һуңынан ул ун дүртҡә еткерелә. 1917 йылдың 8-20 декабрендә Өсөнсө ойоштороу съезы үтә, ул иғлан ителгән автономияны раҫлай. Шунда 2-се Фарман раҫлана, Рәсәй федератив дәүләт булырға тейеш, тигән ҡарар ҡабул ителә. Етәксе органдарҙан Кесе ҡоролтай тигән парламент төҙөлә, бөгөнгө Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай кеүек була инде ул. Ә Кесе ҡоролтай үҙ сиратында Беренсе башҡорт хөкүмәтен төҙөй, рәйесе итеп юғары белемле юрист Юныс Бикбов һайлана. Башҡортостандың ерле мөхтәриәте кантондарға, улыстарға бүленә.

### Ике йылдан һуң ғына танынылар

**Әлим ЗАРИПОВ, тарих фәндәре кандидаты:** Башҡорт автономияһы идеяһын Үҙәк Совет хөкүмәте танырға теләмәй, урындағы большевистик властар башҡорт хәрәкәтенә "контрреволюцион" тигән енәйәткә тиң баһа бирә, уның менән хеҙмәттәшлек итеүҙән ҡырҡа баш тарта. Был ғына етмәй, Башҡорт автономияһына ҡаршы ысын мәғәнәһендә һуғыш иғлан ителә. Татар шовинистары алға һөргән "Татар-башҡорт республикаһы"н төҙөү идеяһы Ленин һәм Сталин тарафынан яҡлау таба, 1918 йылдың яҙында уны ойоштороу эштәре йәйелдерелә. Ләкин, берҙән, 1918 йылдың йәйендә Башҡортостандың аҡтар ҡулында ҡалыуы, икенсенән, башҡорт халҡының был идеяға ҡырҡа ҡаршы булыуы арҡаһында был үле килеш тыуған авантюристик проект тормошҡа ашырылмай. Башҡорт автономияһын ойоштороусылар подпольеға китеп, көрәште йәшерен рәүештә дауам итергә мәжбүр булалар. 1918 йылдың мартынан, тыныс юл менән автономия яулап алыуға һис бер өмөт ҡалмағас, һәр ерҙә ҡоралды башҡорт отрядтарын ойоштороу башлана. Көрәштең беренсе этабында большевиктарға, улар етәкләгән советтарға, ҡыҙыл отрядтарҙың терроруна

✓ *Һөҙөмтәлә, башҡорт милләте үҙ дәүләтселеген тергеҙеү өсөн көрәштә (автономия формаһында) Рәсәйҙә башҡа бер милләт тә килтермәгән ҡорбан килтерә - 300 мең башҡорт 1917-1920 йылдарҙа һәләк була.*

ҡаршы партизан һуғышын киң йәйелдереү күҙ уңында тотола.

Беҙҙең төбәктә - Учалыла, был эшкә Муса Мортазин, Талха Рәсүлевтар етәкселек итә (тәүгеһе Күбәләк-Тиләү улысында милиция начальнигы, икенсеһе - Тамьян-Ҡатай кантоны начальнигы). Ләкин бөтөн ерҙә лә Совет власы нығынған, Миәс, Верхнеуральск, Белорет, Троицк, Силәбе ҡалаларына ҡыҙыл гвардия, эшселәрҙең ҡораллы дружиналары килеп тулған осорҙа быны тормошҡа ашырыу еңелдән булмай. 1918 йылдың апрелендә күтәрелеш үҙәге хәҙерге Әбйәлил районының Әхмәт ауылында була. Әхмәтзәки Вәлиди ошонан тороп башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте менән етәкселек итә, 57 ваҡ башҡорт партизан отрядтары менән дә бәйләнеш тотола. Иң беренселәрҙән булып, Әхмәтзәки Вәлиди янына большевиктарҙан ваз кискән Муса Мортазин килә, оҙаҡламай мәшһүр Ғайса Рәсүлевтың улы Талха Рәсүлев та килеп етә. Күп тә тормай, Әхмәтзәки Вәлиди менән Ғ. Рәсүлев икәүләп апрель аҙаҡтарында хәүефле юлға сығалар. Улар Учалы районы аша Кустанайға юл тоталар. Түләк ауылында (Шартымка станцияһы тирәһендәге был ауыл хәҙер юҡ инде) алтын йыуыу приискыһы хужаһы Ғәҙелшаһ исемле кешелә ял итергә туҡтайҙар. Бай булһа ла, бик йомарт һәм кешелекле була Ғәҙелшаһ. Башҡорт милли хәрәкәтенә матди яҡтан ныҡ ярҙам иткән кеше. Халыҡ араһында абруйлы, аҡыллы, алдан күрә белеү һәләтенә эйә була был яҡташыбыҙ. Үҙе уҡымышлы, урыҫса яҡшы белгән. "Сит ил мөнәсәбәттәре өсөн байтаҡ алтын аҡса, сәйәхәтебеҙҙе дауам итер өсөн аттар бирҙе", - тип, бик риза булып иҫкә ала уның тураһында Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә. Талха Рәсүлевты Ә. Вәлиди поезға ултыртып, кәрәкле ҡағыҙ, документтар, етерлек алтын, ҡағыҙ аҡса менән тәьмин итеп, Владивостокка, Япон консуллығына, кәрәкһә, Японияға барып етергә тигән маҡсат ҡуйып (Япония хөкүмәтенә, киң япон йәмғиәтселегенә Рәсәй мосолмандарының хәле, башҡорт халҡының автономия өсөн көрәше менән таныштырырға ҡушып), уны оҙатып ҡала. Был тарихи факт үҙе генә лә яҡташыбыҙ Талха Рәсүлевтың Әхмәтзәки Вәлидиҙең уң ҡулы, иң тоғро һәм ышаныслы ярҙамсыһы булыуы тураһында һөйләй. Шулай итеп, башҡорт халҡының үҙбилдәләнешкә булған хоҡуғын инҡар итеү, демократик юл менән һайланған Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алып төрмәгә ябыу - Совет власы өсөн дә, башҡорт милләте өсөн дә ҡот осҡос фажиғә ул. Был сәйәси хата ғына түгел, ә большевистик диктатура тарафынан эшләнгән ғәфү итмәҫлек енәйәт. Дөйөм алғанда, "урыҫ азатлығы" заманы (1917, октябрь - 1918, июнь) башҡорт халҡы күңелендә ауыр, йән өшөткөс тәьҫир ҡалдыра, уға ҡарата иғлан ителмәгән һуғыштың, террорҙың тәүге этабы булып күҙ алдына баҫа.

Икенсе төрлө әйткәндә, 1917 йылдың октябренән һуң Кремлдең яңы хакимдары, милләттәрҙең үҙбилдәләнешен яҡлап ҡыланһалар ҙа, асылда, халыҡтарҙы колониаль бығауҙан ыскындырмаҫ өсөн төрлө мутлыҡ, хәйлә юлына баҫалар, бер ниндәй енәйәт алдында ла туҡтап ҡалмайҙар, һөҙөмтәлә, башҡорт милләте үҙ дәүләтселеген тергеҙеү өсөн көрәштә (автономия формаһында) Рәсәйҙә башҡа бер милләт тә килтермәгән ҡорбан килтерә - 300 мең башҡорт 1917-1920 йылдарҙа һәләк була. Беҙҙең шуны онотторға хаҡыбыҙ юҡ: башҡорт халҡына автономия өҫтән бүләк рәүешендә бирелмәне, ул һуғышып, даръялай ҡан түгеп яулап алынды. Мәскәүҙең большевистик етәкселеге башҡорт автономияһын 2 йыл аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәткәндән һуң, тик 1919 йылда ғына танырға мәжбүр булды.

*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!*

# ҮҘ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘҘЕ БЕЛӘЙЕК!

**(Дауамы. Башы 6-7-се биттәрҙә).**

**Ғәбитов Хәбибулла Ғәбделҡаһир улы** (1886-1939) - БР Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәрҙәренең береһе, шағир, драматург, Башҡорт үҙәк шураһы, Кесе ҡоролтай ағзаһы (1917), "Башҡорт тауышы" гәзитен ойоштороусы һәм уның мөхәррире (1918), 1-се Башҡорт йәйәүлеләр полкының полк муллаһы (1918) 20-се йылдарҙа башҡорт әҙәби телен байытыуға өлөш индерә.

**Ҡарамышев Гәрәй (Мөхәмәтгәрәй) Батыргәрәй улы** (1888-1922) - БР Ишембай районы Маҡар ауылында тыуған. Башҡорт милли армияһын ойоштороусыларҙың береһе, башҡорт дворяндары Ҡарамышевтар нәҫеленән, Әмир, Мөхтәр, Сөләймән Ҡарамышевтарҙың ағаһы, Стәрлетамаҡ өйәҙе Башҡорт шураһы рәйесе (1917), Башҡорт хөкүмәтенең ер эшкәртеү бүлеге мөдире (1918), "Тулҡын" ойошмаһы рәйесе (1918), Башревком ағзаһы (1919-1920), Башсовнархоз рәйесе (1919-1920).

**Ҡарамышев Әмир Батыргәрәй улы** (1893-1918) - БР Ишембай районы Маҡар ауылында тыуған. Башҡорт милли армияһын ойоштороусыларҙың береһе, башҡорт дворяндары Ҡарамышевтар нәҫеленән, Гәрәй, Мөхтәр, Сөләймән Ҡарамышевтар менән бер туған, Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлек мөдире ярҙамсыһы (1917), Башҡорт хәрби советы ағзаһы (1918), 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры (1918), Верхнеуральск фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре командующийы (1918).

**Ҡарамышев Мөхтәр Батыргәрәй улы** (1895 - ?) - БР Ишембай районы Маҡар ауылында тыуған. Башҡорт милли армияһын ойоштороусыларҙың береһе, башҡорт дворяндары Ҡарамышевтар нәҫеленән. Гәрәй, Әмир, Сөләймән Ҡарамышевтар менән бер туған. Юрматы кантон идаралығы, Башҡорт хәрби советы ағзаһы (1918), 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры (1918-1919), Стәрлетамаҡ фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре командующийы (1918-1919), Табын, Тамьян-Ҡатай кантондарының хәрби комиссары (1919).

**Ҡарамышев Әбделғәни Бәхтегәрәй улы** - БР Ишембай районы Маҡар ауылында тыуған. Башҡорт милли армияһын ойоштороусыларҙың береһе, башҡорт дворяндары Ҡарамышевтар нәҫеленән, Гәрәй, Әмир, Мөхтәр, Сөләймән Ҡарамышевтар менән ике туған. Башҡорт хәрби советының интендант бүлеге мөдире (1918).

**Ҡарамышев Сөләймән Батыргәрәй улы** - БР Ишембай районы Маҡар ауылында тыуған. Башҡорт милли армияһы офицеры, башҡорт дворяндары Ҡарамышевтар нәҫеленән. Гәрәй, Әмир, Мөхтәр Ҡарамышевтарҙың бер туғаны. Башҡорт частары Ҡыҙыл Армия яғына сыҡҡас, Башҡорт кавалерия частары составында һуғыша, фронтта һәләк була.

**Ишмырҙин Әүхәҙи Ғәләүетдин улы** (? - 1923) - БР Ишембай районы Кинйәбулат ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Хәрби эшмәкәр. Сөләймән менән Ишбулды Ишмырҙиндарҙың ағаһы. Юрматы кантоны етәксеһе (1918). 6-сы Башҡорт йәйәүлеләр полкы командиры(1918), 1-се Башҡорт дивизияһы начальнигы (1919), Башҡорт совет республикаһының хәрби комиссары урынбаҫары (1919-1920), РККА-ның башҡорт частары етәксеһе.

**Ишмырҙин Сөләймән Ғәләүетдин улы** (1893-1935) - БР Ишембай районы Кинйәбулат ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Әүхәҙи һәм Ишбулды Ишмырҙиндар менән бер туғандар. Хәрби эшмәкәр, Юрматы кантоны ктәксеһе (1918), Көньяҡ фронттың 1-се Айырым Башҡорт йәйәүлеләр полкы командиры (1919), Үҫәргән, Табын кантондары етәксеһе (1920).

**Ишмырҙин Ишбулды Ғәләүетдин улы**, БР Ишембай районы Маҡар ауылында тыуған, Башҡортостан автономияһы өсөн милли көрәштә әүҙем ҡатнашыусыларҙың береһе, Әүхәҙи һәм Сөләймән Ишмырҙиндарҙың бер туғаны, 1919 йылда Башҡорт хөкүмәтендә хеҙмәт итә.

**Ҡушаев Хафиз Ҡушай улы** (1888-1938) - Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Күҙәш ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт һәм дәүләт эшмәкәре. Арғаяш кантоны етәксеһе (1918), Арғаяш кантон башҡарма комитеты рәйесе (1920-1922), Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитет рәйесе (1922-1929).

**Мәғәзов Сәйетгәрәй Сәйетйәғәфәр улы** (?-1921) - Ҡурған өлкәһе Әлмән районы Аҫҡар ауылында тыуған. Башҡорт автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡортостан хәрби советы (1918), Башревком (1919) ағзаһы, БАССР хәрби комиссариатының сәйәси-ағартыу идаралығы начальнигы (1920).

**Солтанов Искәндәрбәк Мөхәмәтйәр улы** (1872-?) - башҡорт дворяндары Солтановтарҙың хәҙерге Татарстандағы Аҡтаныш районына ҡараған Мәсти ырыу биләмәһендә тыуған. Башҡорт автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре, башҡорт дворяндары Солтановтар ырыуынан, мосолмандарҙың Үҙәк диниә назараты мөфтөйө М.Солтановтың улы. Башҡорт Кесе ҡоролтайы ағзаһы (1917), Башҡорт хөкүмәтенең юридик бүлеге мөдире (1918), Башҡорт хәрби советы ағзаһы (1918), Өфө дәүләт кәңәшмәһендә ҡатнашыусы (1918).

**Ҡыуатов Усман Мөхәмәтғәлим улы** (1897-1956) - БР Ейәнсура районы Үтәғол ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡорт дворяндары Ҡыуатовтар ырыуынан, Мөхәмәтғәлим Ҡыуатовтың улы, Ғүмәр Ғәлим (Мөхәмәтғәлим) улы Ҡыуатовтың ҡустыһы. Башҡорт үҙәк шураһы ағзаһы (1917), Башҡорт хөкүмәте, Башревком ағзаһы (1919), БАССР финанс һәм һаулыҡ һаҡлау хәрби комиссары.

**Ҡыуатов Ғүмәр Ғәлим (Мөхәмәтғәлим) улы** (1893-1946) - БР Ейәнсура районы Үтәғол ауылында тыуған. Башҡорт автономияһы өсөн милли хәрәкәт эшмәкәре. Башҡорт дворяндары Ҡыуатовтар ырыуынан. Мөхәмәтғәлим Ҡыуатовтың улы, Усман Ҡыуатовтың ағаһы. Башҡорт халыҡ берлеге бюроһы, Кесе ҡоролтай ағзаһы (1917), Башревком ағзаһы (1919), БАССР һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары (1919-1928).

**Ҡыуатов Мөхәмәтғәлим Әбделғәни улы** (1873-1937) - БР Ейәнсура районы Үтәғол ауылында тыуған. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәттә әүҙем ҡатнаша. Мәғариф эшмәкәре. Башҡорт дворяндары Ҡыуатовтар ырыуынан. Ғүмәр һәм Усман Ҡыуатовтарҙың атаһы. Автономиялы Башҡортостандың Үҫәргән кантоны етәксеһе.

**Ҡыуатов Хужахмәт Әлмөхәмәт улы (1854 - ?)** - БР Ейәнсура районы Үтәғол ауылында тыуған булырға тейеш. Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәттә әүҙем ҡатнаша. Мәғариф эшмәкәре, башҡорт дворяндары Ҡыуатовтар нәҫеленән, кантон начальнигы Әлмөхәмәт Ҡыуатовтың улы. Семиреченский өйәҙ милицияһы начальнигы (1917), Башҡортостан хөкүмәтенең хәрби милиция начальнигы (1918).

**Ибраһим Ғабдулла Ғәбделғәлләм улы, Ибраһим Ҡыпсаҡ** (1895-1937), Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы, Сапыҡ ауылында тыуған Башҡортостан автономияһы өсөн башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре, яҙыусы. Ҡыпсаҡ кантонының кантон идаралығы ағзаһы (1918), Айырым Башҡорт уҡсылар бригадаһы (1919), Башҡорт кавдивизияһы комиссары (1920), БАССР-ҙың социаль тәьминәт халыҡ комиссары (1920-1921), Каруанһарайҙағы Башҡорт педагогия техникумы директоры (1923-1926).

**Сәғәҙиев Һиҙиәтулла Сибәғәтулла улы** (1887-1937), Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы Тирмәнйылға ауылында тыуған - Башҡортостан автономияһы өсөн башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре, Юрматы кантон идаралығы ағзаһы (1918), Петроградта Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлек мөдире (1919), Башҡорт уҡсылар бригадаһы комиссары (1920), БАССР Халыҡ мәғарифы комиссары (1921-1922).

**(Дауамы киләһе һанда).**



✓ **- Әлфиә-әү, сәй ҡайнаны, ҡайт тирмәгә! - танһыҡ тауыш. Ғүмере буйы ошо ауазды көттө. Рәүеф менән бесәнгә килерҙәр ҙә, маңлайҙан тир аҡҡансы шишмә һыуынан сәй эсерҙәр, тип хыялланды ҡалала.**



Рәүеф Фәнилдәрҙән тура Шамилдарға китте. Нәзирә апайҙан дуҫының хәлен белеште. Ысынлап та, ошо көндәрҙә ҡайтырға тейеш икән Шома. Фәнилдең теге ҡарағас тарихын әлегә уға һөйләмәгән булып сыҡтылар. Саҡ аҡылы теүәлләнгән, ҡуҙғып китер тағы, булыр унан Шәрифәнең төпһөҙ ҡомғаны. Шуға ята инде ул дауаханаһында, юғиһә күптән ҡасып булһа ла ҡайтып еткән булыр ине. Иртәгә ҡорт баҡсаһына барып ҡайтайым, Радуловты биреп торсо, тип алашаны һораны. Нәзирә апай, ауыл осондағы яланда йөрөйҙәр, тип йүгәнен сығарып бирҙе.

Энер төшкәс, мин малай-шалаймы, оялып, ҡурҡып йөрөргә, тип полицай Нурисламдарҙың йортона тура барып, ишеген шаҡыны Рәүеф. Бер тәүәккәлләгән... Ишекте полицай үҙе асты.

- Ни йомош, ҡустым?

- Әлфиә кәрәк ине. Осрашырға һөйләшкәйнек.

- Балаһын йоҡларға һалып йөрөй ул. Һуңғараҡ сыҡмаһа. Ниндәй осрашыу һуң ул?

- Класташтар тигәйнек, - тигән булды. Нурислам ҡуҙғала башлағайны, туҡтатты. - Һеҙгә лә йомош тигәндәй. Фәнилдең хәле нисек икән?

- Ултыра.

- Ҡарағасты ҡырҡҡанын кемдер еткергән бит ул. Шул беҙҙең ауылданмы икән, шуны белешә алаһығыҙмы?

- Мин уның кем икәнен беләм.

- Ошо Ташлыйылғананмы?

- Нимәгә кәрәк ул һиңә?

- Беҙҙең ауылда ла стукачтар бармы икән ни?

- Улар везде.

- Тимәк, беҙҙән, шулай тип уйлағайным да.

- Һеҙ шантрапалар тағы белмәйкүрмәй үс алып йөрөмәгеҙ, бәлки, беҙҙән дә түгелдер.

- Юҡ, ошо бәләнән ҡотолһаҡ, ниже травы. Әлфиә сығырмы икән?

- Хәҙер, - тип ауыр көүҙәһе менән иҙәнде шығырлата-шығырлата баҫып инеп китте лейтенант.

Оҙаҡ ҡына көттө Рәүеф.

- Нишләп йәш саҡтағылай һыҙғырып ҡына саҡырманың, һабаҡташ? - тип килеп сыҡты Әлфиә. Үҙенсә биҙәнгән, һөртөнгән икән. Тәмле хушбуй еҫе йыраҡтан уҡ танауына килеп бәрелде.

- Һыҙғыра торған теш төшкән. Атайын, нишләп йөрөй был алкаш, тимәнеме?

- Нишләп улай, тиһең. Өсөгөҙҙө лә бик хөрмәт итә ул. Зыяратты уратып кәртәләп алдылар, өлкәндәргә лә ярҙам итәләр, бик аҡыллы егеттәр ҙә, заман ғына боҙа үҙҙәрен, ти. Ҡайҙа барабыҙ?

- Бөгөн бер ҡайҙа ла бармайбыҙ, иртәгә толпарыма атланабыҙ ҙа донъяның иң гүзәл еренә осабыҙ.

- Аптыратма.

- Ысынлап. Иртәгә Фәнилдең ике дәҙәнен Шырлыҡ яланындағы нәҫел ҡарағастарына алып барып бәйләргә кәрәк. Ҡорт ҡундырырға. Былай ҙа һуңлағандар, ҡуналармы, юҡмы. Тыуған яғында бер сәйәхәт ҡылып ҡайтырға ниәтең юҡ түгелдер әле.

- Кил әле бында, - Әлфиә һабаҡташын солан тәҙрәһенән төшкән ут яҡтыһына алып килде. Ике усы менән Рәүефтең битен тотто, йөҙ ташламағанһың әле, тип кесәһенә тығылып ҡара көләм сығарҙы.

- Хәҙер мин һине ҡашлы итәм.

- Кит әле, - тип Рәүеф ҡаршылашып маташты.

- Улайһа, мин һиңә нисек яңынан ғашиҡ булам, - тип үсеккән ҡыҙ булып уйнағас, риза булды ҡашһыҙ егет.

Әлфиә тырышып-тырышып ҡаш һыҙҙы. Уның ҡайнар тыны Рәүефтә аңлап етмәҫлек дәрт уятты. Ул тында ҡайын туҙынан иретеп эшләнгән ҡара һағыҙ тәме килә ине. Уға шулай тойолдомо. Түҙгеһеҙ сиккә етте. Хатта бер аҙ күҙҙәрен дә йомоп торҙо, шунан ҡапыл Әлфиәнең иренеһен һурып үбеп алды. Тик нисектер ҡаушап ҡалдымы, Әлфиә этеп ебәрер йә биткә усы менән сәпәр, тип ҡурҡтымы, ҡыҙҙы тиҙ үк ебәрә һалды ла ҡараңғы урынға барып баҫты. Әлфиә ике ҡулын йәйеп бер әйләнде лә, ихлас көлөп, күтәрмәгә барып ултырҙы. Үҙе шым ғына:

- Әллә ошо йәшкә етеп үбешә лә белмәйһең инде, Рәүеф, - тине. Утыҙға етеп килгән егет баҫҡан урынында шым ғына йылмайҙы. Эйе, күптән, бик күптән үбешкәне юҡ ине уның. Рәхәт ине уға, хатта мыйығының һәр бер бөртөгө хәрәкәткә килеп бейешкән төҫлө.

"Ултыр эргәмә, үбешергә өйрәтәм үҙеңде", - тиһә лә, Әлфиә янына барманы, оялды.

- Иртәгә иртән киләм. Урманда сәй ҡайнатып эсербеҙ, йәме, - тип ҡуҙғалыу яғын ҡараны.




- Ә мин, бармайым, тиһәм.

- Йәне булған кеше Йәнекәйгә менмәй, Шырлыҡ яланын күрмәй буламы? Иҫәрҡай, иртәгәгә тиклем.

- Ә атайым менән әсәйем ебәрмәһә?

- Нурислам ағайға, класташтар иртәгә осрашырға һөйләшкәндәр, тип әйт. Ебәрмәһәләр, үҙенде тәҙрәнән тартып алырмын да, ҡасырбыҙ.

Әлфиә оҙаҡ йоҡлай алмай ятты. Үҙенең ирен уйланы. Рәүеф менән сағыштырҙы. Әсмәй, артыҡ тыйнаҡ әҙәм. Таҙа, күркәм. Йәш саҡта шунын менән үҙенә ҡаратты ла. Торғаны менән бер аристократ. Ауыл ҡыҙы өсөн буй етмәҫлек бейеклек ине ҡала егете. Буйы етте, йәшәп киттеләр. Таң ҡалдырған аристократлыҡ, тыйнаҡлыҡ бара-бара ваҡлыҡҡа әйләнде. Урманда үҫкән, бар донъя уртаҡ, тип һәр өлөшөн бүлешеп үҫкән ҡыҙ уның ашҡа тоҙҙо ла йәлләп һалыуын, тишек нәскийен дә ямап кейгәнен аңламай ҙа ине. Ире уйлап тапҡан тәртиптән, ҡанундарҙың ҡолона әйләнә барыуын тойҙо. Һуңынан үҙен ире кеүек ситлектәге ҡоштай хис итте. Урманда үҫкән ҡыҙҙы ситлектә түгел, таш йортта ла тотоп булмағанын аңламай ине шикелле уныһы. Ата-әсәһе ҡаршы булһа ла айырылышырға үҙе ғариза бирҙе. Әлегә суд булмаған. Ире менән яҡынлыҡ булғанда ла бала саҡтағы мөхәббәте булған Рәүефте йыш күҙ алдына баҫтыра ине ул. Гонаһҡа батып. Рәүефтә үҙен һаҡларҙай ҡалҡан тойҙо. Унан бигерәк, унда сабыйҙарса бер сафлыҡ һиҙҙе. Баш ҡалағы ығызығы, фатирындағы тын ҡурылыҡ тар күңеллелек уны һәр саҡ иреккә сығырға этәрҙе. Күҙҙәрен асыр, булған ваҡлыҡтарҙан ҡасыр өсөн уға тик ауылы, Ҡағы буйы, урмандары ғына ярҙам итә ала. Йөрәгендәге быҫҡып яткан утты дөрләтергә, дәртенә, дарманына ялҡын өҫтәр өсөн генә лә ошо Ташлыйылғала айҙар, йылдар буйы ятырға риза ул.

Көтөү китеп, урамға һиллек яткас, ҡуҙғалдылар. Бер-береһенә арҡа терәшеп ултырып, яйлап ҡына уяна барған донъяға ҡарап һоҡланып килде һабаҡташтар. Әсәһенең риза булып ебәреүенә аптырағас Әлфиә. Елләнеп килһен, тигәндәр. Буйҙаҡ Рәүефтән әҙерәк ҡурҡмайҙармы икән ни? Үбешә лә белмәйенсә, көсләп ҡуйһа. Үҙе эстән кинәнеп йылмайҙы.

Атын бәйләгәс, тәүҙә болондо биләп ултырған умарталарҙы ҡарап сыҡты Рафа. Барыһы ла иҫән. Шунан усаҡ тоҡандырҙы, сәй ҡуйҙы. Ул арала Әлфиә ҡарағастың сайырын аҡтарып сәйнәне, көс туплайым, тип имәнде ҡосаҡлап хәтһеҙ генә торҙо, үҙе күҙ ҡырыйы менән Рәүефте күҙәтте. Уның һәр эште белеп башҡарыуына, тағаны элеп, усаҡ тоҡандырыуына, ағас ҡырҡып килтереүенә, арба эргәһендә ҡупшы ғына япма әтмәләүенә һоҡланып, дикҡат биреп ҡарап торҙо. "Урманда ҡалай үҙен тәүәккәл тота". Умарталар ултырған яланға төшөп сәскәләр йыйҙы, ҡулдарын йәйеп ҡояш йылыһында торҙо, иң көслө энергия тыуған ерҙән килә ул, тип ялан аяҡ хәтфә үләндә тапанды. Күнеле асылғандан асыла барҙы Әлфиәнең. Ҡош булып осоп, бар тирә-йүнде байҡап кил ине. Ялан буйлап йүгергеһе килде, тик үҙен тыйҙы, бала сағы кеүек...

- Әлфиә-әү, сәй ҡайнаны, ҡайт тирмәгә! - танһыҡ тауыш. Ғүмере буйы ошо ауазды көттө. Рәүеф менән бесәнгә килерҙәр ҙә, маңлайҙан тир аҡҡансы шишмә һыуынан сәй эсерҙәр, тип хыялланды ҡалала. Көрөшкәгә урман еләген, мәтрүшкәһен һалып. Йәл, әле икеһе лә өлгөрмәгән. Һуңынан кәбән һалырҙар. Әлфиә башта торор, ире, Рәүефе, бәһлеүән көүҙәһе менән бесән ырғытыр. Эш бөткәс, иренең елкәһендәге бесән ыуағын яулыҡы менән һөрткөләп төшөрөр ҙә, яҫы усына һыу һалыр. Шунан ул Әлфиәгә һалыр, ҡатыны әйелгән саҡта, шым ғына елкәһенә һыу ҡойор. Уныһы, һыу тамсыһы, сирҡандырып, арҡа буйлап тәгәрләп төшөп китер. Әлфиә бик, бик тә асыуланып ирен ялан буйлап баҫтырыр. Һуңынан тағы тәмләп сәй эсерҙәр.

Рәүеф үҙенсә табын әҙерләне, өйҙән икмәк, ҡорот, ҡайнатма алғайны. Йомолай бешерелгән йомортҡалар табынға тәгәрләшеп ятты. Әлфиә йыйылған сәскәләрен һалғас, табын тағы ла күркәмләнеп китте. Рафа сәйгә йүкә сәскәһе тығып алды. Тирә-йүнгә усаҡ ҡатыш сәй еҫе таралған. Мәктәп йылдарын иҫләп, ауыл хәбәрҙәрен һөйләп, сәй эстеләр.

Тамғалы ҡарағастарҙы Рәүеф Фәнилгә ярҙамға килгәнендә күргәне бар ине. Шуға уларҙы тиҙ тапты. Радулов менән ағастарға дәҙәндәрҙе яҡынырак килтерҙе. Уларҙы арҡан менән арҡыры ботаҡтар аша тартып мендергәндә Әлфиә лә ихлас ярҙам итте. Һуңғыһын теге тармаҡлы ҡарағасҡа урынлаштырғас, тәбиғәт ҡосағында гелән генә булып булмай, рәхәтләнеп тағы сәй эсәйек әле, тип таҡанға сәйнүк элделәр.

Сәскәле болонға ҡарап ултырҙылар. Рәүеф:" Мин һиңә сәскә бәйләме бүләк итмәйем, ғәфү ит, ә ошо тотош ялан сәскәләрен ал да ҡуй", - тип ҡатындың ҡулын тотто. Әлфиә ихлас йылмайҙы. Алһыуланып киткән бит алмалары, яңы уйынсыҡ алып ҡыуанған кеүек янған сабыйҙарса керһеҙ күҙҙәре, яулыҡ аҫтынан килеп сыҡҡан бөҙрә сәстәре - барыһы ла яҡын, ҡәҙерле ине Рәүефкә. Шул ваҡыт ҡапыл ул һөйгәнен ҡосаҡлап алды, ирендәрен һурып үпте. Әлфиәнең һис тә ҡаршы килмәүен һиҙгәс, ҡыйыуыраҡ тотондо ир заты. Төймәләрҙе ыҫҡындырҙы, йоморо аҡ күкрәктәре килеп сыҡҡас, ҡарһаланып, ҡабаланып йәбешмәне, наҙлы ғына итеп һурып-һурып үпте. Ирҙең ҡулдары аҫҡа табан төшә башлағас, Әлфиә ҡапыл:

- Туҡта, Рәүеф, туҡта, күҙҙәремә ҡара, - тине. Тыйып алғыһыҙ ир туҡтаны. Күҙҙәренә ҡараны. Ундағы сабыйҙарса бер ҡатлылыҡты күреп, Әлфиә иренен уның күҙҙәренә терәне.

- Кәрәк, тип уйлайһыңмы? Кәрәк, тип уйлайһыңмы? - тип бер нисә тапҡыр ҡабатланы. Рәүеф, кәрәк, ныҡ кәрәк, тип уны ярһып үберге тотондо. Үбеп, һөйөп туйғыһыҙ ине Әлфиә. Яҡын ине, еҫе лә, тәне лә, сәсе лә. Шуғамы икән, Рәүеф нисектер үҙен ышаныслы тойҙо. Ҡатын да һис ҡаршылашманы, киң күкрәктә балдай ирене, йәненә инерҙәй булып уға нығыраҡ һырлыҡты.

Аҡ ҡауryйҙарын сәсеп ожмах ҡоштары күккә күтәрелгәс, икеһе лә - Әлфиә лә, Рәүеф тә - арып-арманһыҙ булып салҡан төшөп ятты. Тәндәре хәлһеҙләнһә лә, йәндәре күктә йөҙә ине шикелле. Икеһе лә күккә төбәлеп оҙаҡ ҡына ятты. Күк йөҙө уларҙың тәне, күңеле кеүек яланғас, аяҙ. Бер болот әҫәре юҡ. Рәхәт. Ындай ләззәтте ғүмерҙә татымаған Рәүеф күккә ҡарап ҡалтыранып ҡуйҙы. Тормошонда ниндәйҙер һынылыш булғанын тойҙо. Ғүмер буйы хыялында йөрөткән ошо оят та, ымһындырғыс та, саф та, гонаһлы ла күренештең бөгөн тормошҡа ашыуына берсә шат та, берсә һағышлы ла ине.

- Ошо бейек күктә осҡоң киләме һинең? - беренсе Рәүеф телгә килде. Тауышы ҡалтыранып сыҡты.

- Былай ҙа күктең етенсе ҡатындамын, - тине ҡатын, үҙе йылмайҙы ла йылмайҙы. - Әйҙә, ҡәҙрәтең булһа, һин дә мине осоп ҡыуып ет! - ҡапыл торҙо ла, ҡулдарын йәйеп, ҡанат итеп елпеп, йәш үлән араһынан йүгерергә тотондо. - Бына ҡайҙа ул иркенлек!

Донъяла иң ҙур матурлыҡ - ыуыҙ үләндәр, теремек сәскәләр араһынан яланғас ҡатын-ҡыҙҙың йүгереү икән дә, тип уйланы ир кеше. Илаһи затҡа әйләндерә икән уны тирә-йүндең илаһилығы. Туҙған сәсе, һәр талпыныуҙа тегеләй ҙә, былай ҙа ҡояшҡа ялтырап уйнаған түштәре һәм ҡатын-ҡыҙға ғына хас наҙлы хәрәкәте, донъя яңғыратып, күктәрҙе сыңлатып көләүҙәре - барыһы ла мөғжизә ине. Түҙмәне Рәүеф, ҡалҡынды ла Әлфиә артынан сапты. Оялманы ла. Ситтән берәйһе, сәскәле болонда шыр-яланғас йүгереп йөрөүсе ҡатын менән ирҙе күреп, күктән Һауа менән Әҙәм ергә төшөп, Ер йылынын, Ҡояш наҙын тойоп кинәнә, тип аптырап торһа ла, һис кенә лә гонаһ булмаҫ ине. Рәүеф ҡыуып етте лә Әлфиәне биленән ҡосаҡлап күтәрҙе, бер-ике тапҡыр әйләнеп алды, тегеһе сыр-сыу килеп көлдө, шатлыҡ ауазлары сығарҙы. Шулай итеп үләнгә тағы тәгәрләп барып яттылар. Рәүеф ҡатындың сәстәрен һыйпап күҙҙәренә ҡараны:

- Ҡәҙерлем, матурым минең, бесәнлекте тапайбыҙ ҙаһа, - тине, үҙе туктамай йылмайҙы, үҙе ҡатынды нығыраҡ ҡосаҡланы. - Бәлһә, Фәнил әрләйәсә-әк.

- Ой, әрләйәсә-әк, ҡуркам, ҡуркам, - тип ҡатын нығыраҡ һыйынды ир ҡосағына.

**(Дауамы бар).**

ӘЙТӘГҮР!

# ӘҪӘРҘӘРЕБЕҘ ГЕРОЙҘАРЫ...

## Бабич, Вәлиди, Мырҙабулатов

**Башҡортостан автономияһы яулаусыларҙың һәр береһе тураһында табаҡ-табаҡ әҫәрҙәр, китаптар яҙырға булыр ине лә, тик был әле һаман теләк-ниәт кенә булып ҡала. Ә шулай ҙа ошо темаға тотонған фиҙаҡәр яҙыусыларыбыҙ, бармаҡ менән генә һынарлыҡ булһа ла, барҙар. Уларҙың өсәүһенә үҙҙәре һүрәтләгән геройҙары тураһында бер кәлимә һүҙ әйтеүҙәрен һорап мөрәжәғәт иттек.**







**Наил ҒӘЙЕТБАЙ, "Бабич" романы авторы:** Әҫәремдә Шәйехзада Бабичты йәш шағир итеп кенә түгел, ә көслө шәхес итеп күрһәтергә тырыштым. Сөнки ул ысынлап та иҫ киткес көслө лидер була. Былар минең уйлап ҡына сығарған йәки биҙәгән образым түгел. Архив документтары, замандаштарының, көрәштәштәренең иҫтәлектәре, яҙмалары, яҡындан белеүселәрҙең, уның менән аралашып ҡалғандарҙың һөйләгәндәре һәм башҡа материалдар ентекле өйрәнелеп, шулар нигеҙендә Бабич булмышы тыуҙырылды. Шәйехзада шағир ғына түгел, ә һүҙ аша әллә күпме массаны хәрәкәткә килтерә алған оратор, шауҡымлы әҙәм була. Уның артынан халыҡ эйәрә, уның әйткәнен күтәреп алалар, һүҙ әйтеүен һорайҙар, телмәренә ышаналар. Шундай харизмалы, арбаусы, әллә ниндәй хәлдәрҙә лә кәрәкле юҫыҡҡа бороп ебәрә алырҙай рухи көскә эйә була. Быларҙан тыш, ул нимәгә тотонһа ла булдыра. Бер ниндәй хореографик йәки музыкаль белеме булмайынса ла бейеүҙәр һала, сәхнә әҫәрҙәре ҡуя, музыкаль номерҙар яһай ала. Уның менән һоҡланып, эштәренә хайран ҡалып, Ғәзиз Әлмөхәмәтов та, Зәки Вәлиди ҙә көндәлектәрендә яҙып ҡалдыра. Ул ваҡытта егеттең даны хатта беҙ бөгөн лидер тип белгән шәхестәрҙең дә исемен ҡаплап китә. Ә нисек ҡыҙҙар ярата уны!

Бабич, Салауат кеүек шәхестәр улар халыҡҡа замандың айырым бер ауыр мәлендә шундай герой миссияһы менән биреләләр. Улар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә халыҡтың тулы һөйөүен яулап, шул халыҡ өсөн ҡорбан булаларҙыр ҙа... Әгәр Шәйехзада шулай иртә китеп бармаған булһа, ул бик ҙур лидерға әүерелер ине. Әммә уны йәшәтерҙәр ине микән? Шағирҙың үтә популяр, үтә аҡыллы һәм үтә халыҡ һөйөүендә булып китеүен хатта уның көрәштәштәре лә яратмай башлай ул саҡта. Шулай була бит ғәҙәттә, көслө шәхестәр янында көнләшеүселәр, һатлыҡтар барлыҡҡа килә.

Минә йыш ҡына "Бабичтың яҙмышы шулай фажиғәле тамамланмаһа, ул батыр булыр инеме икән?" тигән һорауҙы бирәләр. Яуап: ул батыр булған! Ул шул йәшенән гүмерендә уҡ батыр булып өлгөргән. Үлеме иһә кульминация ғына. Сөнки уның исеме һәм даны бөгөн дә йәшәй. Герой хаҡында бары беҙ белмәйбеҙ һәм өйрәнмәгәнбеҙ генә. Был беҙҙең ғәйеп.

**Ғәлим ХИСАМОВ, "Шаҡай бураны", "Шаҡай бураны-2" романдары авторы:** Был китаптар Башҡортостан автономияһының йөҙ йыллығына бағышланды, әммә уларҙа йөҙ йыллыҡ ҡына тарих түгел. Ә күпкә тәрәнерәк һәм киңерәк ваҡиғалар уларҙа. 1917 йылдың 23 февралендә Вәлиди йәшәгән йорттоң ҡаршыһында урынлашҡан Преображенский казармаларында атыштар башлана һәм был ҡубып киткән ихтилал башланғысын беҙҙең герой (хәтирәләре буйынса) тәҙрә аша ҡарап-күҙәтеп тора һәм "Ошо ваҡиғалар минең халҡыма ла ҡағылһын һәм уятһын ине", тип күңеле тулып уйлай. Мин әҫәремдә Әхмәтзәки Вәлидиҙе аҡларға, уның шәхесен данлап күрһәтергә теләмәйем, шулай уҡ был образды билдәле булғаны өсөн генә лә алманым. Уҡыусыға, бигерәк тә үҙ милләтебеҙ уҡыусыһына, уның ни тиклем бөйөк шәхес булғанын аңлатырға теләнем. Шаштырмайым, биҙәмәйем, уйлап тапмайым. Был кеше ысынлап та бик бөйөк әҙәм, бөйөк ғалим, бөйөк фекерҙәр эйәһе, бөйөк идеялар табыусы, бөйөк ойоштороусы булған. Шулай булғаны өсөн дә баҫылған, эҙәрлекләнгән һәм юк итеүгә дусар ителгән. Вәлидиҙең эшмәкәрлеген, ижадын, яҙмаларын, тормош юлын иҫем-аҡылым китеп өйрәндем. Мине әҙәм балаһының нисек итеп шул тиклем дә сифатлы йәшәйеш алып бара алыуы, шул ҡәҙәр егәрле, киң эрудициялы, аңлы була алыуы хайран итте һәм итә. Ул бит башҡорт тарихын ғына ентекле һәм тәрән белә түгел, төрки халыҡтар, уларҙың телен, Рәсәй тарихын, Рәсәйҙәге урыҫ булмаған милләттәр тарихын, донъя тарихын да төплө өйрәнгән. Тарихты кешелек барлыҡҡа килгәндән алып белгән. Һәм илдәге бөтөн ваҡиғаларҙы ла үҙе аша, үҙ милләте хоҡко аша үткәреп яҙған. Революция хәлваҡиғаларында, рус милләтенән булмаған халыҡтар хаҡында һүҙ ҙә булмаған заманда, төрки халыҡтарҙың азатлығы тураһында уй сығара. Ташкентта эшләгән сағында ла уның янынан үзбәк, ҡаҙаҡ кеүек төрки халыҡтар өҙөлмәй. Унда Вәлиди ҡулы менән төҙөлгән әллә күпме документтар һаҡлана. Ул шуларҙы төндәр буйы уйлап, фаразлап, яҙып ултырған. Йоҡлағанда 3-4 сәғәт йоҡлаған, күп осраҡта улай ҙа ял итмәгән, тиҙәр музей белгестәре. Башҡалар "милли ирек" тигәндә әле башына ла килтермәгәндә, ул был идеяны хәрәкәткә килтерә. Һәм ошо идеялары милләттәр атаһы иткән дә инде уҙен.

Бөгөн беҙ булған һәм ысынлап данлы булған шәхестәребеҙҙе кемдәрҙәр алдында аҡлап йәки кемдәргәләр нимәләрҙер иҫбатлап яҙаланабыҙ. Был дөрөҫ түгел. Дөрөҫө бына ошолай итеп уларҙың ысынбарлығын әлеге быуындарға күрһәтеү: беҙҙең тотош донъяға билдәле, бөтөн төрки халыҡтарының атаһы булған Әхмәтзәки Вәлиди тигән бөйөк шәхесебеҙ булған, бар һәм уның исеме тарихыбыҙҙа алтын хәрефтәр менән яҙылған.

**Йыһат СОЛТАНОВ, "Йәдкәр" романы авторы:** Башҡорт халҡының азатлыҡ һәм үҙаллылыҡ өсөн күп быуатлыҡ ҡораллы көрәшендә беренсе тапҡыр еңеүгә өлгәшелгән 1920 йылғы халыҡ баш күтәреүенең ҡаһарман етәксеһе Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов була. Ул мәҙрәсәлә белем алып, мөғәллим булып сыға һәм Башҡортостан, Ҡаҙағстан ауылдары мәктәптәрендә балалар уҡыта. 1914 йылғы герман һуғышына хәрби хеҙмәткә алынып, 1917 йылда фронтта большевиктар йоғонтоһонда сәйәси ҡарашы нығынған яугир һалдат комитетына ағза итеп һайлана һәм Петроградҡа партия ҡарамағына юлландырыла. Шул уҡ йылда, Сөләймән үҙе яҙыуынса, "урындарҙа Октябрь революцияһын әҙерләшеү өсөн тәғәйенләнгән иптәштәр исемлегендә" Коммунистар партияһы тарафынан тыуған яғына юлландырыла һәм 1918 йылда өйәҙ ҡалаһы Орскиҙа урыҫ коммунистар менән берлектә партия ойошмаһын төҙөшеп, уға партия ағзалығын №1 һанлы билет тапшырыла, өйәҙ башҡорт ауылдарында уны "№1 большевик" тип беләләр. Граждандар һуғышында ул, көньяҡ Башҡортостанда тәүге "ҡыҙыл гвардия отряды" ойоштороп, атаһының "яңғыҙ атын эйәрләп" сығып китә, тәрлә фронттарҙа Ҡыҙыл Армия сафында аҡтарға (шул иҫәптән Әхмәтзәки Вәлидовтың башҡорт халыҡ армияһына) ҡаршы һуғыша, сөнки ысын Башҡортостан азатлығын, үҙаллылығын большевиктарҙың совет хөкүмәте ҡулынан алыуға ышана. 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте Мәскәү менән Килешеү нигеҙендә ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Сөләймән Мырҙабулатовты Мәскәү, Әхмәтзәки Вәлидовтың теләген үтәп, "Башчека председателе вазифаһын башҡарыусы" итеп ҡуя, ошо эшендә ул ҡыҫҡа ваҡыт араһында Владислав Поленовты башҡорт халҡының, автономияның хас дошманы рәүешендә фашлап өлгөрә, ләкин Мәскәү үҙенең палачын яҡлай...

1920 йылдың май айында Ленин етәкселеге ике-ара Килешеүҙе тупаҫ боҙоп, Ә. Вәлидов менән Х. Йомағоловты Башҡортостандан һөргәс һәм Башҡортостан автономияһының яуыз палачы Ғәли Шәмиғоловты Башҡортостанға диктатор итеп ултыртҡас, ҡанҡойошло репрессиялар башлана, Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов етәкселегендә башҡорт халҡы яуыз режимға ҡаршы ҡоралды баш күтәрә һәм көрәш ялҡыны бөтә кантондарҙы ялмай, уны туктатырлыҡ көс ҡалмай. Һөҙөмтәлә совет хөкүмәте баш күтәреүселәр етәкселеге менән һөйләшеп килешергә мәжбүр була: Шәмиғолов режимы Мәскәүгә алынып, башҡорттарҙың күп талаптары ҡәнәғәтләнделәр. С.Ш. Мырҙабулатов һәм уның арҡадаштарының башҡорт халҡы исеменән ҡаршы яҡҡа ҡуйған ғәҙел талаптарының иң күп өлөшө Үҙәк хөкүмәт һәм Башҡортостан хөкүмәте тарафынан ҡабул ителеп, бойомға ашырыла. С.Ш. Мырҙабулатов ихтилалы партияның үҙе тарафынан уҡ "бандитизм" ләкәбенән арындырылып, башҡорт халҡының милли-азатлыҡ хәрәкәте, тип рәсми танила. Шул нигеҙҙә ихтилалда ҡатнашыусылар эҙәрлекләнергә лә, яуапҡа тарттырылырға ла тейеш булмай. Партия Өлкә комитеты ултырышы ҡарарында С.Ш. Мырҙабулатов яугирҙары, "революцион баш күтәреүселәр" тип, большевиктар телендәге иң юғары баһа менән билдәләнә һәм фронттағы данлы Башҡорт бригадаһын шулар иҫәбенә тулыландырыу кәрәклеге тураһында әйтелә (ЦГАОО Р.Б., ф. 22, оп. 5, д. 8, л. 27), ә уларҙың юғары етәкселәре С.Ш. Мырҙабулатов - республиканың Башвоенком ярҙамсыһы, М.Х. Сәғитов - сәркәтибе итеп Ҡыҙыл Армия сафына алына һәм элекке (ҡасып киткән) Башревком ағзаларына ла, кире ҡайтып, республикала эшкә урынлашырға, ә ихтилалсы коммунистарға, ҡәҙимге тәртиптә ғариза биреп булһа ла, партияға ҡабат инергә, совет һәм партия органдарында етәкселеккә күберәк башҡорт кадрҙарын үрләтергә юл асыла. Быға тиклем ситләтелгән башҡорттарҙың иң юғары вазифаларҙа партия Өлкә комитеты сәркәтиптәре булып (Биишев, Хоҙайбирҙин), БашЦИК рәйестәре (Мортазин, Ҡушаев) һәм Совнарком рәйестәре (Биишев, Халиҡов, Булашев) булып эшләүҙәрен шул ихтилал һөҙөмтәһе итеп күрәбеҙ. Ғөмүмән, милләтебеҙҙең артабанғы йәшәүе өсөн мотлаҡ булған, әлегәсә үткерлеген юғалтмаған иң мөһим милли мәсьәлә лә С.Ш. Мырҙабулатов ихтилалының һөҙөмтәһе булараҡ тап 1921 йылда уҡ хәл ителә башлай - XVI быуатта Рәсәйгә ҡушылғанылбыҙҙан һуңғы тарихыбыҙҙа беренсе тапҡыр юғары дәүләт органыбыҙ БашЦИК тарафынан: "БАССР территорияһында башҡорт телен урыҫ теле менән бер тиң дәүләт теле итеп танырға", - тигән ҡарар ҡабул ителә лә яҡындағы йылдарҙа уҡ тормошҡа ашырыла: бөтә дәүләт ҡуләмендә рәсми эш йөрөтөү, мәктәп, матбуғат, китап баҫмалары, театр һ.б. башҡорт телендә һөйләшә башлай. Был ихтилал ҡыҙыл Рәсәйҙең 1918 йылдан алып башҡорт халҡына күрәләтә геноцид (ҡырып бөтөрөү) сәйәсәте үткәреүен дә бер ни тиклем тотҡарлай, шовинистар уны иде һаҡ ҡына, аҫтыртын үткәрергә, итәк-салғыйҙарын йыйыбыраҡ йөрөргә мәжбүр була. Шәмиғолов диктатураһы аҫтында бына-бына Рәсәйҙең бер губернаһына әйләндерелергә торған Башҡортостан артабан да автономиялы республика булып йәшәү хоҡуғын ҡабат яулай, ошо хоҡуҡ бер ыңғайҙан Рәсәйҙең башҡа бөтә автономияларына ла тарала. Тимәк, урыҫ булмаған милләттәрҙең урыҫ дәүләте эсендәге дәүләтселек формалары С.Ш. Мырҙабулатов етәкселегендәге башҡорт ихтилалы арҡаһында һаҡлап алып ҡалына. Ҡаһарманыбыҙ 1930 йылдың декабрендә Сәнкем-Биктимер ауылында үҙе төҙөгән колхоздың рәйесе булараҡ эшләп йөрөгәнендә ҡулға алынып, 1931 йылдың февралендә Мәскәүҙең Бутырка төрмәһендәге яза камераһында әтотнә боҙло һыу ҡойоп туңдырып үлтерелә...

✓ *Асыҡлыҡ, намыҫлылыҡ, экстраверсия, йәғни, кешенең тышҡы донъяға асыҡ булыуы, башҡаларға юл биреү һәләтенең гениаллеккә бер ниндәй ҡатнашлығы юҡ, ә хис-тойғолар ташып тороу менән гениаллек бер-береһенә бәйле.*






## БӘШМӘК ТӘ АШ

■ Март - яҙҙың беренсе айы. Хатта йылы әле килеп өлгөрмәһә лә, кешенең организмы ла, психикаһы ла яҙҙы тоя башлай икән. Ҡыш, ғәҙәттә, калориялы итеп туҡланабыҙ, был организмға һыуыҡтарҙы еңелерәк кисерергә ярҙам итә. Ә яҙ башында рационды үҙгәртеү кәрәк. Авитаминоз, физик әүҙемлектең етешле булмауы, көн торошоноң даими үҙгәреп тороуы ла тәьҫир итә. Хәҙер антиоксиданттарға бай аҙыҡ ашарға кәрәк, улар зарарлы матдәләрҙе сығара. Иң билдәле антиоксидант - С витамины, ул организмды таҙарта ла, тимер үҙләштерелеүенә ярҙам итә. Яҙғы осорҙа тән "арый", ә тимер уны тонуста тотоrға булышлыҡ итә. Дарыуҳана препараттарынан тыш та организмды С витамины менән байытып була, мәҫәлән, гөлйемеш компоты, цитрус емештәре, петрушка, әнис, ҡара ҡарағат һәм кәбеҫтәнең барлыҡ төрҙәре. Балыҡта, иттә булған D витамины, Е витамины шулай уҡ хәлһеҙлектән арындыра. В төркөмө витаминдары нервы системаһына файҙалы, ул ит продукттарында, айырыуса бауырҙа, бөйөрҙә, икмәктә, еләктәрҙә, буткаларҙа күп. Әйткәндәй, түбән калориялы ризыҡтарҙы күп ҡулланыу ашҡаҙандың һуҙылыуына килтерә, һөҙөмтәлә, кеше тағы ла күберәк ашай башларға һәм һимерергә мөмкин.

■ Бәшмәкте ризыҡҡа иҫәпләмәһәк тә, ғалимдар өлкән кешеләргә ул файҙалы, тип белдерә. Бәшмәктә эрготионеин тигән берләшмә бар, ул антиоксидант һәм шешеүгә ҡаршы сифаттарға эйә, ти Сингапур милли университеты белгестәре. Һынауҙарҙа 600 өлкән йәштәге ҡытай кешеһе ҡатнашҡан. Аҙнаһына ике таҫкыр бәшмәк ашағандарҙың мейеһе ҡартлыҡ сирҙәренә бирешмәй икән. Ғалимдар шампиньон, шиитаке, шулай уҡ тоҙланған бәшмәктәр ашарға тәҡдим итә. Эрготионеиндан тыш, бәшмәктә нервы туҡымаларына файҙалы берләшмәләр бар.

■ Даһи кешеләр һәр ваҡыт хис-тойғоларын күрһәтеп бара, тип иҫәпләй белгестәр. Шәхесте характерлаусы 5 сифат араһында хәҙер ошо төшөнсә лә бар. Ҡалған сифаттар - асыҡлыҡ, намыҫлылыҡ, экстраверсия, йәғни, кешенең тышҡы донъяға асыҡ булыуы, башҡаларға юл биреү һәләтенең гениаллеккә бер ниндәй ҡатнашлығы юҡ, ә хис-тойғолар ташып тороу менән гениаллек бер-береһенә бәйле. Бындай кешеләрҙең тормошо еңелдән түгел, ти ғалимдар, улар көн һайын тотош хистәр ҡойоно: кәрәгенән артыҡ һөйөү, ҡурҡыу, өмөтһеҙлек, көнләшеү тойғолары кисерә. Уларҙың был ҡылыҡы кешенең бай хыялдары һәм баш мейеһен үҙенә буйһондора алмауы менән бәйле. Ғалимдар был "хәүефле кнопканы" тапҡан, ул ҡурҡыу һәм хәүеф реакцияларын ғына түгел, ә ижади дәрт өсөн дә яуап бирә.

■ Бер юлы бер нисә электрон ҡоролма менән файҙаланыу күҙҙәр көсөргәнешенә килтерә. Тикшеренеүҙәрҙә 10 меңдән ашыу өлкән кеше ҡатнашҡан. Уларҙың 70 проценты бер юлы бер нисә ҡорамал менән ҡулланыуын белдергән, 65 проценты был осраҡта физик дискомфорт кисереүен - күҙҙәр әсетеүен, күҙҙәрҙең насар күрә башлауын, баш ауыртыуын таныған. Етмәһә, экранды күҙҙәргә ныҡ яҡын тотоу сәбәпле, күҙ ҡабаҡтарын йомоп алыу һирәгәйә. Был тағы ла күреү һәләтенең түбәнәйеүенә килтерә. Цифрлы ҡорамалдар экрандары бүлеп сығарған зәңгәр төҫ тә насар йоғонто яһай. Был төҫ үҙенең сифаты менән ультрафиолет нурланышына яҡын.

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# БЕЛЕМЕҢДЕ ТИКШЕРӘЙЕК:

## Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына бағышланған һорауҙар

### 1. Башҡортостан автономияһына нигеҙ һалған шәхестәр

1. Әхмәтзәки Вәлиди 1917-1918 йылдарҙа Башҡортостан хөкүмәтендә ниндәй вазифа биләгән?
2. Башҡортостан автономияһының тәүге рәйесе кем булған?
3. Башҡорт милли хәрәкәтенең етәкселек органы - Башҡорт мәркәз шураһының рәйесе кем булған?
4. Шәйехзада Бабичтың үҙе иҫән саҡта баҫылған шиғырҙар йыйынтығы нисек атала?
5. 1919 йылдың 20 мартында совет власы менән Башҡортостан автономияһы тураһында килешеүгә Башҡорт хөкүмәте рәйесе исеменән кем ҡул ҡуйған?
6. Минзәлә башҡорттарынан (хәҙерге Татарстандың Аҡтаныш районы) сыҡҡан күренекле башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәренең исем-шәрифен әйтегеҙ.
7. Башҡорт хәрби шураһының рәйесе кем булған?
8. Һамар өлкәһе Хәсән ауылынан сыҡҡан күренекле милли хәрәкәт эшмәкәренең исемен әйтегеҙ.
9. Беренсе башҡорт гәзитен ойоштороусы күренекле милли хәрәкәт эшмәкәренең исем-шәрифен әйтегеҙ.
10. Сығышы менән Бүздәк районы Аҡтау ауылынан булған Башҡортостан хөкүмәтенең рәйесе кем?
11. 3-сө Башҡорт полкының командиры, Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше, ғалим-этнограф кем булған?
12. Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын дуҫы, 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры, ҡаһарман сардар кем?
13. Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының командиры, "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында" исемле китап авторы кем?
14. 1919 йылдың мартында Бабич менән бергә һәләк булған шағир, публицистың исем-шәрифе?
15. Башҡорт корпусының командующийы, генерал-лейтенант кем?
16. Билдәле милли хәрәкәт эшмәкәре, Ризаитдин Фәхретдиновтың өлкән улы кем?
17. Силәбе башҡорттарынан сыҡҡан күренекле милли хәрәкәт эшмәкәре, телсе, Арғаяш кантоны етәксеһе, Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссарының исем-шәрифе?
18. Баймаҡ районының Әбделкәрим ауылынан сыҡҡан күренекле милли хәрәкәт эшмәкәре, шағир, драматург, телсе, фольклорсы кем?
19. Башҡортостан хәрби комиссары, Әхмәтзәки Вәлидиҙең урынбаҫары, яҡташы, яҡын көрәштәше, ҡаһарман офицеры кем?
20. Әхмәтзәки Вәлиди һәм Сәғит Мерәҫовтар менән бергә милли хәрәкәтте башлап ебәреүсенең исем-шәрифе?

### 2. Башҡортостан Республикаһының ойоштороло\у тарихына бәйле ваҡиғалар

1. Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштең етәкселек органы ҡасан һәм ҡайҙа ойоштороla?
2. 1-се Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы ҡасан уҙғарыла?
3. 2-се Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы ҡасан уҙғарыла?
4. Башҡорт мәркәз шураһының 1-се фарманы ҡасан донъя күрә һәм был фарманды сығыуы ниндәй ваҡиға менән бәйле була?
5. Башҡорт мәркәз шураһының 2-се һанлы фарманы ҡасан сыға һәм ул фарманда нимә тураһында бәйән ителә?
6. Башҡортостан автономияһы ҡасан иғлан ителә?
7. 3-сө Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы ҡасан уҙғарыла?
8. Тәүге Башҡортостан хөкүмәте нисәнсе башҡорт ҡоролтайында ойошторола?
9. Шәйехзада Бабичтың "Оло шатлыҡ" исемле шиғыры ниндәй тарихи ваҡиға айҡанлы яҙылған?
10. Шәйехзада Бабич 3-сө Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы делегаттары алдында үҙенең ниндәй шиғырын уҡыған?
11. 1918 йылдың февралендә Башҡортостан хөкүмәте кемдәр тарафынан һәм ни өсөн ҡулға алынған?
12. 1918 йылдың мартында булып үткән "Баймаҡ фажиғәһе" тип ниндәй ваҡиғаны атайҙар?
13. 1918 йылдың июнендә Башҡортостан хөкүмәте Силәбе ҡалаһында үҙенең эшен яңынан башлағас, тәү башта уҡ ниндәй эшкә тотона?
14. Башҡортостан автономияһы ниндәй административ берәмектәргә бүленә?
15. Башҡортостан автономияһы 1918 йылда нисә кантонға бүленә?
16. Туҡ һәм Соран йылғалары буйында йәшәгән Ырымбур башҡорттары Башҡортостан автономияһының ниндәй кантонын тәшкил итә?
17. Ҡурған башҡорттары Башҡортостан автономияһының ниндәй кантонын тәшкил итә?
18. Силәбе башҡорттары Башҡортостан автономияһының ниндәй кантонын тәшкил итә?
19. Башҡортостан хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре ни өсөн совет власы яғына сыға?
20. Совет власы менән Башҡортостан хөкүмәте араһындағы автономия тураһында килешеү ҡайҙа һәм ҡасан төҙөлгән?

### 3. Башҡортостан дәүләтселегенә тарихы менән бәйле урындар

1. "Башҡортостан дәүләтселегенең бишеге" тип ҡайһы ҡаланы атайҙар һәм ни өсөн?
2. Ни өсөн Ырымбур ҡалаһы башҡорт милли хәрәкәтенең үҙәге итеп һайлана?
3. 1-се Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы ҡайҙа уҙғарыла?
4. 2-се Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы ҡайһы ҡалала уҙғарыла һәм ни өсөн?
5. 3-сө Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы ҡайһы ҡалала уҙғарыла?
6. 1-се һәм 3-сө Бөтөн Башҡорт ҡоролтайҙары ниндәй тарихи бинала уҙғарыла?
7. Өфө ҡалаһы нисәнсе йылдан Башҡортостандың баш ҡалаһы?
8. 1919-1922 йылдарҙа Башҡортостан автономияһының баш ҡалаһы ниндәй ҡалала урынлашҡан була?
9. Башҡортостан хөкүмәтенең тәүге резиденцияһы ҡайҙа була?
10. Башҡортостан хөкүмәтенең Өфө ҡалаһындағы тәүге бинаһы ҡайһы урамда урынлашҡан, ниндәй йорт?
11. Автономиялы Башҡортостандың тәүге картаһын кем эшләгән?
12. Башҡортостан хөкүмәте 1919 йылдың яҙы-йәйендә ҡайһы ҡалала эвакуацияла була?
13. Башҡортостан хөкүмәте советтар яғына сыҡҡан мәлдә ҡайһы ауылда урынлашҡан?
14. 1918 йылдың йәйендә Башҡортостан хөкүмәте ҡайһы ҡалала яңынан үҙенең эшмәкәрлеген башлай?
15. Арҙаҡлы башҡорт шағиры, милли хәрәкәт эшмәкәре Шәйехзада Бабич ҡайһы ауылда һәләк була?
16. Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуған ауылы?
17. Легендар комбриг Муса Мортазиндың тыуған ауылы нисек атала?
18. Шәйехзада Бабичтың тыуған ауылы?
19. Юрматы ерҙәре Башҡортостан автономияһының ниндәй кантонын тәшкил иткән?
20. Хәҙерге Баймаҡ районы территорияһы 1917 йылда Башҡортостан автономияһының ниндәй кантонына ҡараған?

### 4. Башҡорт ғәскәре тарихынан

1. Милли хәрәкәт эшмәкәре, Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше Ғәлимйән Таған башҡорт милли ғәскәрендә нисәнсе полк менән етәкселек иткән?
2. 1918 йылда башҡорт милли ғәскәре нисә полктан торған?
3. Муса Мортазиндың һуңғы хәрби званиеһы нисек аталған?
4. Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына ҡасан сыҡҡан?
5. Ҡаһарман сардар Әмир Ҡарамышев башҡорт милли ғәскәрендә нисәнсе полк менән командалыҡ иткән?
6. 1919 йылдың көҙөндә башҡорт ғәскәрҙәре "революция бишеге", тип аталған ниндәй ҡаланы һаҡлауҙа ҡатнашҡан?
7. 1919 йылдың көҙөндә Петроград, хәҙерге Санкт-Петербург ҡалаһында нисә мең башҡорт ғәскәре туплана?
8. Ни өсөн башҡорт ғәскәрҙәре 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сығырға була?
9. Муса Мортазиндың китабы нисек атала?
10. Советтар яғына сыҡҡанда Әхмәтзәки Вәлиди ниндәй вазифа биләй?
11. Муса Мортазиндың нисә ордены бар?
12. Муса Мортазин ниндәй һуғышта батырлыҡ күрһәткәне өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән бүләкләнгән?
13. Баймаҡ районы Ҡолсора ауылынан Муса Мортазиндың яуҙашы Шәмсетдин Ғафаров нисә Ҡыҙыл байраҡ ордены менән бүләкләнгән?
14. Муса Мортазин етәкселек иткән ғәскәри берәмек нисек аталған?
15. 1918 йылдың йәйендә Екатеринбург ҡалаһын азат итеүҙә ҡатнашҡан 2-се Башҡорт йәйәүлеләр полкына ҡала халҡы рәхмәт йөҙөнән нимә бүләк иткән?
16. Башҡорт хәрби шураһы (Башҡорт ғәскәре штабы) етәксеһе кем булған?
17. 1918 йылда башҡорт ғәскәрҙәрендә дини һәм сәйәси эштәрҙе кемдәр атҡарған?
18. Ни өсөн совет власы Башҡортостан автономияһын танырға һәм уның хөкүмәте менән килешеү төҙөргә ҡарар итә?
19. Шәйехзада Бабичтың башҡорт ғәскәрҙәренә бағышлап яҙған шиғырҙарын атағыҙ.
20. Шәйехзада Бабичтың ҡаһарман сардар Әмир Ҡарамышевты ерләгән саҡта һөйләгән шиғыры нисек атала?

**(Дауамы 15-се биттә).**

*✓ Башҡорт йәмәғәт ойошмалары был көндәрҙә лә берҙәм күтәрелде. Ғөмүмән, уларҙың ғәҙел талаптары артабан республика етәкселегенә Үҙәк менән маҡсатҡа ярашлы сәйәсәт алып барырға ярҙам иткәндер.*

*ЖУРНАЛИСТ ЯҘМАЛАРЫ*

# ТӘҮГЕ ҠАРЛУҒАСТАР,

## йәки 60 йыл элек Башҡортостан телевидениеһы ойошторолғаны тураһында

### Бар ине заманалар...

Уҙған быуаттың 80-се йылдар аҙағы - 90-сы йылдар башы телевидение хеҙмәткәрҙәренең генә түгел, барлыҡ ил, республика халҡының хәтеренә ныҡ инеп ҡалды. Мин ошо осорға ентекләберәк туҡталып, телевидение менән бәйле ҡайһы бер ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрөп, үҙемдең уй-фекерҙәремде уҡыусыға еткермәксемен. Ул ваҡыттағы сәйәси ваҡиғалар эсендә ҡайнаған, йәмғиәттәге ифрат оло үҙгәрештәрҙе күреү генә түгел, уларҙы телевидение аша яҡтыртыуҙа ҡатнашҡан кешеләрҙең береһе булараҡ, быға баҙнат итәм, уларҙың ҡайһыларын үҙемдең күҙлектән һәм тормош тәжрибәмдән сығып баһаларға хаҡлымындыр, тип уйлайым.

Был ваҡыт арауығын, минеңсә, уҙған быуаттың 17-20-се йылдары менән сағыштырырға мөмкин: йәмғиәтебеҙҙең уяныуы, шундай уҡ рухи күтәрелеш, милли хәрәкәттең ныҡ әүҙемләшеүе. Әлбиттә, был үҙгәрештәр матбуғаттың, радио, телевидениеның ҡатнашлығынан тыш мөмкин булмаҫ ине. Башҡортостан телевидениеһында ла ул осорҙа яңы темалар күтәрелде, үҙенсәлекле ҡыйыу материалдар, төрлө жанрҙағы тапшырыу шәлкемдәре барлыҡҡа килде. "Актуаль камера", "Асыҡ хат сәғәте", "100 һорау", "Шаңдау" кеүек программаларҙа киҫкен проблемалар күтәрелде, хаҡлыҡҡа, дөрөҫлөккә сарсаған кешеләр экран аша үҙ фекерен әйтә алды, заман талаптарынан сығып әҙерләнгән тапшырыуҙарҙа республикалағы ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар, иҡтисад мәсьәләләре, мәҙәниәт, мәғрифәт торошо иҫке ҡалыптарҙан ҡотолоп, яңыса яҡтыртылды. Милли ҡиммәттәребеҙҙе барлауға, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе тергеҙеүгә, рухи аңды уятыуға йүнәлтелгән очерктар, "түңәрәк өҫтәлдәр", ток-шоуҙар әҙерләп эфирға сығара башланыҡ.

Матбуғат йәмғиәттең көҙгөһө тиҙәр, шулай булғас, Башҡортостан телевидениеһы, уның хеҙмәткәрҙәре республикабыҙҙа барған хәл-ваҡиғаларҙан ситтә ҡала алманы, үҙенең тос һәм фәһемле һүҙен әйтте. Ошо осорҙағы бер нисә генә миҫалға туҡталып китәм. Уҙған быуаттың 90-сы йылдары башында республиканың Юғары Советына (хәҙерге Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға), Өфө ҡала Советына "демократия" тигән төшөнсәне үҙ мәнфәғәттәренә файҙаланған, ауырлыҡтарҙы тәнҡитләп, үҙ ағын ҡайғыртҡан, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау кеүек өлкәләрҙәге проблемаларҙы ҡуйыртып, башҡаларҙы эшһеҙлектә ғәйепләргә ратҡан популист-депутаттар ҙа һайланды. Улар республика етәкселеге, тәү сиратта М. Ғ. Рәхимов алып барған сәйәсәткә ҡаршы сығып маташты. Хатта сессияларҙың береһендә "Президент башҡорт телен белмәһә лә ярай" тигән ҡарар ҡабул ителде. Уларға ҡаршы торорлоҡ көстәр табылды. Атап әйткәндә, айыҡ фекерле депутаттар, ғалимдар, яҙыусылар телевидение аша сығыш яһаны, "түңәрәк ҡор"ҙар ойошторолдо. Әлбиттә, йәмәғәтселек, башҡорт милли ойошмалары ла үҙҙәренең һүҙен әйтте, һуңғараҡ был формулировка алып ташланды. Был йәһәттән айырыуса Н. Асанбаев, А. Абдуллин, А. Филиппов кеүек абруйлы яҙыусыларыбыҙҙың, Ф. Фәйзуллин, М. Ҡолшәрипов, В. Резбаев кеүек ғалимдарыбыҙҙың, башҡа бик күптәрҙең ялҡынлы һүҙе, аҡыллы фекере халыҡҡа дөрөҫлөктө еткереүҙә ифрат ҙур роль уйнаны.

Алда әйтелгән бер төркөм депутаттар "БАССР-ҙа Президент кәрәкмәй, уны һайлау мотлаҡ түгел", тигән фекерҙе лә үткәрергә маташты. Ошоно белеп ҡалған бер төркөм студенттар, башлыса Башҡорт йәштәр иттифағы ағзалары 1991 йылдың 13 ноябрендә Телеүҙәкте баҫып алды һәм республикалағы хәл-ваҡиғаларға үҙ ҡарашын белдереү өсөн тура эфир талап итте. Иҫ китмәле, быға саҡлы күренмәгән хәл бит! Нишләргә? Депутаттар, университет етәкселәре килеп етте. "Баҫҡынсылар" менән һөйләшеүҙәр башланды. Тәүҙә уларҙың үтенесен ҡәнәғәтләндерергә булғайныҡ, һуңғараҡ өҫтән "эфирға сығармаҫҡа" тигән күрһәтмә килде. Хәл ҡырҡыулашты. Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре килеп тулды. Йәштәр үҙ талаптарынан баш тартманы, ныҡыша бирҙе. Шулай ҙа, ул ваҡытта киң таралған һүҙ менән әйтһәк, "консенсус" табылды, "фетнәселәрҙең" талаптары видеотаҫмаға яҙып алынып, эфирға бирелде, йәштәр таралышты. Дөйөм тыныслыҡ һөҙөмтә бирҙе, һуңғараҡ республика Президентлы булды.

Был ваҡиға республикала ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә киң яңғыраш алды, федераль гәзиттәр, Үҙәк телевидение йәштәрҙең сығышын экстремизм күренеше, властарға ҡаршы эшмәкәрлек тип баһаларға тырышты. Әммә телевидениела, радиола эшләүселәрҙең күбеһе йәштәр яғында булды. Шулай ҙа бер журналист-депутат (ул хәҙер мәрхүм инде, исемен әйтеп тормайым) үҙенең икенсерәк фекерҙә икәнен белдерҙе. "Йәшлек" гәзитендә ошо айҡанлы уға ҡаршы яҙылған материал - Башҡортостан телевидениеһы журналистарының асыҡ хаты баҫылды. Бына шундай мөхит хөкөм һөрә ине журналистар араһында ул заманда, һәр кем үҙ һүҙен әйтә алды, үҙ фекерен белдереүҙән ҡурҡманы. Әлеге заман журналистарына ошо сифаттар етешмәй кеүек, минеңсә.

Республикала ҙур резонанс алған, телевидениеның да ҡатнашлығы булған тағы бер ваҡиға тураһында яҙып үтмәксемен. 1992 йылдың 10 апрелендә бер төркөм башҡорт егеттәре аслыҡ иғлан итте һәм Салауат Юлаев майҙанында тирмә ҡороп, шунда ятты. Уларҙың төп талабы Рәсәй Федерацияһы менән Башҡортостан Республикаһы араһында ҡул ҡуйылған Федератив договорҙың Ҡушымтаһындағы ҡайһы бер пункттарҙы киренән ҡарау ине. 16-һы көндө 400-500-ләп кеше Юғары Совет бинаһы янында митинг үткәрҙе, халыҡҡа мөрәжәғәт ҡабул итте, һуңынан халыҡ Салауат Юлаев һәйкәле янына йүнәлде, Телеүҙәк эргәһендә лә кешеләр күп ине. Йәштәр хәрәкәте етәкселәре телевидениенан сығыш яһарға теләнеләр. Эске эштәр министры урынбаҫары килеп етте. Өҫтәге етәкселәрҙең ҡарарына ярашлы, йәштәрҙең мөрәжәғәтен һәм митингта ҡабул ителгән резолюцияны радио аша бирҙеләр. Кис телевидениенан ошо ваҡиғалар хаҡында материал тапшырҙыҡ. Артабан хәлдәр шулай дауам итте, аслыҡты туҡтатманылар, 22 апрелдә улар менән М. Ғ. Рәхимов һөйләште, тирмәлә Юғары Совет ағзалары, Министрҙар Советы вәкилдәре булып китте.

Башҡорт йәмәғәт ойошмалары был көндәрҙә лә берҙәм күтәрелде, дөйөм мәнфәғәт өсөн көрәшкән сәйәси көс булып сығыш яһаны. Ғөмүмән, митингыларҙа ҡатнашыусыларҙың, аслыҡ иғлан иткән йәштәрҙең ғәҙел талаптары артабан республика етәкселегенә Үҙәк менән маҡсатҡа ярашлы сәйәсәт алып барырға ярҙам иткәндер. Телевидение хеҙмәткәрҙәре ошо ваҡиғаларҙың шаһиты булыу ғына түгел, уларҙы объектив күҙлектән сығып, дөрөҫ итеп яҡтыртыусы ла, милләт өсөн, уның яҙмышы, булмышы өсөн ысын янып йөрөүселәр ҙә итеп күрһәтте. Телевидение беҙҙең көндәрҙә лә, элегерәк тә үҙен иң оператив, ғәйәт ҙур ойоштороу көсөнә эйә булған матбуғат сараһы итеп күрһәтте.

Телевидение - тере организм. Ул бер урында тапанырға тейеш түгел, хеҙмәтте заманса ойоштороу, ҡорамал-техниканы яңыртып тороу, тапшырыуҙарҙың яңы формаларын ҡулланыу, ижадсыларҙың оҫталығын камиллаштырыу кеүек сараларҙы даими тормошҡа ашырғанда ғына ниндәйҙер ыңғай һөҙөмтәләргә ирешергә, телевизор ҡараусының көндән-көн үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндерергә мөмкиндер.

Советтар Союзы тарҡатылып, башҡа ижтимағи-сәйәси мөхит барлыҡҡа килгәс, быға саҡлы ғәҙәти булған күп нәмәләр юҡҡа сыҡты, йә яңылары менән алыштырылды. Быға саҡлы йәшәп килгән Радио һәм телевидение буйынса БАССР-ҙың Дәүләт комитеты ла бөтөрөлдө, "Башҡортостан дәүләт телерадиокомпанияһы" барлыҡҡа килде. Быға саҡлы үҙаллы йәшәп килгән Телеүҙәк радио һәм телевидение менән берләштерелде. Был бик ваҡытлы һәм мөһим аҙым ине, радио, телевидение кеүек көслө мәғлүмәт сараларын, уларҙы хеҙмәтләндереүсе техниканы һәм ҡорамалдарҙы бер йоҙроҡҡа туплауҙы заман үҙе талап итте. Ошо сара радио һәм телевидениены республика, бөтә халыҡ мәнфәғәттәренә эшләтеү, милли тапшырыуҙарҙы арттырыу, халҡыбыҙ зарығып көткән программаларҙы ойоштороу өсөн этәргес булды.

Телевидениеның эске структураһын да үҙгәрттек, редакциялар урынына тәғәйен йүнәлештә эшләүсе ижад берекмәләре ойошторолдо, уларға журналистарҙан тыш, режиссерҙар, уларҙың ярҙамсылары, тауыш режиссерҙары һ.б. хеҙмәткәрҙәр инде. Был саралар ижади эштең сифатын күтәрергә, тапшырыуҙарҙың биҙәлешен яҡшыртырға, тематикаһын байытырға мөмкинлек бирҙе. Һөҙөмтәлә, "Сәсән", "Хазина", "Шәжәрә", "Тай-тулаҡ", "Уҙаман", "Алыҫ араларҙы яҡынайтып" кеүек милли рухты уятырлыҡ, халыҡтың мәҙәниәтен, тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен пропагандалаусы шәлкемдәр һәм рубрикалар барлыҡҡа килде, заманса әйткәндә, яңы проекттар тормошҡа ашырылды, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн "Тамыр" телерадиостудияһы ойошторолдо. Башҡортостан телевидениеһының үҫешендә яңы осор башланды.

**Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,**
**матбуғат ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

**(Аҙағы. Башы 11-се һанда).**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### Сирҙәрҙе күҙҙәр буйынса билдәләү

Боронғо дауалаусылар күҙҙәргә ҡарап кешенең нимә менән ауырығанын әйтеп биргән. Юҡҡа ғына, "күҙҙәр - күңел көҙгөһө", тимәйҙәр. Ләкин улар күңелдең генә түгел, тотош организмдың көҙгөһө. Күҙҙәргә ҡарап беҙ организмдың ҡан-тамырҙары системаһының торошон баһалай алабыҙ, сөнки күҙ мөгөҙсәһе аша күҙ төбөнә ҡарарға һәм тамырҙарҙың торошон белергә мөмкин. Шулай итеп, мәҫәлән, атеросклеротик үҙгәрештәрҙе асыҡларға була. Кеше гипертония менән интеккәндә лә сирҙе асыҡларға һәм уның дәрәжәһен билдәләргә мөмкин. Хатта йөрәктең ишемик ауырыуы диагнозын да ҡуйырға була. Тамырҙар системаһының был өлөшө беҙгә күренеп торғанлыҡтан, уның буйынса тотош организмдың торошо тураһында, шул иҫәптән баш мейеһенең, йөрәктең, башҡа тамырҙарҙың һәм ағзаларҙың торошон белеүе ауыр түгел.

Күреү һәләте, мәҫәлән, гепатит менән сирләгәндән һуң түбәнәйеүе ихтимал. Кеше В гепатиты менән ауырыны икән ти, шунан һуң ҡапыл уның күреүе насарая. Ғәмәлдә бит, В гепатиты - бауыр сире, ул нисек күҙҙә сағылыш табырға мөмкин? Ҡайһы берҙә ялҡынһыныу селтәрле шекәрәне (сетчатка), яҫмыҡтың (хрусталик) , күҙҙең ағының төҫөн үҙгәртә.

**Ҡартлыҡ күрәшлегенә нисек юл ҡуймаҫҡа?** Беҙҙең көндәрҙә күреү һәләте, ғәҙәттә, насарлана, шуға күрә урта йәштә күҙлек кейеүҙе тәбиғи тип ҡабул итәбеҙ. Артабан инде ҡартлыҡ ҡара ҡылауын (катаракта), ҡараһыуҙы (глаукома) һәм башҡа ҡатмарлыраҡ сирҙәрҙе көтөргә мөмкин. Ваҡытынан алда күреү һәләте насарайыуы, күҙ ауыртыуы хирургик операцияға килтереүе ихтимал. Шуға ҡарамаҫтан, 90-100 йәшкә етеп тә яҡшы күргән кешеләр бик күп. "Цивилизация түгел, ә күҙҙәребеҙҙе дөрөҫ файҙланмауыбыҙ уларҙы боҙоуға килтерә, - тип раҫлай профессор Панков. Һәм бер нисә мифты юҡҡа сығара".

**Күҙҙәрҙе нимә боҙа?** Яҡшы күрергә тырышыу һәм ошо һөҙөмтә артынан ҡыуыу. Быны беҙгә бала саҡтан һеңдерәләр, йәнәһе лә, ни тиклем нығыраҡ тырышһаҡ, шул тиклем ҙурыраҡ уңышҡа өлгәшәсәкбеҙ. Бер алыҫлыҡта күреү икенсе арауыҡта күреүҙән айырылырға тейеш түгел. Беҙгә бары тик күҙҙәрҙе тыныс һәм хәрәкәтсән итеп ҡалдырыу кәрәк. Күҙлекһеҙ уҡый алмағандар тәнен, нервыларын һәм күҙҙәрен көсөргәнештән арындырып, һуңынан күҙҙең дүрт тура мускулын, улар күҙ алмаһының уҡыу ваҡытында үҙ күсәре тирәһендә оҙонса килеш тотоп тора алырлыҡ итеп, көсһөҙләндереп өйрәнергә кәрәк.

**Быны нисек эшләргә?** Тәү сиратта, күҙҙәрегеҙҙе яңы һынауға әҙерләгеҙ - соляризация һәм пальминг (махсус күнегеүҙәр) эшләгеҙ: яҡшы яҡтылыҡ сығанағында, иң яҡшыһы - ҡояш нурҙары ҡулбаш аша төшөп торған урынға ултырығыҙ. Бер күҙегеҙҙе ҡаплағыҙ йәки яулыҡ менән бәйләгеҙ, әммә күҙегеҙ асыҡ булһын. Икенсе ҡулығыҙҙы йөҙөгөҙ алдында танау биле кимәлендә битегеҙҙән 30 сантиметр алыҫлыҡта тотоғоҙ. Шунан еңелсә генә елпеп, ҡапланмаған күҙегеҙгә яҡынайтығыҙ һәм алыҫлаштырығыҙ, был ваҡытта асыҡ усығыҙ бәйле күҙегеҙ турыһында булһын. Усығыҙҙы яҡынайтығыҙ һәм алыҫлаштырығыҙ, шул уҡ ваҡытта күҙегеҙгә ял итеү мөмкинлеге бирегеҙ.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 25 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 25 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 "Наедине со всеми". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "А у нас во дворе". Новые серии. [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Познер". [16+]
1.30 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.25 "Мужское / Женское". [16+]
4.10 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ
**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Наука 102. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 В круге борцовского ковра. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Т/с "Тут". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.45 Спектакль "Моя семья". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 26 МАРТА ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 26 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "А у нас во дворе". Новые серии. [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.10 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.15 "Мужское / Женское". [16+]
4.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ
**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 С мотором... [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Күстәнәс. [12+]**
**23.45 Современник. [12+]**
**0.00 Т/с "Тут". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**5.15 "Весело живем". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 27 МАРТА СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 27 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "А у нас во дворе". Новые серии. [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.10 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.15 "Мужское / Женское". [16+]
4.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ
**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 "Бай". [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Т/с "Тут". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Х/ф "Сумерки". [12+]**
**5.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 28 МАРТА ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.25 "Сегодня 28 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "А у нас во дворе". Новые серии. [16+]
23.30 "Большая игра". [12+]
0.30 "Вечерний Ургант". [16+]
1.10 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.15 "Мужское / Женское". [16+]
4.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ
**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 С мотором... [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Бала-саға. [6+]**
**0.00 Х/ф "Кон-Тики. Через океан в поисках истины". [6+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Похищение стариков". [12+]**
**5.15 "Весело живем". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 29 МАРТА ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 29 марта. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 "Вечерний Ургант". [16+]
0.15 Д/ф "Стинг". [16+]
1.25 Х/ф "Вторая жизнь Уве". [16+]
3.35 "Модный приговор". [6+]
4.25 "Мужское / Женское". [16+]
5.10 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
23.20 Х/ф "Мой любимый гений". [12+]
3.10 Т/с "Морозова". [12+]

### БСТ
**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Расцвет великих империй". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 "Весело живем". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Медицинская правда". [12+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета Башкортостан". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Республика Live. [12+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Франциск". [16+]**
**2.30 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]**
**4.00 Х/ф "Франциск". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 30 МАРТА СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Новости.
6.10 Т/с "Штрафник". [16+]
8.10 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Татьяна Буланова. "Не плачь!" [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Идеальный ремонт". [6+]
13.10 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
14.40 Премьера. Праздничный концерт к Дню войск национальной гвардии Российской Федерации. [12+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.30 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Премьера. "Легенды "Ретро FM". [12+]
1.00 Х/ф "Хуже, чем ложь". [16+]
3.00 "Модный приговор". [6+]
3.50 "Мужское / Женское". [16+]
4.30 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России. Суббота".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Блестящей жизни лепесток". [12+]
13.40 Х/ф "Одиночество". [12+]
17.30 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
22.55 Х/ф "Мать за сына". [12+]
3.05 "Выход в люди". [12+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Чичиленд". [0+]**
**8.45 "Большой чемодан. [6+]**
**9.30 Моя вершина. [12+]**
**9.45 С мотором... [12+]**
**10.00 "Преград.net". [6+]**
**10.15 Виртуозы Уфы. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 Сыйырсыҡ. [0+]**
**11.00 "Ал да гөл. [6+]**
**11.15 "Как "Уфанет" создает "Весенний бал". [12+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**19.15 Полезные новости. [12+]**
**19.30 Бал маленьких принцесс. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Песня года". [12+]**
**23.45 "Весело живем". [12+]**
**0.00 Х/ф "Ярослав. Тысячу лет назад". [16+]**
**1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.30 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**
**4.45 Х/ф "Ярослав. Тысячу лет назад". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 31 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.25 Т/с "Штрафник". [16+]
6.00 Новости.
6.10 Т/с "Штрафник". [16+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Премьера. "Жизнь других". [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Премьера. "Главная роль". [12+]
14.00 Премьера. "Русский керлинг". [12+]
15.00 "Три аккорда". [16+]
16.55 Премьера. "Ледниковый период. Дети". Новый сезон. [0+]
19.25 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
0.45 Х/ф "Банда". [16+]
2.40 "Модный приговор". [6+]
3.30 "Мужское / Женское". [16+]
4.15 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
4.30 Т/с "Сваты". [12+]
6.35 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
13.40 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
15.15 Х/ф "Я подарю тебе рассвет". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.05 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Күстәнәс. [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Перекличка". [6+]**
**10.30 КВН. Юниор-Лига. [12+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Концерт народного артиста РБ Ражапа Вадутова. [12+]**
**17.30 Д/ф "Притяжение земли". [12+]**
**18.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.45 Полезные новости. [12+]**
**19.00 Лидеры региона. [12+]**
**19.30 Әлләсе... [6+]**
**20.15 "Теге өсәү!" [12+]**
**20.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.15 Х/ф "Андерсен. Жизнь без любви". [16+]**
**2.30 Спектакль "Банкрот, или Свои люди - сочтемся". [12+]**
**4.30 Историческая среда. [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АВТОНОМИЯЛЫ БАШҠОРТОСТАН ГӘЗИТТӘРЕ ҺӘМ ДӘҮЛӘТ ЭШМӘКӘРҘӘРЕ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**11-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Табын. Таналыҡ. Навка. Грек. Дыуан. Үҫәргән. Иманғол. Көҙәй. Етенсе. Рәсми. Тау. Ғүмәр. Рәми. Йорт. Шабад. Текмә. Лапы. Нахаҡ. Ҡошсо. Абыстай. Шәрҡиәт.

**Вертикаль буйынса:** Юрматы. Градусник. Ғәлимйән. Танк. Арғаяш. Үлем. Төнөн. Тотҡа. Ҡыпсаҡ. Верхнеурал. Аҫаба. Нуҡта. Йот. ДНК. Ғишыҡ. Өрөү. Әсмә. Най. Радио.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БЕЛЕМЕҢДЕ ТИКШЕРӘЙЕК:

## Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына бағышланған һорауҙар

### 5. Милли дәүләтселек, мәҙәниәт һәм матбуғат тарихынан


Пролетарии всех стран, соединяйтесь
СОГЛАШЕНИЕ
Российского Рабоче-Крестьянского Правительства с Башкирским Правительством о Советской Автономии Башкирии,
опубликованное в Известиях Всероссийского Центрального Исполнительного Комитета Советов от 23 марта 1919 года за № 63/615.

1. Беренсе башҡорт гәзите нисек аталған?
2. Беренсе башҡорт гәзите "Башҡорт иттифаҡи бюроһының мөхбире" ҡасан донъя күргән?
3. "Башҡорт иттифаҡи бюроһының мөхбире", "Башҡорт" гәзиттәренә нигеҙ һалыусы һәм уның тәүге мөхәррире булған шәхестең исемен әйтегеҙ.
4. "Башҡорт" гәзите ҡасан баҫыла башлаған?
5. 1918 йылда Башҡортостан хөкүмәтенең рәсми матбуғат органы нисек аталған?
6. 1919 йылда Петроградта башҡорт ғәскәрҙәре өсөн сығарылған гәзиттең исемен атағыҙ.
7. Башҡорт матбуғатына быйыл нисә йыл тула?
8. Ни өсөн 14 июнь көнө Башҡортостан Республикаһының матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре көнө, тип билдәләнә?
9. "Башҡортостан" гәзите быйыл нисә йыллыҡ юбилейын билдәләй?
10. 1918 йылда Башҡортостан хөкүмәтенең Ырымбур хәрби бүлеге ниндәй гәзит сығара?
11. Совет власы ягына сығыу айканлы Шәйехзада Бабич тарафынан яҙылған башҡорт халҡына шиғри мөрәжәғәт нисек атала?
12. Беренсе башҡорт театрының режиссеры кем?
13. Беренсе башҡорт милли театры ҡасан ойошторола?
14. Башҡортостан мосолмандары диниә назараты быйыл үҙенең нисә йыллыҡ юбилейын билдәләй?
15. Башҡорт теле ҡасан Башҡортостандың дәүләт теле тип иғлан ителә?
16. Башҡортостан автономияһының тәүге байрағы ҡасан ҡабул ителә?
17. Башҡорт әҙәби теле ҡасан булдырыла?
18. Беренсе булып Башҡортостандың халыҡ сәсәне исеменә лайыҡ булған шәхес кем?
19. Башҡортостан автономияһының тәүге байрағы ниндәй төҫтәрҙән торған?
20. 20-се йылдар аҙағында башҡорт теле ғәрәп графикаһынан ниндәй графикаға күсерелә?

**Азат ЯРМУЛЛИН төҙөнө.**

**(Дауамы. Башы 13-сө биттә).**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Март (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (18) дүшәмбе | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 18:06 | 19:36 | 21:06 |
| 26 (19) шишәмбе | 5:36 | 7:06 | 13:30 | 18:08 | 19:38 | 21:08 |
| 27 (20) шаршамбы | 5:34 | 7:04 | 13:30 | 18:10 | 19:40 | 21:10 |
| 28 (21) кесе йома | 5:31 | 7:01 | 13:30 | 18:12 | 19:42 | 21:12 |
| 29 (22) йома | 5:29 | 6:59 | 13:30 | 18:14 | 19:44 | 21:14 |
| 30 (23) шәмбе | 5:26 | 6:56 | 13:30 | 18:16 | 19:46 | 21:16 |
| 31 (24) йәкшәмбе | 5:24 | 6:54 | 13:30 | 18:18 | 19:48 | 21:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 март "Нәркәс"** (И. Йомағолов), трагедия 12+
**27 март "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия 12+
**28 март "Иң бәхетле төн!"** (А. Касона), мелодрама 12+
**29 март "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27 март** Театр көнөнә арналған тамаша 6+
**28 март "Йәшәгән ти..."** (М. Ладо), драмеди 16+
**29 март "Пес Барбос и фантастический кросс"** (И. Казакова), әкиәт. 12.00, 14.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23-24 март "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 16.00 0+
**23 март "Игра в прятки"** (Н. Шувалов). 12.00, 14.00 0+
**24 март "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+
**27 март "Девочка и пришелец"** (Б. Хан). 12.00, 14.00 0+
**28 март "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**29 март** - билдәле йырсы, халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты **Искәндәр Ғәзизовтың** концерты. Түбәндәге һорауҙарға беренсе булып дөрөҫ яуап биреүсе концертҡа ике кешелек саҡырыу ҡағыҙы отасаҡ. Тел.: 89177701719

### Кем алыҡ?

1. Искәндәр Ғәзизовтың тыуған ауылы, районы?
2. Нисәнсе йылда "Гәлсәр һандуғас" телевизион конкурсында ҡатнаша?
3. Бөгөнгә көндә филармонияның ниндәй эстрада төркөмөндә эшләй?

ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# КӨҘӘН БАШҠОРТО

**Театр сәнғәтендә тәүгеләрҙән булып Әхмәтзәки Вәлиди роле Салауат башҡорт дәүләт театры сәхнәһенә сыға. Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Миңнулла ИҘРИСОВ менән уның артист яҙмышына яҙған ошо спектакль һәм уның роле тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**



**▸ Әхмәтзәки Вәлиди - бик ҡатмарлы заманда йәшәүсе ябай булмаған яҙмышлы шәхес. Актер булараҡ, был ролегеҙҙе ниндәй итеп хәтерләйһегеҙ?**

- "Көҙән башҡорто" тип аталды был спектакль. Күптәр, айырыуса йәштәр, уны күреп тә өлгөрмәгәндәр. 4-5 йыл тирәһе барҙы ул. Һәр хәлдә, 2000 йылдар башы булһа ла, был шәхес тураһындағы тәүге спектакль "Көҙән башҡорто". Уны режиссер Наилә Байкова-Сәфәрғәлиева драматург Нәжиб ағай Асанбаевтың трилогияһынан бер сәхнә әҫәре итеп әҙерләне. Әҙерлек эштәре оҙаҡ барҙы. Булған мәғлүмәттәрҙе өйрәнергә тырыштым. Әхмәтзәкиҙең тыуған ауылы Көҙәнгә 4-5 тапҡыр ғына барғанбыҙҙыр ул. Музей ҙур ярҙам күрһәтте. Тап унда мин уның тауышы, йырлауы яҙҙырылған яҙмаларҙы тыңланым. Спектаклгә матур бер элемент булып инеп киткән янсыҡ - һөйгәне Нәфисәнең бүләге лә ошонда һаҡлана ине. Яңылышмаһам, уны аҙаҡтан ҡыҙы алып ҡайтып бүләк итә.

**▸ Спектаклдә Әхмәтзәки һәм йәш Әхмәтзәки роле бар. Йәш Әхмәтзәки, аңлашыла, ярһыу холоҡло, үҙ-үҙенә, үҙенең эшенә ышанған кеше, үҙе ҡанун, үҙе хөкөм, тигәндәй. Ә һеҙ уйнаған Әхмәтзәки ниндәй?**

- Спектаклдә улар осрашмай, йәш Әхмәтзәки уның хәтирәләрендә генә. Минең ролем героик образ булыуҙан бигерәк, шәхестең драмаһын күрһәтә. Ысынлап та, ул бөйөк шәхес. Һәм был спектакль бөгөнгө көндән ул йәшәгән һәм эшләгән дәүергә ниндәйҙер тарихи анализ бирергә ынтылмай ҙа. Уның донъя тарихындағы, фәнендәге урынын да билдәләү мөһим түгел ине. Беҙ ошо шәхесте аңларға, уның әсенеүҙәрен, тынғыһыҙ күңелен тойорға тырыштыҡ. Театр бит, тәү сиратта, тәрбиәләргә тейеш.

Һәм ниндәй генә дәрәжәләргә өлгәшһә лә, ул күңелендә үҙ иленең улы, Көҙән башҡорто булып ҡала. Ошо ерҙе, ошо илде һағынып йәшәй ул. Ҡайтырына ла өмөтләнә. Тик был өмөтә аҡланмай. "Кәберемә Көҙән башҡорто тип яҙығыҙ", - ти. Шулай итәләр ҙә. Эмиграцияға дусар булған һәр башҡорттоң үҙенең көҙәне булған, быныһын беҙ шикләнмәй әйтә алабыҙ. Шуға ла уны ошо яҡтан асырға тырыштым.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

ӨФӨЛӘ БАР БЕР ЙОРТ...

# ВӘЛИДИ УҠЫТҠАН, БАБИЧ УҠЫҒАН...

**Башҡортостан Республикаһы - Рәсәй федерализмына тәүге нигеҙ ташы һалған республика барлыҡҡа килеүгә 100 йыл тулған был көндәрҙә автономия бишеге булған Ырымбур, уның тәүге баш ҡалаһы Темәс, Стәрлетамаҡ ҡалаларын күберәк телгә алһаҡ та, Өфөлә лә автономия яулауға бәйле биналар бар. Уларға ҡыҫҡаса экскурсты ошо тема менән ныҡлап шөғөлләнгән әүҙем авторыбыҙ, тарихсы, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты Азат ЯРМУЛЛИН үткәрә.**

- Тәү сиратта бындай биналар рәтенә күп шәхестәребеҙ белем алған "Ғәлиә" мәҙрәсәһен индерер инем. Ул дини юғары белем биргән уҡыу йорто тип һаналһа ла, ҡалған предметтар буйынса гимназия кимәлендә тора, ғәрәп, урыҫ, төрки, француз телдәрен өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирелә, психология, педагогика фәндәре лә төплө уҡытыла. "Ғәлиә" мәҙрәсәһендә төрки халыҡтарҙың тарихын танылған шәркиәт белгесе, һуңынан башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе булып киткән Әхмәтзәки Вәлиди уҡыта. "Ғәлиә" мәҙрәсәһен тамамлаған шәкерттәр һәйбәт белемгә эйә көслө шәхес, Рәсәй ҡалаларында һәм ауылдарында ғына түгел, сит илдәрҙә лә үҙҙәренә эш урыны табырлыҡ бик уҡымышлы кешеләр булып сыға. Уларҙың байтағы һуңынан үҙ илендә милли азатлыҡ хәрәкәтенә етәкселек итә: Нуриәғзәм Таһиров, Кәрим Иҙелгужин, Муса Смаҡов, Шәкир Төхвәтуллин һәм башҡа бик күптәр. Ә Шәйехзада Бабич иһә киң билдәле шағир булып китә, башҡорт милли хәрәкәте етәкселәренең берсе, рухи йүнәлеш биреүсеһе булып танылд. "Ғәлиә"нең етәксеһе күренекле дин әһеле Зыя Камали ҙа Башҡортостан автономияһы яҡлы кеше була.

Шулай уҡ бөгөнгө Башҡортостан Хәрби комиссариаты урынлашҡан бинаны (К. Маркс - Коммунистик урамдары киҫелешендә) ла атап китергә кәрәк, элек бында "Оло Себер" ҡунаҡханаһы урынлашҡан. 1918 йылдың сентябрендә бында большевиктарға ҡаршы көстәрҙең Өфө дәүләт кәңәшмәһе үтә. Унда Башҡортостан хөкүмәте вәкилдәре, шул иҫәптән Әхмәтзәки Вәлиди, Юныс Бикбов һ.б. ҡатнаша. Йыйылыш барған көндәрҙә Ғәлимйән Таған етәкләгән 3-сө Башҡорт пехота полкы Өфөлә тәртип һаҡлай. Бында Бөтә Рәсәй Ваҡытлы хөкүмәте ойошторола. Бер аҙна тирәһе Өфө ҡалаһы антибольшевистик Рәсәйҙең баш ҡалаһы ролен үтәй.

Әммә иң иҫтәлекле урын тип Башҡортостан Республикаһының Милли музейы урынлашҡан бинаны әйтер



инем. Ул Башҡортостан Хөкүмәтенең Өфө ҡалаһындағы беренсе резиденцияһы була. Уҙған быуаттың 20-се йылдарында бында билдәле дәүләт эшмәкәрҙәре: Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты рәйесе Хафиз Ҡушаев һәм БАССР Башсовнаркомы рәйесе Муллаян Халиҡов эшләй. Улар йәш Башҡортостан Республикаһының аяҡҡа баҫыуына ҙур өлөш индерә. Ошо көндәрҙә премьераһы булған һәм прокатҡа сыҡҡан Булат Йосопов төшөргән "Беренсе Республика" фильмында ла был бина мәңгеләштерелеп, хроникаға әләгә. Әммә, үкенескә күрә, бинаның үҙендә заманында бында БАССР Хөкүмәте урынлашыуы, унда билдәле дәүләт эшмәкәрҙәре Х. Ҡушаев, М. Халиҡовтың эшләүе тураһында бер ниндәй билдә лә, иҫтәлекле тakтаташ та юҡ. Бәлки, тантаналар ваҡытында унда иҫтәлекле билдә ҡуйылыр, тип өмөтләнергә генә ҡала.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НИҢӘ БЕҘҘӘ...

## был тиклем әҙәп ҡыҫҡа?

Ат, кешегә ярайым, тип, муйынына ҡамыт кейгән.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Камиллыҡ былай торһон, аҡыл осто!

Бер ергә килештереп хат яҙа алмай -
Берәүҙе яманлауға ҡалай оҫта!

**(Аҡмулла).**

Эй, Халыҡҡа аҡыл өйрәтеүсе аҡыллы баш!

Халыҡ алдына кәпәсеңде һалып сыҡ, ҡорҙаш!

**(Рәшит Шәкүр).**

Матди байлыҡ - йәшәү нигеҙе булһа, рухи байлыҡ - йәшәү ҡото. Мәңге йәшәр йәнебеҙ матди байлыҡтан түгел, ҡоттан көс-ҡеүәт ала.

**(Мәрйәм Бураҡаева).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше йәйге эҫе көндә бер яңғыҙы ғына юлдан атлап килә. Яңғыҙы булғанға кинәнә ул, йәнәшендә кеше булһа, ҡурҡыр ине һымаҡ тоя үҙен. Әммә тора-бара эргәһендә кеше юҡлыҡтан ҡурҡа һәм йүгерә башлай. Үҙ аяҡтарының йүгергән тауышын ишетеп, тағы ла нығыраҡ ҡурҡа һәм тағы ла нығыраҡ йүгерә. Кемдер артынан ҡыуа төшкәндер, тип уйлап, күҙ ҡырыйы менән генә артҡа ҡарай һәм... артынан ҡалмай йүгергән оҙон күләгәне шәйләй. Ни тиклем шәберәк йүгерһә, күләгә лә уның артынан ҡалмай йүгерә. Үҙенең аҡылдан яҙа барғанын да аңламай ул. Төн етә, һәм кеше уның артынан ҡыуыусы юҡлығын шәйләп, туктала. Әммә таңдың тәүге нурҙары менән уның эргәһендә тағы баяғы күләгә пәйҙә була, кеше тағы йүгереп китә. Артабанғы көндәрҙә кеше баяғы күләгәне ҡыуып еткермәйем, тип, төнөн дә туктамай йүгереүен дауам итә. Аҙаҡ килеп, был кеше үҙ күләгәһенән ҡурҡыуынан тамам аҡылдан яҙа. Ә уны күргән кешеләр, был ниндәйҙер спорт төрө менән шөғөлләнә, тип, артынан һоҡланып ҡарап ҡала. Кемдер артынан сәскә һибә, кемдер ашарға тоттора. Ә кеше йүгерә-йүгерә лә, бер көн килеп йөрәге шартлап, йән бирә. Халыҡ уны хөрмәтләп ерләй һәм дин әһеленән ҡәбер ташына ниндәй һүҙҙәр яҙырға кәрәклеген һорай. Дин әһеле шундай һүҙҙәр яҙҙыра: "Был ҡәберҙә ғүмер буйы үҙ күләгәһенән ҡурҡып ҡаскан һәм ғүмерен заяға үҙғарған кеше ерләнгән. Үлем - ул беҙҙең күләгә. Унан ҡасыуҙы дауам итеп, беҙ бер ваҡытта ла туктала һәм уның нимә икәнен белә алмаясаҡбыҙ. Әгәр ҙә был кеше тукталһа, үҙ күләгәһенән ҡыуыусының ни икәнен белер һәм, моғайын, үҙ-үҙенән көлөр ине. Бер кем дә бер ҡасан да үҙ күләгәһенән ҡаса алмай. Бер кем дә күләгә менән көрәштә еңә лә алмай. Әммә был, күләгә көслөрәк һәм беҙгә еңеү яулау мөмкин түгел, тигәнде аңлатмай, был - күләгә юҡ икән, еңеү тураһындағы һүҙ ҙә юҡ, тигәнде аңлата. Булмағанды еңеү мөмкин түгел. Бына шуға ла кешеләрҙе үлем еңә: сөнки үлем - ул тормош күләгәһе".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 232